ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

14-20 июнь (һөтай) 2024

№23 (1116)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:**


**Рух ныҡлығы ҡоралдан көслөрәк**




3

**Салауат Юлаевтың ҡулға алыныуы**



7

**Салауат батыр ир ине,**

йәки Үлемһеҙлеккә илткән бер йыл



8-10

**Башҡорт һабантуйы**



12-13


@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Арзанға яҙылып ҡал!** 10 июндән 20 июнгә тиклемгә ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индексы "Киске Өфө"гә 2024 йылдың икенсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 786 һум 24 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә матур ғына китаптарға лайыҡ буласағын да онотмағыҙ.*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

АТЫҢ КЕМ?



# ҠАРТАТАЙЫМ ҠУШҠАН...

## ҺОРАУ: "Салауат исемен йөрөтөү ниндәйҙер яуаплылыҡ өҫтәйме?"

***Салауат ДӘҮЛӘТОВ, Магнитогорск металлургия комбинаты инженеры:*** Был исемде миңә ҡартатайым ҡушҡан. Тиҙҙән миңә илле йәш тула, ә ҡартатайым вафат булғанда миңә 8-9 йәш тирәһе булғандыр, шулай ҙа уны яҡшы хәтерләйем. Атайым менән әсәйем һөйләүенсә, атеизм заманында йәшәһә лә, ул динле, рухлы һәм белемле кеше булған. Шуға ла миңә Салауат тип исем ҡушҡанда иң тәүҙә был һүҙҙең асылын, мәғәнәһен күҙҙә тотҡандыр. Салауат, мәғлүм булыуынса, ғәрәпсәнән алынған һүҙ һәм ул "доға, маҡтау һүҙе, фатиха" тигәнде аңлата. Икенсенән, был милли батырыбыҙ Салауат Юлай улының исеме булараҡ та ҡартатайым иғтибарын йәлеп иткәндер, әлбиттә. Ҡыҫҡаһы, ҡартатайымдың үҙенең тәүге ейәнен тәүфиҡлы, белемле, ҡыйыу, маҡсатына ынтылышлы бала итеп күрергә теләгәнен һәм үҙемдең ниндәй ҙур исем йөрөтөүемде бәләкәйҙән үк белә һәм аңлай инем инде. Сөнки бәләкәй булһам да ҡартатайымдың Салауат батыр хаҡында һүҙҙәре лә иҫемдә ҡалған; атай-әсәйемдең дә гел ҡабатлап-иҫкәртеп тороуҙары күңелемә һеңгән.

Бөгөн ҡартатайым иҫән булһа, уға минең өсөн ҡыҙарырға тура килмәҫ ине - шуныһына иманым камил. Уның ҡарауы, атайым менән әсәйем минең өсөн шатланып, уңыштарыма һөйөнөп, күтәрмәләп, һәр саҡ янымдалар. Дөрөҫ, әллә ниндәй бейеклектәр һәм билдәлелек яулап, ғәжәп эштәр башҡара алмаһам да, мәктәпте алтын миҙалға тамамлап, юғары техник белемгә эйә булдым; илебеҙҙә генә түгел, донъя күләмендәге иң эре ҡорос етештереүсе комбинаттарҙың береһендә ғүмер буйы эшләп йөрөйөм, маҡтаулы исемдәргә, орден һәм миҙалдарға лайыҡ булдым; яратҡан ғаиләм бар, ике улым да минең юлды һайлап, техник һөнәргә эйә булдылар; өлкәне ошо уҡ комбинатта эшләй. Үҙем дә, улдарым да "Салауат Юлаев" хоккей командаһының тоғро көйәрмәндәребеҙ: "өйҙәге" уйындарҙы ҡалдырмаҫҡа тырышабыҙ һәм Өфөлә йыш булабыҙ. Степан Злобиндың "Салауат Юлаев" романы ғаиләбеҙҙең яратҡан китаптарының береһе. Мин үҙем батырыбыҙ Салауат Юлай улы хаҡындағы тарихи-архив материалдары менән танышып барырға тырышам. Әлеге ваҡытта Салауат Юлаевтың тыуған ауылы Тәкәйҙә батырыбыҙға бағышланған "Салауат ере" мемориаль паркының төҙөлөп бөтөүен түҙемһеҙлек менән көтәбеҙ һәм мотлаҡ унда барып ҡайтасаҡбыҙ!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Милли матбуғатты алдыраһығыҙмы, уны баһалайһығыҙмы?

***Әлфис ҒАЯЗОВ, БР Мәғарифты үҫтереү институты ректоры, педагогия фәндәре докторы:*** Шундай бер хыялымтеләгем бар: бала булған һәр өйгә гәзит-журналдар килһен ине. Беҙ тап шулай "Башҡортостан пионеры"нда үҫтек бит, туған телдең барлыҡ нескәлектәрен, мәғлүмәтте шул гәзиттән алдыҡ. Ҡыҙғаныска күрә, бөгөн бала-сағаға, өлкәндәргә тиҙ генә барып етә торған баҫма ҡалманы. Аҙнаһына бер килә бөгөн баҫмалар, уға тиклем бөтә мәғлүмәтте интернеттан ҡырҡ тапҡыр уҡып-күреп белеп бөтәһең. Шуғалыр ҙа икеөҫтән артыҡ баҫманы өйгә алдырып та булмай.

Бөгөнгө баҫма матбуғаттың функциялары үҙгәрергә тейеш һәм ул яңылыҡ еткереүҙә радио-телевидениены, интернетты уҙҙыра алмай икән, кешене уйланырға этәрерлек, күңел ҡылдарын тирбәлтер мәҡәләләре менән арбарға тырышһын. Милли матбуғатта аналитик мәҡәләләргә күберәк урын бирелһә, яҡшы булыр ине. Әммә аналитика яҙыусы журналистар ҙа хәҙер һирәк, сөнки бының өсөн белем, донъяға киң ҡараш, тәжрибә кәрәк һәм күп кеше был эшкә тотона алмай. Шулай ҙа уҡыусыны уйландырырлыҡ, ниндәйҙер осраҡтарҙа дөрөҫ фекер йөрөтөргә этәрерлек, тулҡынландыра торған мәҡәләләр көҫәйбеҙ ваҡытлы матбуғаттан.




ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# САЛАУАТҠА ӨНДӘШӘМ

(Эссе)

**Фани донъяға килгән һәр әҙәм балаһының шәхси яҙмышының, ул бәхетле булмаһа ла, бағыйлыҡҡа күскәнсе, ил һәм халыҡ яҙмышынан айырылғыһыҙ булыуы барыбыҙға ла мәғлүм. Заман башҡа - заң башҡа, тигәндәй, һәр тарихи осорҙоң үҙенә генә хас ижтимағи, иҡтисади һәм сәйәси ихтыяждары булып, әҙәми зат та ошо заман ҡаҙанында ҡайнап йәшәйҙер. Бәғзе берәүҙәр үҙенә яҙғанын күҙгә-башҡа артыҡ салынмай, тын күлдәге балыҡ һымаҡ, шым һәм вайымһыҙ ғына йәшәп уҙғара, ә икенселәренең ғүмере, иркен тын алып була торған сафлыҡ алып килеүсе дәшһәтле, йәшенле-күкрәүле дауыл кеүек, тиҙ генә үтеп китә лә, халыҡ күңелендә һис юйылмаҫлыҡ эҙ ҡалдыра.**

(Дауамы 2-3-сө биттәрҙә).

12+

АТЫҢ КЕМ?



# АРМИЯЛА ҺАБАҠ АЛДЫМ...

**ҺОРАУ: "Салауат исемен йөрөтөү ниндәйҙер яуаплылыҡ өҫтәйме?"**

***Салауат ӘЛИМҒОЛОВ, Мәләүез районы, вахта ысулы менән эшләүсе:*** Армияға барғансы үҙемдең кем исемен йөрөтөүем тураһында төптән уйланғаным булманы. Өлкән ағайымдың исеме Тәлғәт, икенсеһе - Азамат, мин - Салауат. Улдарымдың исем-шәрифе бер-береһенә ауаздаш булһын тип ҡушҡандарҙыр, тип уйланым.

Ауылда бер мин генә ошо исемде йөрөтһәм дә, мәктәптә лә бер кем минең кемдең атын йөрөүем хаҡында ҡыҙыҡһынманы ла, һорамаҡы ла, аңлатманы ла. Армияға барғанда ябыҡ, танау аҫтына йөн дә үҫмәгән үҫмер һымаҡ егет инем. Минең бәләкәй кәүҙәле булыуым башҡаларҙың да иғтибарын йәлеп итте. Башҡорт мәктәбендә уҡығас, урыҫса икмәк-тоҙлоҡ ҡына беләм. Белмәһәң, ышанысһыҙ, хатта ҡурҡаҡ булып күренәһең бит ул, мине лә шулай тип уйлағандарҙыр. Хеҙмәт итә башлағас та, "дед"тар ғына түгел, үҙем менән бергә саҡырылғандар ҙа мине ваҡ-төйәк йомошҡа ебәрмәксе булды. Үҙем бәләкәй булһам да, кире холоҡломон. Туҡмалһам да, намыҫыма тейгән йомоштарын башҡарманым.

Сираттағыһында нығыраҡ эләкте. Хатта госпиталдә дауаланырға тура килде. Мин хеҙмәт иткән часть ул ваҡытта ихтирамлы, исеме киң мәғлүмәт сараларында йыш күренгән хәрби часть ине. Минең ауыр хәлдә дауаханаға эләгеүем гәҙәттән тыш хәл һымаҡ ҡабул ителде. Тикшереүселәр килде. Бер һүҙ өндәшмәнем. Ә үҙемдең мейемде иҫән-һау торһам, берәм-берәм тегеләрҙең кәрәген биреү тураһында уй бырауланы. Командирым һиҙеп ҡалды. Көн һайын эргәмә килә, төрлө аңлатыу эше алып барған була. Бер килгәнендә: "Салаватка, - тип өндәшә был. - Һин бит башҡорт! Мин башҡорттарҙы яратам. Ошо йәшкә тиклем бик күп милләттәштәрең менән осрашырға тура килде. Армияла береһе лә һынатманы. Ҡайҙан килә ундай көс, ныҡышмаллыҡ һәм рух, тип уйлай торғайным. Бер көндө бер яҡташыңдың мендәр аҫтында Степан Злобиндың Салауат Юлаев тураһында китабы ятҡанын күрҙем. Алдым да уҡып сыҡтым һәм барыһын да аңланым".

Мин һүҙһеҙ ҡалдым, легендар шәхес тураһында бер һорауына ла яуап бирә алмайым. Ул ваҡытта башҡорт халҡының милли улы исеме әлеге кеүек ныҡ таралмағайны. Минең дә был китапты уҡып ҡарағым килде. Өйҙәгеләргә ошо китапты табып ебәреүҙәрен һорап хат яҙҙым. Китапхана ла, китап магазины ла булмаған ауылда йәшәгән әсәй менән атай, әлбиттә, уны минә ебәрә алманы.

Әммә командирҙың башҡорттарҙы ни өсөн яратыуы хаҡында һөйләгәненән ҙур һығымта яһаным һәм үҙем өҫтөндә эшләй башланым. Быға тиклем саҡ ҡына буш ваҡытым булыу менән йоҡлау тураһында уйлай инем. Хәҙер йоҡоно ҡыҫҡарттым. Барыһынан алда тороп, күнекмәләр эшләнем, турникта күтәрелдем, алыҫ араға йүгерҙем. "Мин бит милләтемдең бер вәкиле. Бәлки, миндә мәңгеләгән кешене гәҙелһеҙлеккә ҡаршы яуға күтәргән Салауаттың ҡаны ағылыр. Минә ҡарап, башҡорттарыма, яҡташтарыма ҡарата фекер барлыҡҡа киләсәк", тигән уйҙан сығып, бөтә ерҙә лә үҙемде лайыҡлы тоторға тырыштым. Армиянан бер башҡа үҫеп, нығынып ҡайттым. Салауат исемен йөрөтөү, ысын мәғәнәһендә, ҙур яуаплылыҡ икәнен аңланым һәм ғүмер буйы уны лайыҡлы йөрөтөргә тырыштым.

**Лена СӘЛИХОВА яҙып алды.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

**(Башы 1-се биттә).**

# САЛАУАТҠА ӨНДӘШӘМ

**(Эссе)**

Беҙ Салауат батырыбыҙҙы ла ошондай дауыл тыуҙырған шәхестәр иҫәбенә индерәбеҙ. Беҙгә, уның хәҙерге замандағы ҡан-ҡәрҙәштәренә, Салауаттың изге исеме бала саҡтан уҡ таныш һәм ҡәҙерле. Шуныһы ҡыуаныслы, башҡорт батырының исеме бөгөн Рәсәйҙә генә түгел, донъяның бик күп илдәрендә танылыу табып, йөҙәрләгән телдәрҙә яңғырай. Беҙ, Ер кешеләре, Салауат, тибеҙ икән - батырыбыҙҙың һәр кем үҙенсә күҙ алдына килтергән һыны һаман да тере булғандай, һәм Салауат батыр ошо рәүешле баҡыйлыҡтан фанилыҡҡа яңынан әйләнеп ҡайтҡандай тойола. Ошо күренеш үҙе үк үлемһеҙлеккә тиң түгелме ни!

...Әгәр минә, башҡорттоң бихисап азатлыҡ ихтилалдарында әүҙем ҡатнаша килеп, яртылаш ҡырылып бөткән Әйле ырыуының бөгөнгө бер вәкиленә, Мәңгелек Зәңгәр Күккә олғашҡан батыр рухы менән ысынлап аралашырға, әңгәмәләшергә яҙһа, уға нимәләр һөйләр инем дә, бөгөнгө хәл-торошобоҙҙо нисегерәк аңлата алыр инем? Мин инде хәҙер ике быуаттан әүәлерәк баҡыйлыҡҡа күскән батыр йәненең гәзиз халҡынан саф башҡорт телендә ниндәй хәбәрҙәр көтөүен һиҙемләйем кеүек, һәм үҙемдең уға ниҙәр әйтеремде лә ап-асыҡ тәҫмөрләйем:

- Һаумы, Салауат, һаумы башҡорт иленең мәңгелек батыры! Һинең баҡый донъяла ла башҡортлоғоң - баш ирлегендә һаҡлап ҡалып, үҙ асылына тоғро бер йыһангир йән булыуыңа ысын күңелдән ышанабыҙ. Үҙ илеңдән, Уралыңдан доға-сәләмдәр көтөп зарыҡҡанһыңдыр инде: ике быуат дауамында күп үҙгәрештәр булһа ла, туған халҡың иҫән-һау, Башҡортостан атлы тыуған илең имен-аман әле. Ҡаратауыңда һаман йөҙйәшәр имәндәр үҫә, Йүрүҙәнең дә яҙҙар килгән һайын шаулап-гөрләп, әүәлгесә ташып-ашҡынып ала, Янғантауыңдың да янып бөтмәгәне раҫ. Яҡташтарың ырыу-нәҫел ерҙәрегеҙҙең бөгөн һинең исемең менән аталыуына ифрат ҡыуанһа, бынан тап етмеш йыл элек һинең исемеңә лайыҡ булған Салауат ҡалаһы ла башҡорт батыры ҡаһарманлығына бер һәйкәл булды. Аллаға шөкөр, аҫыл хазиналай үҙ телебеҙҙә һөйләшәбеҙ, динебеҙҙән яҙа яҙһаҡ та, күптәребеҙ мосолманлыҡ асылына кире ҡайта бара. Меңәр йылдар дауамында дәшһәтле тарих боролмаларында юғалып юҡҡа сыҡмаған халҡыбыҙ бөгөн дә үҙ-үҙен һаҡлап ҡалыу мөмкинлеген мотлаҡ табыр, тип ышанабыҙ.



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Милли матбуғатты алдыраһығыҙмы, уны баһалайһығыҙмы?

***Фәнзил САНЪЯРОВ, Рәсәйҙең мәғариф алдынғыһы, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты:*** Милли матбуғат бөгөн башҡорт милләтен берләштереүҙә, рухын, әҙәбиәтен һәм телен үҫтереүҙә, бөгөнгө ауыр шарттарҙа йәшәүгә ышанысын арттырыуҙа бик әһәмиәтле урын биләй. Кешегә һыу һәм һауа нисек кәрәк булһа, гәзит-журналдарыбыҙ ҙа шул ҡәҙәрем кәрәкле. Әммә был хаҡта бик күптәр уйланмай: баш ҡалабыҙҙа туғыҙ ҡатлы йортта йәшәп, нисәмә йылдар подъезда бер мин генә гәзит-журналдар алдырып уҡыйым. Хатта почта хеҙмәткәрҙәре ҡайһы осраҡта: "Беҙгә эш өҫтәп, нишләп шул тиклем гәзиттәргә яҙылаһығыҙ?" - тип битәрләйҙәр, йәнәһе, уларға мәшәҡәт тыуҙырам. Ни эшләйһең инде, кемгә мәшәҡәт, кемгә рухиәт.

Хәҙерге шарттарҙа артыҡ күп баҫмаларҙы алдыра алмаһам да, беҙгә һәр ваҡыт "Башҡортостан" һәм "Киске Өфө" гәзиттәре, "Башҡортостан уҡытыусыһы" һәм "Ағиҙел" журналдары килә. Ә инде Рәсәйҙә һәм республикала нәшер ителгән башҡа баҫмаларҙы интернет селтәрендә күҙәтеп барам, бөгөн бындай мөмкинлек тә бар. "Киске Өфө" гәзите тураһында әйткәндә, уның аудиторияһы ҙур - уҡытыусылар, педагогтар, тәрбиәселәр гәзите ул. Сөнки башҡорт мәҙәниәте, тарихы, теле һәм әҙәбиәтенә ҡағылышлы бик матур мәҡәләләр бирелә. Айырыуса башҡорт халҡының боронғо тарихына ҡағылышлылары йылдар дауамында донъя күрә. Әбделҡадир Инан, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Әхмәтзәки Вәлиди кеүек күренекле ғалимдарыбыҙҙың һәм башҡа зыялыларыбыҙҙың хеҙмәттәрен әле һаман баҫтырып килеүе өсөн дә баһалы "Киске Өфө". Милләтебеҙгә хеҙмәт иткән әһәмиәтле баҫмаларҙың береһе ул "Киске Өфө".

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓15 июндә Башҡортостандың Милли музейы филиалында - Салауат Юлаев музейында "Батырҙар тыуҙырған төйәк: илһөйәрлек призмаһы аша Салауат Юлаев образы" тигән ғилми-ғәмәли конференция була. Конференцияла Салауат Юлаев иҫтәлеген һаҡлау һәм образын популярлаштырыу йәһәтенән эшмәкәрлек йүнәлештәре билдәләнә. Мәҙәни программа көнөндә музейҙа һәм майҙансыҡта "Салауат Юлаев: батырҙан легендаға тиклем" планшет күргәҙмәһе эшләй. Конференцияны үткәреү урыны: Салауат районы, Малаяҙ ауылы, Совет урамы, 61а йорт.

✓Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумы майҙансығында Радий Хәбиров Иран Ислам Республикаһының Рәсәй Федерацияһындағы ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы илсеһе Казем Джалали менән осрашты һәм Иран президенты Ибраһим Раисиҙың һәм Иран делегацияһы ағзаларының фажиғәле һәләк булыуы айҡанлы ҡайғы уртаҡлашты һәм республикабыҙҙың Ислам республикаһы халҡы менән бергә ҡайғырыуын белдерҙе.

✓Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында Башҡортостандың Сәнәғәт министрлығы республикала пилотһыҙ авиасистемалар тармағын үҫтереү һәм уға ярҙам итеү тураһында "Милли технологик башланғыс платформаһы" ойошмаһы һәм РВ-1 радиоэлектрон технопарк менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөнө. Хеҙмәттәшлек сиктәрендә БПЛА-ны үҫтереү буйынса төбәк ғилми-етештереү үҙәге булдырыла, шулай уҡ яңы кадрҙар әҙерләү буйынса берлектәге белем биреү программалары әҙерләнә.

✓Башҡортостанда мал аҙығы әҙерләү эштәре башланды. Дөйөм алғанда, төбәк аграрийҙары алдында бер баш малға кәмендә 26 центнер тупаҫ һәм һутлы мал аҙығы берәмеге әҙерләү бурысы тора, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығында. Быйылғы миҙгелдә мал аҙығы культуралары 590 мең гектарға яҡын майҙанды биләй. Шул иҫәптән 160 мең гектарҙан ашыу майҙанда мал аҙығы культуралары сәселгән, улар бөтәһе 175 мең гектарҙы биләрgә тейеш.

✓Башҡортостан спортсылары Пермдә Рәсәй чемпионатында 19 миҙал яулап, Монголияла уҙырға тейешле донъя чемпионатына юллама отто. Ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар араһында билбау көрәше буйынса ил ярыштарында Рәсәйҙең 24 төбәгенән 230 спортсы ҡатнашты. Турнирҙа яҡташтарыбыҙ өс алтын, дүрт көмөш һәм 12 бронза миҙал алды.

✓ *Халҡың һине онотманы, һинең батшалар тарафынан тыйылған исемең уның йөрәгендә, күңел түрендә урын тапты. Юҡ, бөгөн һин бары тик хыял ғына булып ҡалыу халәтенән сығып, тормошобоҙ ысынбарлығына әйләндең.*



Әлбиттә, көнитмешебеҙҙә, рухи торошобоҙҙа барыһы ла ал да гөл түгел, изге батырыбыҙ. Исемең телебеҙҙән төшмәһә лә, рухи асылыңды аңлағандарҙың ғына йөрәгенә ул изге доға булып инәлер, ә ундай инсандар һинең дәүерҙә лә йәшәне, хәҙер ҙә барҙар.

Һиңә әйтер һүҙҙәрем әллә нисәмә көндәр буйы дауам итерҙәй телмәргә әйләнер ине, шуға күрә теләгәндәремдең, уйҙарымдың иң мөһимдәрен генә һайлап алырға мәжбүрмен. Ә иң мөһиме шул инде: халҡың һине онотманы, һинең батшалар тарафынан тыйылған исемең уның йөрәгендә, күңел түрендә урын тапты. Юҡ, бөгөн һин бары тик хыял ғына булып ҡалыу халәтенән сығып, тормошобоҙ ысынбарлығына әйләндең. Мөһабәт һын-образың халҡың һине һағынып-юҡһынып сығарған йыр-ҡобайырҙарҙа, риүәйәт-легендаларҙа йәшәй, шағирҙар, яҙыусылар йөҙәрләгән шиғыр-поэмаларында, хикәйәттәрендә, романдарында, башҡа бихисап сәсмә әҫәрҙәрендә һиңә дан йырлай. Төҫ-ҡиәфәтеңде һис бер ҡасан күреп белмәгән хәлдә лә, рәссамдар төҫлө буяуҙар сағылышында һинең йөҙ-һыныңды ғына түгел, ҡомарланып-илһамланып рухи булмышыңды һүрәтләргә ынтыла. Үҙең тотҡонлоҡ яфаларынан ыҙа сиккән Өфөлә, Ағиҙелдең текә ярында мәңгелеккә туҡталып ҡалған ҡорос атлы һыбайлы башҡорт яугиры ла һин бит ул, Салауат! Әкиәттәрҙә һөйләнгән Ҡаф тауҙары иле инсаны, ғорур һәм саф күңелле осетин дуҫың Сосланбәк Тавасиев батырлығыңа, рухи ҡаһарманлығыңа үҙ ҡулдары менән ҡуйған һәйкәл ошолор. Әйтерһең дә, һин һаман заманаларҙың хәтәр елдәренә ҡаршы тороп, халҡыңды ирекһеҙләүгә бирешмәҫкә, хыянатҡа бирелмәҫкә өндәйһең. Һинең яҡты образың уға ғына түгел, урыҫ рәссамы Алексей Кузнецовҡа, скульптор Тамара Нечаеваға, ғалимә Инга Гвоздиковаға, яҙыусы Степан Злобинға һәм башҡа бик күп Рәсәй ижадсыларына һоҡландырғыс әҫәрҙәр тыуҙырырға дәрт-дарман биргәндер.

Һине иҫкә алғанда халҡыңдың үҙеңде тереләй күргәндәй булған мәлдәре тураһында ла әйтеп үтәйем. Кино тип аталған заман сәнғәтенең мөмкинлектәре аша башҡорт егете Арыҫлан Мөбәрәков һинең тере һыныңды күҙ алдыбыҙға баҫтырһа, Заһир Исмәғилев исемле талантлы композиторыбыҙ яҙған музыкаль әҫәрҙә Мәғәфүр Хисмәтуллин тигән йырсыбыҙҙың Салауат булып йырлауы, уның йөрәк түренән сыҡҡан илаһи моңо кемдең генә күңелен тетрәтмәне икән! Былар барыһы ла үҙе бер онотолмаҫ хәтирә рәүешендә халыҡ күңелендә йәшәй һәм йәшәйәсәк.

Бөгөн йәшәйешебеҙҙә интернет тип аталған мәғлүмәт селтәре булып, унда Салауат Юлаев тигән исемдең миллиондан ашыу биттә баҫылғаны үҙе бер ғәжәп күренеш түгелме ни? Тимәк, һинең ҡасандыр яуыз батшалар тарафынан тыйылған данлы исемең, мәғлүмәт арауығында меңәрләгән саҡрым ерҙәрҙе күҙ асып йомған арала үтеп сыға ла, Ер шарының теләһә ҡайһы мөйөшөндә электрон экрандарҙа яҡтырып пәйҙә була. Нисек кенә булмаһын, Салауат, һинең изге образың бөгөн милли һәм дини сиктәрҙе лә уҙып китте. Башҡорт батыры ғына түгелһең, кешелек донъяһының рухи ҡаһармандарының береһе һин, Салауат!

Башҡортостаныбыҙҙа "Салауат Юлаев" тигән ғорур исемде йөрөткән, хоккей тип аталған ирҙәр уйыны командаһы ла бар. Ваҡытында шул команда, Рәсәйҙең башҡа уйынсыларын еңеп, ил чемпионы тигән хөрмәтле титулға лайыҡ булғайны. Ошо иҫтәлекле мәлдә меңәрләгән кеше - башҡорттар, урыҫтар, татарҙар, сыуаштар һәм башҡа бик күптәр урамдарға сыҡты һәм улар, бер туғандай булып, ысын күңелдәренән "Салауат - чемпион!" тигән өр-яңы заман оранын бөтә Рәсәйгә яңғыратты. Һин, Салауат, Пугачев полковнигы, ғәскәр бригадиры булған яугир, көрәш рухын йөрәгең аша үткәргән зат, һүҙ айышын төшөнәһеңдер, тим. Һин шул уҡ урыҫ казактары, татар һәм мишәрҙәр менән бергә яуыз көстәргә ҡаршы барғанда улар ҙа "Салауат!" тип оран һалғандыр кеүек тойола хәҙер...

Эйе, Салауат батыр, һин бөгөн дә дуҫлыҡ, туғанлыҡ, берҙәмлек, арҡадашлыҡ өлгөһө булып, Ватаныңа хеҙмәт итәһең. Шуның өсөн дә йыл һайын Башҡортостаныбыҙҙың төрлө төбәктәрендә, һине ҙурлап-хөрмәтләп, Салауат көндәре байрамы уҙғарыла. Илең, халҡың хәтерендә мәңге йәшәйәсәкһең, изге батырыбыҙ!

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

## ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# РУХ НЫҠЛЫҒЫ ҠОРАЛДАН КӨСЛӨРӘК




**Үткән аҙнаның 5-8 июнь көндәре илебеҙҙең Төньяҡ баш ҡалаһында 27-се халыҡ-ара Петербург иҡтисад форумы булып үтте. Һәр ваҡыттағыса, быйыл да уның эшендә бик күп сит ил вәкилдәре - донъяның 139 иленән 21,3 мең кеше ҡатнашты. Иң ҙур делегация - 192 кеше - Ҡытайҙан килгәйне. Унан ҡала Ғәрәп Әмирлектәренән - 105, Зимбабвенан 80 делегат ҡатнашты. Форум барған дүрт көн эсендә 6,43 триллион һумға торошло 982 килешеү төҙөлгән.**

Форумда ҡатнашыусылар, әлбиттә, РФ Президенты Владимир Путиндың пленар ултырыштағы сығышын ҙур түҙемһеҙлек менән көтөп алды. Һәм, ысынлап та, Рәсәй Президенты иҡтисад өлкәһендә өлгәшелгәндәр менән бергә киләсәккә йүнәлештәр ҙә билдәләне. Мәҫәлән, иҡтисад күләме буйынса Рәсәй Япония менән Германияны ҡыуып үтте, тине ул, ләкин тотороҡлолоҡто һаҡлау өсөн киләсәктә ҙур көс һалырға тура киләсәк. Президент хәрби өлкәлә лә технологик яңырыу кәрәклегенә баҫым яһап, унның юғары кимәлен һаҡлау бурысын ҡуйҙы. Санкциялар һәм ҡаршылыҡтарға ҡарамаҫтан, Рәсәй донъя сауҙаһының төп ҡатнашсыһы булып ҡала, тине Президент һәм тауар әйләнешенең дүрттән өс өлөшө дуҫ илдәргә тура килеүен әйтте.

Ил етәксеһе Арктика һәм Төньяҡ диңгеҙ юлы мәсьәләһенә лә ҡағылып, был өлкәләрҙе үҫтереү маҡсатында Рәсәй Дәүләт Советында махсус комиссия булдырыласаҡ, тине. Социаль өлкә һәм мәшғүллек мәсьәләһе лә иғтибар үҙәгендә. В.Путин Рәсәйҙәге вуздар, колледждар һәм техникумдарҙың эше ошо уҡыу йорттарын тамамлап сығыусыларға ихтыяж һәм уларҙың эш хаҡына ҡарап баһаланасаҡ, тип белдерҙе.

Владимир Владимирович күптән көтөлгән мәсьәлә - эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙың пенсияһын индексациялауға асыҡлыҡ индереп, унның 2025 йылдың 1 февраленән ғәмәлгә ашырыласағын һөйөнсөләне. Рәсәйҙә минималь эш хаҡы күләменең медиан хеҙмәт хаҡына бәйле буласағы һәм киләһе йылдан был күрһәткестең 48 процент тәшкил итеп, 22 мең һумға етәсәге һәм артабан был нисбәттең үҫә барасағы хаҡында һөйләне. Ә быйыл июлдән ташламалы ғаилә ипотекаһының өҫтәлмә программаһы эшләй башлаясағы ла мәғлүм булды.

Төбәк үҫеше мәсьәләһенә ҡағылышлы, Рәсәйҙең төбәктәргә элек бирелгән бюджет кредиттарының өстән ике өлөшө ғәмәлдән сығарылып, был аҡсаны төбәктәр үҫешенә: транспорт, авария хәлендәге йорттарҙан күсеү, юлдар төҙөлөшө һәм халыҡ тормошон яҡшыртыуҙың башҡа өлкәләренә ҡайтарыу пландары хаҡында ла изге хәбәр еткерелде. Шул ыңғайҙан Рәсәйҙәге ҡайһы бер эре компанияларҙың баш офистарын төбәктәргә күсереү идеяһы иғтибарға лайыҡ тип табылыуы һәм был хаҡта ныҡлабыраҡ уйлау кәрәклеге белдерелде.

Сәйәсәт һәм халыҡ-ара мөнәсәбәттәрҙә Владимир Путин Рәсәйҙең БРИКС илдәре менән хеҙмәттәшлегендә ҙур мөмкинлектәр күреүен һәм был берләшмәгә башҡа илдәрҙең дә ҡушылыуын хупланы.

Махсус хәрби операция хаҡында ла һүҙ булды, әлбиттә. Быйыл 160 меңдән ашыу кеше МХО-ла ҡатнашыу өсөн контрактҡа ҡул ҡуйған. Еңеү яулау өсөн ядро ҡоралы түгел, ә теләһә ниндәй төр ҡоралды алыштыра алырлыҡ рус характеры кәрәк, тине В.Путин. Рәсәй етәксеһе кәрәккән-кәрәкмәгәнгә ядро һуғышы ихтималлығы тураһында һүҙ алып бармаҫҡа саҡырҙы. Украина власы узурпацияға бирелгән, ләкин Мәскәү билдәле шарттар нигеҙендә тыныс килешеүҙәргә барырға әҙер, тине Владимир Путин.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? *Милли матбуғатты алдыраһығыҙмы, уны баһалайһығыҙмы?*

***Тәнзилә ДӘҮЛӘТБИРҘИНА, шағирә, Башҡортостандың Шәйхзада Бабич исемендәге йәштәр премияһы лауреаты:*** Мин үҙем "Башҡортостан", "Киске Өфө", "Йәшлек" гәзиттәрен, "Ватандаш", "Шоңҡар" журналдарын алдырып уҡыйым. Ижад кешеһе булараҡ та, Башҡортостан Яҙыусылар берлеге рәйесе урынбаҫары булараҡ та милли матбуғатыбыҙҙы күҙәтеп барыуҙы үҙемдең яуаплы бурысым итеп һанайым. Бер мәл бөтә баҫмалар ҙа электрон вариантҡа күсереләсәк, ҡағыҙ гәзит-журнал уҡыусы булмаясаҡ, тип әйтәләр ине. Әммә был бик дөрөҫ фекер түгел, сөнки халыҡ ҡағыҙ баҫманы алдырып уҡырға ярата, ундағы һүҙгә ташҡа баҫылған тип бик ышана. Шуға бөгөн милли баҫмаларыбыҙҙың даналарын арттырыу өсөн иң төп мәсьәлә почта бүлексәләренең эшен яйға һалыу. Яҙылған гәзит-журналды ваҡытында алып килеп биреүсе булһа, тираждар, һис шикһеҙ, артасаҡ, халҡыбыҙҙың телен, рухын үҫтереүҙә, тормошон яҡшыртыуҙа кәңәшсе һәм тоғро дуҫ булған милли матбуғат йәшәйәсәк.

Ә инде "Киске Өфө" гәзите тураһында телгә алғанда, унның халыҡты тәрбиәләү, күңелен үҫтереү, рухын күтәреү йәһәтенән урыны бик юғары. Был гәзитте уҡыған саҡта дуҫыңдың фекерен ишеткән, кәңәшләшкән кеүек тояһың. Баш ҡала гәзите булараҡ, республикабыҙҙа һәм унан ситтә йәшәгән милләттәштәр менән дә таныштырып, күтәрмәләп эшләп килеүе менән әһәмиәтле был баҫма.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда география, химия һәм әҙәбиәттән уҙғарылған имтихан һөҙөмтәләре хаҡында Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев "Бәйләнештә"ге сәхифәһендә хәбәр итте. Унның һүҙҙәренсә, быйыл республикала химия буйынса йөҙ балл йыйған эштәр - 45. Былтыр улар 18 ине. Быйыл 2423 сығарылыш уҡыусыһы химиянан Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырҙы, уларҙың 630-ы 81 һәм унан юғарыраҡ балл йыйҙы.

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премиялары буйынса комиссия дәүләт премияларына ғаризалар һәм әҫәрҙәр ҡабул итә башланы. Кандидатуралар 2024 йылдың 15 июленә тиклем күрһәтелергә тейеш. Башҡортостандың Яҙыусылар союзында ғаризаларҙы 21 июнгә тиклем ҡабул итәләр. Белешмәләр өсөн телефон: 7 (906) 375-87-09.

✓Дәүләт эшмәкәре Виктор Черномырдин иҫтәлегенә арналған дзюдосылар турниры Ырымбурҙа үтте һәм илдең 31 төбәгенән 322 спортсыны йыйҙы. Башҡортостан спортсылары Илона Новикова, Вадим Ғәлиуллин һәм Артур Иҡсанов алтын миҙалға лайыҡ булды. Илья Бушуев һәм Дарина Никитина "көмөш", ә Элина Новикова, Владислава Порываева, Эрик Әйүпов, Виолетта Рискулова, Кирилл Чернейкин һәм Эрнест Бикбаев "бронза" менән ҡайтты.

✓Башҡортостанда йәшәүселәр өсөн 141 рәсми пляж асылды, тағы ла ошондай 10 һыу инеү урынын әҙерләү эштәре бара. Был хаҡта 6 июндә "Рәсәй" медиаүҙәгендә журналистар менән осрашыуҙа Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы начальнигы Марат Латипов хәбәр итте. Унның һүҙҙәренсә, рәсми пляждар асыуға йәмғеһе 155 заявка ҡабул ителгән, әле уларҙың бер өлөшө ҡарауҙа.

✓Башҡортостанда миҙгел башынан 4,5 мең самаһы кеше талпандан зыян күргән. Роспотребнадзорҙың республика идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, бөгөнгә медицина ойошмаларына талпан ҡаҙалыуға бәйле 4459 кеше мөрәжәғәт иткән. Уларҙың һәр өсөнсөһө - бала. Әлеге күрһәткес былтырғыға ҡарағанда 27,5 процентҡа аҙыраҡ. Республикала халыҡ күп йөрөгән урындарҙы акарицид ярҙамында эшкәртеү эштәре бара.

ҠЫҪҠАСА

# ЭШЛӘП ЙӨРӨҮСЕ ПЕНСИОНЕРҒА...

**Рәсәй Хөкүмәте киләһе йылдың 1 февраленән эшләп йөрөгән пенсионерҙарҙың пенсияһын арттырыу өсөн саралар күрергә тейеш.** Премьер-министр Михаил Мишустин вице-премьерҙар менән кәңәшмәлә ошо хаҡта белдерҙе. "Киләһе йылдың 1 февраленән эшләгән граждандарҙың пенсияһы арта башлай. Хәҙер ундайҙар - 7 миллион 800 меңдән ашыу, улар бай эш тәжрибәһенә эйә", - тип билдәләне Мишустин. "Улар эшен дауам итһен, белеме менән уртаҡлаша алһын өсөн шарттар булдырыу мөһим", - тип өҫтәне премьер. Мишустин вице-премьер Татьяна Голикованан пенсияны индексациялау мәсьәләһен үҙ контроленә алыуын һораны. "Тиҙ арала федераль ҡануниәткә төҙәтмәләр әҙерләргә кәрәк. Бөтә тейешле ҡарарҙар яҙғы сессияла уҡ ҡабул ителеренә иҫәп тотабыҙ", - тип өҫтәне Хөкүмәт башлығы.

✓ **Башҡортостанда "Айыҡ водитель" акцияһы башланды, тип иҫкә төшөрҙө үҙенең телеграм-каналында республиканың баш дәүләт автоинспекторы Владимир Севастьянов.** Оператив-иҫкәртеү акцияһы 13 июнгә тиклем бара. Төп маҡсат - эскән килеш транспортҡа ултырыуға бәйле юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙы иҫкәртеү. "Был көндәрҙә байрам ойошторолған һәм халыҡ күп йөрөгән урындарҙа водителдәрҙең эскәнме, юҡмы икәнен тикшереү ойошторола, - тип билдәләне Владимир Севастьянов. - Водителдәрҙе юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙмаҫҡа саҡырам, сөнки быны ң эҙемтәләре бик аяныс булыуы ихтимал". Водителдәрҙең йәки йәйәүлеләрҙең юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен тупаҫ боҙоу осраҡтары тураһында Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының ҡыҙыу бәйләнеш телефонына хәбәр итергә мөмкин: 8(347)279-32-92. Шулай уҡ телеграмда @GIBDDRB_02bot эшләй. Бынан тыш, Өфөлә электросамокат водителдәренең юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуы тураһында хәбәрҙәр чат-боты ла бар.

✓ **Башҡортостанда баҫыу көндәре июлдән сентябргә тиклем уҙғарыла, тип хәбәр итте Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов.** Йыл да үткәрелгән семинар-кәңәшмә 12 июлдә Шишмә районында буласаҡ, уның темаһы - "Селекция һәм орлоҡсолоҡ, һынау лабораторияһы эшен ойоштороу". 19 июлдә - Нуриман районында ужым иген культуралары һәм йәшелсәләр етештереү, 26 июлдә - Дәүләкән районында ауыл хужалығы культуралары орлоҡсолоғо, 2 августа - Бүздәк районында (мелиорация,киндер үҫтереү), 7 августа - Әбйәлил районында (Урал аръяғында сорттарҙы һынау һәм бойҙайҙың ҡаты сорттарын үҫтереү), 11 сентябрҙә - Йәрмәкәй районында (техник культуралар етештереү) һәм 13 сентябрҙә - Ауырғазы районында (биопрепараттар ҡулланып соя һәм кукуруз үҫтереү) үткәреү ҡарала.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ПАРТИЯ ТӘҠДИМ ИТТЕ




**"Берҙәм Рәсәй" партияһы төбәк бүлексәһенең партия конференцияһында делегаттар Радий Хәбировты Башҡортостан Башлығы һайлауҙа кандидат итеп раҫланы.**

"Берҙәм Рәсәй"ҙең генераль советы секретары урынбаҫары Сергей Перминов Башҡортостанда бик күп партия проекттарының тормошҡа ашырылыуын билдәләне. "Һеҙ халыҡҡа хеҙмәт иткән меңләгән объект төҙөнөгөҙ һәм ремонтланығыҙ. Миңә бөгөн коллегаларым "Патриот" паркын, төҙөлөп ятҡан Көрәш үҙәген күрһәтте. Донъя кимәлендәге объекттар. Беҙ Федерация Советында һәм Дәүләт Думаһында башҡа субъекттарға был тәжрибәне үҙләштерергә тәҡдим итербеҙ, сөнки ул илдә киң таратыуға лайыҡ. Радий Фәрит улын Президент хупланы. 8 сентябрҙә кандидатыбыҙ ғәҙел еңеү яулаһын өсөн барыһын да эшләргә тейешбеҙ", - тип билдәләне ул.

Журналистар менән аралашҡанда Радий Хәбиров ни өсөн Башҡортостан Башлығын һайлауҙа "Берҙәм Рәсәй" партияһынан ҡатнашырға һәм киләсәктә ниндәй мәсьәләләрҙе хәл итеүгә иғтибарын йүнәлтергә йыйыныуы хаҡында һөйләне. "Мин һәр ваҡыт партияға етди һәм яуаплы ҡараным, "Берҙәм Рәсәй" һәр саҡ үҙ өҫтөнә яуаплылыҡ ала. Был бик яҡшы сифат. Сәйәсмән булараҡ мин дә ошо партияла үҫкәнмендер, тип әйтә алам. Уның төбәк бүлексәһенә ышанам, - тине Радий Хәбиров. - Шул уҡ ваҡытта бурысым партия мәнфәғәттәрен яҡлап ҡалыуға ғына ҡайтып ҡалмай. Республика Башлығы булғас, мин бар халыҡтың, сәйәси көстәрҙең мәнфәғәттәрен яҡларға тейешмен".

# ТӘҮГЕ КАНДИДАТ БАР

**Радий Хәбиров 11 июндә республика Башлығын һайлауҙа ҡатнашыу өсөн Үҙәк һайлау комиссияһына документтар тапшырҙы.**

Һайлау комиссияһына ул "Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк башҡарма комитеты етәксеһе Руслан Насретдинов һәм кандидаттың финанс вәкиле Максим Ульчев менән килде. Уның документтарын республиканың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Азат Ғәлимханов һәм уның ике урынбаҫары ҡабул итте. Һайлау комиссияһында билдәләүҙәренсә, ул - Башҡортостан Башлығын һайлауҙа ҡатнашыу өсөн ғариза биргән тәүге кандидат. "Халыҡ мине хуплармы, был минең өсөн бик мөһим, сөнки беҙ биш йыл буйына кешеләр тейешенсә баһалаһын һәм эшебеҙҙән ҡәнәғәт булһын тип эшләнек. Был һәр ваҡыт тулҡынландырғыс һәм яуаплы. Тиҙҙән башҡа кандидаттарҙың, башҡа сәйәси партияларҙың ғариза биреүен көтәбеҙ, бәлки, үҙ-үҙҙәрен тәҡдим итеүселәр булыр", - тине Радий Хәбиров.

Максим Ульчев ойоштороу эше, документтарға бәйле процедуралар менән шөғөлләнә, тип өҫтәне ул. Уның һүҙҙәренсә, хәҙер һайлау штабын ойоштороу башлана. Башҡортостан Башлығын һайлау 6, 7 һәм 8 сентябрҙә үткәрелә.

# МӨҺИМ САРАЛА

**Радий Хәбиров етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы 5-8 июндә Санкт-Петербургта 27-се Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында ҡатнашты. Быйыл тема: "Күп полярлы донъяның нигеҙе - яңы үҫеш нөктәләрен булдырыу". Был эшлекле сара йыл һайын донъяның бизнес вәкилдәрен, сәйәсмәндәрҙе һәм эксперттарҙы йәлеп итә.**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ни өсөн Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында һәм башҡа форумдарҙа ҡатнашыу кәрәклеге хаҡында һөйләне. "Иң тәүҙә республикаға инвестиция йәлеп итеү өсөн, - тип билдәләне Радий Хәбиров "Башинформ" журналисының һорауына яуап биреп. - Әгәр республикабыҙға аҡса, инвесторҙар килмәһә, яңы предприятиелар ҙа төҙөлмәй. Беҙ туҡтап ҡалабыҙ. Инвестор килһен өсөн үҙебеҙҙең хаҡта, ярҙам саралары, йәшәйешебеҙ, уңыштарыбыҙ, эшкә һәләтле командабыҙ хаҡында һөйләргә кәрәк. Шулай уҡ үҙ брендыбыҙҙы, иҡтисадты үҫтереү мөһим. Рәсми делегация составында республиканың төп предприятиелары вәкилдәренең булыуы ла осраҡлы түгел.Был республикабыҙҙы танытыу тип атала, Башҡортостан тураһында белһендәр һәм беҙгә килһендәр өсөн. Хәҙер был иң мөһиме".

# БЕҘҘӘ УҠЫЙҘАР

**Үзбәкстанға эш сәфәре барышында Башҡортостан хөкүмәте премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев, мәғариф һәм фән министры Илдар Мәүлитбирҙин Үзбәкстандың юғары белем биреү, фән һәм инновациялар министры Конгратбай Шәрипов менән осрашты.**

"Бөгөн республика Башлығы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса Конгратбай Шәрипов менән Үзбәкстанда республикабыҙҙың юғары һәм урта махсус уҡыу йорттарының береһенең вәкиллеген һәм филиалын асыу өсөн эш башларға тип һөйләштек. Ғөмүмән, юғары һәм урта һөнәри белем биреү өлкәһендә хеҙмәттәшлек мөмкинлектәрен тикшерҙек, квалификациялы эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр әҙерләү өлкәһендә методик эштәр менән алмашыу хаҡында һөйләшеп килештек. Тиҙҙән эшкә тотонабыҙ", - тип хәбәр итте Урал Килсенбаев.

Быйыл Башҡортостанда меңдән ашыу Үзбәкстан гражданы уҡый. Бөгөнгә ике республиканың юғары уҡыу йорттары араһында ғилми, белем биреү, мәҙәни хеҙмәттәшлек тураһында 23 килешеүгә, Үзбәкстан партнерҙары менән алмашыу программаларын ғәмәлгә ашырыу хаҡында килешеүҙәргә ҡул ҡуйылған. Евразия ғилми-белем биреү үҙәге быйыл Үзбәкстандың өс университеты менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөгән, Үзбәкстандың юғары уҡыу йорттары уҡытыусылары өсөн Евразия ғилми-белем биреү үҙәге тикшеренеүҙәренең йүнәлештәре буйынса кампуста квалификация күтәреү курстарын үткәреү тураһында килешеүгә өлгәшелгән.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә Довлатов тыҡрығы барлыҡҡа килде. Ул Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы янында Гоголь урамы менән Карл Маркс урамын тоташтыра. Ошо тыҡрыҡ янындараҡ 1941 йылда донъяға килгән һәм киләсәктә билдәле яҙыусы һәм журналист булып киткән Сергей Довлатовтың тыуған йорто урынлашҡан (Гоголь урамы, 56).

✓Өфөнөң Совет майҙанында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров төрлө тармаҡ вәкилдәренә Рәсәйҙең һәм республиканың дәүләт наградаларын тапшырҙы. "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған журналисы" тигән маҡтаулы исемгә Гөлдәриә Йосопова һәм Рәмзиә Кәримова-Байбулатова лайыҡ булды. Билдәле ғалим, хирург, 5 меңдән ашыу операция яһаған, оҙаҡ йылдар медицина университетын етәкләгән Вил Мамил улы Тимербулатов "Башҡортостан Республикаһының халыҡ табибы" тигән маҡтаулы исем алды.

✓Өфө аэропорты тәүгә Jordan Aviation авиакомпанияһының самолетын ҡабул итте. Баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәте белдереүенсә, Өфөнән 277 диндар Boeing 767-200 менән Иорданияның баш ҡалаһы Амманға хаж ҡылырға юлланды. Бынан алдараҡ Роспотребнадзор 2024 йылда хажды ойоштороу ҡағиҙәләре тураһында хәбәр иткәйне.

✓Дағстан Рәсәй туристары араһында иң популяр биш төбәк исемлегенә инде. Уңайлы климат, Каспий диңгеҙе, ҡунаҡсыл халыҡ, төрлө аш-һыу һәм туристик инфраструктураның үҫеше Башҡортостандан да ял итеүселәрҙең артыуына килтерә, тип хәбәр иттеләр Өфө аэропортының матбуғат хеҙмәтендә. Nordwind Airlines авиакомпанияһы әле B-737-800 самолеттарында аҙнаһына өс тапҡыр Өфө - Махачкала маршруты буйынса тура даими осоштар башҡара. Юлға 2 сәғәт 45 минут ваҡыт китә. 25 майҙан иһә Nordwind Airlines рейстарҙы аҙнаһына 5-кә еткерергә ниәтләй.

✓2025 йылда Өфөнән Ҡаҙанға тура поезд йөрөй башлауы ихтимал. Был хаҡта Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы ултырышында Куйбышев тимер юлы начальнигы урынбаҫары Дмитрий Новиков хәбәр итте. Проект бик перспективалы, тип билдәләне Новиков. Уны 2025-2026 йылдарҙа ғәмәлгә ашырыу күҙаллана. Уның һүҙҙәренсә, халыҡ араһында ике төбәктең баш ҡалаларын бәйләүсе тура маршрут булдырыуға ихтыяж бар.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ Эш биреүселәр үҫмерҙәргә вожатый, һатыу буйынса менеджер ярҙамсыһы, ярымфабрикаттарҙы үлсәп төрөүсе, курьер булып эшләргә, биләмәләрҙе төҙөкләндереү менән шөғөлләнергә, ырҙын табағында эшләргә тәҡдим итәсәк.



## ҠОРБАН БАЙРАМЫ АЙҠАНЛЫ

**16 июндә ил мосолмандары Ҡорбан байрамын билдәләй. Был көндө ҡорбан килтереү йолаһы үткәрелә.**

Башҡортостандың Ветеринария буйынса дәүләт комитеты рәйесе Азат Йыһаншин билдәләүенсә, эпизоотик именлекте, шулай уҡ халыҡты ветеринария яғынан сәләмәт продукция менән тәьмин итеү маҡсатында республикала 2018 йылдан алып хайуандарҙы махсус майҙансыҡтарҙа ғына салыу йолаға әүерелде. "Башҡортостанда 60-тан ашыу, шул иҫәптән 2 майҙансыҡ Өфөлә урынлашҡан. Бөтәһе 8000-дән ашыу баш мал ҡорбанға килтереләсәк. Хайуандарҙы һуйыу ветеринария хеҙмәте контроле аҫтында үткәрелә, бөтә санитария талаптары иҫәпкә алынасаҡ. Элекке һымаҡ мәсет тирәһендә һуйыу тыйыла. Ҡабул ителгән саралар ситтән ауырыу мал килтереү хәүефен кире ҡаға. Ҡорбанға тәғәйенләнгән бөтә мал алдан карантинда була, иҫәпкә ҡуйыла. Ә ҡабул итеү ветеринария документтары нигеҙендә башҡарыла, хайуандар клиник тикшереүҙән һуң ғына һуйыуға рөхсәт ителә. Ҡалдыҡтары махсус контейнерға һалына һәм утилләштерелә. Һәр майҙансыҡта ветеринария белгестәре дежурлығы ойоштоpола", - тине ведомство етәксеһе.

Өфөлә дәүләт-конфессия мөнәсәбәттәре һәм дини ойошмалар менән үҙ-ара эш итеү мәсьәләләре буйынса комиссия ултырышында Ҡорбан байрамы уңайынан сараларҙы ойоштороу мәсьәләләре тикшерелде. Яҡынса мәғлүмәт буйынса, баш ҡаланың 23 мәсетендә байрам намаҙҙары уҡыла. "Каруан" сауҙа комплексы һәм Төньяҡ автовокзал биләмәһендә ҡорбан салыу өсөн майҙансыҡтар асыла. Байрам ойошторолған урындарҙа ветеринария хеҙмәттәре эшләй, уларҙың төп бурысы - ниндәйҙер сир билдәләре булған ҡорбан малдарын майҙансыҡҡа килтереүгә юл ҡуймау. "Беҙҙең тәүге сираттағы бурысыбыҙ - хәүефле инфекцияларҙың һәм ауырыуҙарҙың таралыуына юл ҡуймау өсөн именлекте тәьмин итеү, тейешле талаптарҙы үтәү һәм тәртип булдырыу. Саралар бик күп ведомстволарҙың һәм структураларҙың үҙ-ара килешеп эш итеүен талап итә", - тип билдәләне Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары Владимир Жебровский.

## ӨСӨНСӨ УРЫНДА

**XXVII Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында Рәсәй төбәктәрендә Инвестиция мөхите торошоноң милли рейтингы һөҙөмтәләре иғлан ителде. Уны йыл һайын Стратегик башланғыстар агентлығы эшҡыуарҙарҙың фекеренә таянып төҙөй.**

2023 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан, үҙенең күрһәткесен бер урынға яҡшыртып, Мәскәү өлкәһе һәм Төмән өлкәһе менән өсөнсө урынды бүлешә. Рейтингтың тәүге ике баҫҡысын Мәскәү һәм Татарстан биләй. Башҡортостан беренсе тапҡыр рейтингта өсөнсө урынды алды.

Ил субъекттары араһында Инвестиция мөхите торошоноң милли рейтингы 2014 йылдан Рәсәй Президенты Владимир Путиндың ҡушыуы буйынса төҙөлә. Рейтинг бизнес алып барыу өсөн уңайлы шарттар булдырыу буйынса төбәктәрҙең эшен баһалай. Рейтинг методологияһы бизнестың фекере менән ҡыҙыҡһыныуҙы һәм статистика мәғлүмәттәрен анализлауҙы күҙ уңында тота. Һөҙөмтәләр йыл да Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумында иғлан ителә. Башҡортостан Милли рейтингта 2015 йылдан ҡатнаша һәм дүртенсе йыл рәттән Рәсәйҙең иң яҡшы биш төбәге иҫәбендә.

## ХАЛЫҠ КӘСЕПСЕЛӘРЕНӘ...

**Башҡортостан Хөкүмәте ултырышында халыҡ художество кәсептәре изделиеларын етештереүселәргә республика бюджетынан субсидиялар биреү тәртибе раҫланды.**

Башҡортостанда халыҡ художество кәсептәре субъекттарына байтаҡ ярҙам саралары күрһәтелә, тине республика Хөкүмәте премьер-министры Андрей Назаров. "2023 йылда сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министрлығы яғынан 11 миллион һум субсидия бирелде. Алты етештереүсе ҡорамал, сеймал һәм материалдар һатып алыу өсөн сығымдарҙың бер өлөшөн ҡапланы, - тине Андрей Назаров. - Бынан тыш, "Ағиҙел" предприятиеһына дәүләт ярҙамы ҡаралған. Ул халыҡ художество кәсептәре өлкәһендә келәм килтереүсе проекттарҙы тормошҡа ашырыуға ғариза биргән ойошмалар араһында конкурс буйынса һайлап алыуҙа еңеүсе тип табылды".

Республиканың сәнәғәт һәм инновация сәйәсәте министры вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Тимур Герасимов хәбәр итеүенсә, халыҡ художество кәсептәренә булышлыҡ һәм уларҙы үҫтереү эше дауам ителәсәк. Һуҙ ҡорамал, сеймал һәм материалдарға сығымдарҙың бер өлөшөн ҡаплау өсөн субсидия, шулай уҡ келәм килтереүсе проекттарҙы финанс яҡтан тәьмин итеүгә 11 миллион һум аҡса бүлеү хаҡында бара. "Халыҡ художество кәсептәре өлкәһендә мәшғүл республика етештереүселәре өсөн был проекттар продукцияны һаҡлап ҡалыу, үҫтереү өсөн кәрәк. Келәм килтереүсе проектты тормошҡа ашырыу милли сувенир продукцияһын һәм халыҡ художество кәсептәре изделиеларын сығарыуҙы арттырырға, шулай уҡ яңы эш урындары булдырырға мөмкинлек бирә", - тине Тимур Герасимов.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, былтыр Рәсәй Президенты Владимир Путин "халыҡ художество кәсептәре" терминын билдәләгән һәм тармаҡҡа дәүләт ярҙамы сиктәрен киңәйткән законға ҡул ҡуйҙы.

## БАЛАЛАР ҘА ЭШЛӘЙ АЛА

**Башҡортостанда йәйге каникулдар ваҡытында мәктәп уҡыусылары 3600-ҙән ашыу вакансия менән файҙаланырға мөмкин. Уларҙың барыһы ла Республика халыҡ мәшғүллеге үҙәгендә теркәлгән.**

14 йәше тулған балалар йәйгелеккә эшкә урынлашыу варианттарын ҡарай ала, тип хәбәр итте Башҡортостандың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. "Эш биреүселәр үҫмерҙәргә вожатый, һатыу буйынса менеджер ярҙамсыһы, ярымфабрикаттарҙы үлсәп төрөүсе, курьер булып эшләргә, биләмәләрҙе төҙөкләндереү менән шөғөлләнергә, ырҙын табағында эшләргә тәҡдим итәсәк. Каникулдарҙың бер өлөшөн хеҙмәткә бағышларға теләгән балаларға мәшғүллек үҙәктәре белгестәре ышаныслы эш биреүсене табырға ярҙам итер. Уларға онлайн мөрәжәғәт итергә лә мөмкин", - тине ул. Министр балиғ булмаған хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡынан тыш, мәшғүллек үҙәгенән матди ярҙам алыу мөмкинлеге булыуын билдәләне. Был бер айҙа яҡынса 1,8 мендән 2,8 мең һумға тиклем. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, былтыр йәй республиканың 10 меңдән ашыу уҡыусыһы тәүге хеҙмәт тәжрибәһенә эйә булды.

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

## ЮЛ ЙӨРӨҮ ҠИММӘТЛӘНДЕ




**Баш ҡалабыҙ июнь айында ла әүҙем мәҙәни тормош менән "йәшәүен" дауам итә. Яңы айҙың беренсе көнө Балаларҙы яҡлау көнө айҡанлы ойошторолған бихисап сараларға бай булғайны. Улар халыҡ телендә һәм "Бәйләнештә" социаль селтәре хәбәрҙәрендә төрлө баһа алды, әлбиттә.**

Мәсәлән, Рәсәйҙәге билдәле тапшырыуҙар алып барыусы һәм йырсы Ольга Бузова сәхнәгә ярым-шәрә күтәрелгән. Бындай "эҫе бөйөрәк" кеүек тиҙ тарала торған хәбәр һәр сығанаҡта баҫылып, бар халыҡ "Аһ!" итеп тә өлгөрмәне, баш ҡалабыҙҙа тағы бер ваҡиға күптәрҙә ризаһыҙлыҡ тыуҙырҙы: 3 июндән алып Өфөләге маршрут автобустарында юл хаҡы арттырылды. Башҡортостандың тарифтар буйынса дәүләт комитеты ҡарарына ярашлы, Өфөлә "Башавтотранс" автобустарында йөрөү хәҙер ҡулаҡса һәм банк картаһы менән түләгәндә - 41 һум, "Алға" картаһын ҡулланғанда - 34 һум тәшкил итәсәк. Шул уҡ ваҡытта алдан ҡаралған ташламалар үҙ көсөндә ҡала: "Бәхетле сәғәт" акцияһы дауам итә. Шәхси ташыусыларҙың автобустарында ла юл хаҡы 41 һум буласаҡ. Хатта 207-се маршрут автобусына ултырыусыларҙан 45 һум аласаҡтар. Әйткәндәй, ҡайһы бер йүнәлештәрҙәге автобустар юл хаҡын алдан уҡ күтәреп ҡуйған, мәсәлән, 266-сы маршрут автобустары 3 июнь көнө уҡ яңы иҫәпкә күсте. Шулай уҡ Өфөлә электр транспортында (трамвай һәм троллейбуста) юл хаҡтарын күтәреү мәсьәләһе лә тикшерелә.

Бындай үҙгәрештәр тураһында алдан хәбәр ителеп, халыҡҡа мәғлүмәт еткерелһә лә, төрлө күңел асыу саралары "өйөрмәһендә" ҡалған өфөләрҙең күбеһенә хаҡтар ҡапыл күтәрелгән кеүек тойолғандыр. Халыҡтан килгән хәбәрҙәргә ҡолаҡ һалһаң, күбеһе маршрут автобустарының хеҙмәтләндереү сифатына, йыш йөрөмәүенә, ҡайһы бер йүнәлештәрҙә транспорт етешмәүенә зарлана. Кемдәрҙер баш ҡала йәшәү ҡиммәтләнһә лә, эш хаҡтары элеккесә һаҡланыуын да билдәләй. Әммә был - мәжбүри сара, тип билдәләйҙәр Башҡортостан Республикаһының Транспорт һәм юл хужалығы министрлығынан һәм юл хаҡы артыуына илткән бер нисә сәбәпте килтерәләр. Шуның береһе - 2023 йылда ил буйынса инфляция 7,42 процент тәшкил итеүе һәм 2022 йылдан алып дизель яғыулығына хаҡтар - 20, ә газға 12 процент тирәһе артыуы. Шулай уҡ автобустар өсөн запас частарҙың хаҡы ике йыл эсендә 80 процентҡа ҡәҙәр күтәрелгән, автошиналар - 50 процентҡа. Шул уҡ ваҡытта Өфөләге "Алға" картаһы буйынса юл йөрөү илдәге миллионлы башҡа ҡалаларҙың ошондай уҡ карталары менән ҡулланыуға ҡарағанда осһоҙораҡ, тип билдәләнә. Бынан тыш, БР Транспорт министрлығында "Башавтотранс" автопаркы автобустарының ҡулланылыу ваҡыты уртаса 5 йыл тәшкил итеүен дә һыҙыҡ өҫтөнә алалар. Ә бит 2024 йылдың май айына ҡарата яңы автобустар һаны - 75 процент. Күрше төбәктәрҙә был күрһәткес түбәнерәк...

Бына шулай, шаулай-шаулай Бузованың кейемен тикшергән арала үҙебеҙҙе ыштанһыҙ ҡалдырырға торалар, йәмәғәт.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡайын еләге

Ҡайын еләге (земляника лесная) майиюндә сәскә ата. Был емешт фитонцидтар бар, улар биологик әүҙем матдәләргә, органик кислоталарға, пектин һәм дуплау матдәләренә бай. Дауаланғанда емеше, япрағы һәм тамырһабағы ҡулланыла. Япраҡтарын сәскә атҡан осорҙа, емешен июлдә, тамырһабағын сентябрҙә йыйып алырға. Ҡайын еләген өҙөп ашау бауыр һәм бөйөрҙәге таштарҙы сығарырға, баш мейеһендәге ҡан тамырҙары склерозын иҫкәртергә, ашҡаҙан һәм бөйән сей араһын дауаларға ярҙам итә. Бында япрағы һәм тамырһабағы ла ярай. Ҡайын еләген йөклө саҡта һәм аллергия көслө булғанда күп ашау тыйыла.

❖ Авитаминоз булғанда 1 ҡалаҡ киптереп ваҡланған ҡайын еләге япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә. Көн һайын ашарҙан алда яртышар стакан эсергә.

❖ Аллергиянан 1 ҡалаҡ ваҡланған ҡайын еләге япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә һәм һөҙөп, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1/3 стакан эсергә.

❖ Бөйөр ауырыуҙарынан 1 ҡалаҡ ваҡланған япрағы һәм емешенә 2 стакан һыу ҡойоп, 15 минут ҡайнатырға һәм 30 минут төнәтергә. Һөҙөргә һәм көнөнә 2 тапҡыр 1-әр стакан эсергә.

❖ Киҙеү йоҡторғанда ҡайын еләге япрағын бешереп, бал, лимон ҡушырға һәм көнөнә кәмендә 3-5 стакан эсергә.

❖ Яңы барлыҡҡа килгән яман шештән 2 ҡалаҡ киптереп ваҡланған япрағы һәм тамырына 3 стакан ҡайнар ҡайын һутын ҡойоп, йылыға төрөргә һәм 2 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 3/4 стакан эсергә.

❖ Аҙҡанлылыҡ, һыуыҡ тейгәндә, подагра, үт ҡыуығында таштар булғанда 2 ҡалаҡ ҡайын еләгенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә. Төнәтмәне 3-4 өлөшкә бүлеп, көн дауамында эсеп бөтөргә, емештәрен дә ашап ҡуйырға.

❖ Йөрәк ауырыуынан (миокардит) 3-4 төп ҡайын еләген тамыры менән алып, бәләкәй сәйнүккә һалып бешерергә һәм шәкәр ҡушып сәй урынына эсергә. Был рәүешле 1 ай дауаланырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Балаларыбыҙҙың ҡулынан телефонын тартып алырға маташыу һис кенә лә ярамай! Минеңсә, ғәзиздәребеҙҙе башҡа нәмә менән ҡыҙыҡтырыу ысулын табыу кәрәк.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ялан көйгәнәге**

**(Степной лунь)**



Көйгәнәктәр төркөмөнә ингән был ҡош оҫҡан саҡта аҡсарлаҡты хәтерләтә, әммә уның арҡаһы - аҡһыл-һоро, түше салт аҡ. Инә ҡоштар менән бала ҡоштарҙың ҡойроғо өҫтөндә буйлы һыҙаттары, ҡорһағында сағыу ерән табы бар, улар шуның менән айырылып тора.

Ата ялан көйгәнәгенең кәүҙә оҙонлоғо 45 см, инә ҡоштоҡо 50 см. Ҡанаттарының иң юғары өлөшөндә ҡара төҫтә V-ға оҡшаш һүрәт бар. Кәүҙәһе еңел, аяҡтары нәҙек оҙон, ҡойроғо ла оҙон, осо түңәрәкләнеп тора.

Хәҙерге мәлдә һирәк осрай, РФ һәм БР Ҡыҙыл китаптарына ингән. XX быуатта ғына Көньяҡ Уралдың урманлы, урманлы-далалы өлөштәрендә йыш оя ҡорған. Әле Әбйәлил, Баймаҡ райондарында осраштыра. Ырымбурҙа оя ҡора.

Ялан көйгәнәге көндөҙ һунар итеүсе йыртҡыс ҡош. Сыҫҡан һымаҡ кимереүселәр, кеҫәртке, ергә оя ҡороусы ваҡ ҡоштар, тәлмәрйендәр, бәпкәләр, йомортҡалар, эре бөжәктәр менән туҡлана. Уларҙы башлыса ерҙән тотоп ала, әммә ваҡ ҡоштарҙы бөркөт һымаҡ һауала ҡыуып етеп тотоп алыуы ла ихтимал.

Апрель башында уҡ осоп килә һәм һаҙлыҡта - ҡуйы үлән араларына, тәпһәләргә оя ҡора. Ата ялан көйгәнәгенең ҡош туйы мәлендә һауала төрлө хәрәкәттәр яһап осоуы үҙе бер матур күренеш. Был ваҡытта ул "трррр" тигән йомшаҡ ҡына тауыш сығарып оса. Май башында инә ҡош 4-5 йомортҡа һала, ай дауамында баҫа. Яҡынса 20-30 көнлөк булғас, бәпкәләр оса башлай, әммә августа тиклем инә менән ата ҡоштан йыраҡ китмәй. Августың урталарында ҡышлау ерҙәргә осоп китә башлайҙар. Иң тәүҙә йәш ҡоштар ҡуҙғала.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# ҒӘЗИЗДӘРЕБЕҘҘЕ...

## телефон сиренән һаҡлайыҡ!

**Кәрәҙле телефон аша тормошобоҙға үтеп ингән интернет тигән нәмә күптәребеҙҙе әкренләп кенә түгел, хатта тиҙләп "ҡулға ала" башлаған һымаҡ. Парк эскәмйәләрендә бер-береһе менән һөйләшмәй, һәр ҡайһыһы телефонға текләп ултырыусы егет һәм ҡыҙҙарҙы, хатта олораҡ йәштәрҙәге кешеләрҙе лә, тротуарҙарҙа бер ҡулы менән коляска этеп, икенсе ҡулында гаджет тотоп укып барыусы йәш әсәләрҙе күрергә күнегеп тә киттек инде. Телефонһыҙ балалар ҙа урамда юҡ тиерлек...**

Һуңғы йылдар смартфон эйәләрендә "номофобия" тип аталған сирҙең әүҙем таралыуы хаҡында хәбәр йөрөй. Ябай итеп әйткәндә, уны "телефон сире" тип кенә атарға ла булалыр. Үҙендең тойғоларың өҫтөнән контроль юғалтыуға килтерә торған ауырыу ул. Шуға һабышҡан әҙәм балаһы, бер аҙ ғына ваҡыт экрандан айырылһа, бөтөнләйгә элемтәһеҙ, ярҙамһыҙ булып ҡалыуҙан ҡурҡа башлай. Берәй мөһим хәбәр, ваҡиға хаҡында ишетмәй ҡуйырмын тип, ундайҙар бәҙрәфкә ингәндә лә телефонын иҙәнгә һалып ҡарап ултыра икән. Икенселәр, виртуаль донъяға шул тиклем ныҡ бирелеп, хатта смартфонһыҙ йәшәүҙең мәғәнәһен күрмәү хәленә лә барып етә, Аллаһ һаҡлаһын! Өсөнсөләр, янында ғына яҡындары ла булыуға ҡарамаҫтан, үҙен япаяңғыҙ тоя, дүртенселәр әлеге аппаратындағы "друзья" һәм "подписчиктар"-ҙы иң яҡын кешеләренә (ата-әсәһе, туғандары, дуҫтары) ҡарағанда ла ҡәҙерлерәк күрә башлай. Күпселек осраҡта былай бөләгә әле уҙаны үҫешеп, нығынып етмәгән үҫмер йәштәгеләр биреләсән...

Һуңғы йылдары мәктәп балаларына интернетлы телефондарҙың зыяны хаҡында ата-әсәләрҙең, һәр төрлө матбуғат баҫмалары авторҙарының борсолоуын йыш ҡына ишетәбеҙ. Ата-әсәнең күпселеге, бәлки, шул номофобия сире хаҡында ишеткәне лә юҡтыр, тик ни өсөн улар балаһын ана шул телефондан ҡыҙғана? Сөнки уларҙы үҫеп килгән ғәзизенең әхлаҡ мәсьәләһе нығыраҡ борсой. Әлеге интернет селтәренә инеп китһәң, унда ниммәләр генә юҡ! Файҙалы мәғлүмәттәрҙән тыш, баш китерлектәре лә баштан ашҡан унда. Шундағы теләһә ниндәй нәмәләрҙе күрһәтеүҙәр нисек оло кешенең йөрәген өйкәмәһен? Минә лә, ҡәҙерле туғандар, номофобиянан тыш, телефондың ана шул яғы уйландыра әле...

Ирекһеҙҙән, үҙемдең бала сағымды, йәшлек дәүерен күҙ алдымдан үткәрәм. Оло кешеләр әле булһа онотмағандыр, ауыл клубына алып килгән ҡайһы бер фильм афишаһының аҫтында "кроме детей до 16 лет" тип яҙа торғайнылар. Шул яҙыуҙы күреп, шунда уҡ көйеф төшә: тимәк, был киноға беҙ инә алмаясаҡбыҙ... Балалар өсөн тыйылған шул саҡтағы фильмдарҙы иҫләп, хәҙерге менән сағыштырһаҡ, улар бөтөнләйгә пүстәк кенә булған да баһа! Егет менән ҡыҙ ҡосаҡлашып, үбешә башлаған мәлдә кинәт кенә кадр алмашыныу мәлен генә күрһәткәндәр икән. Беҙҙе хатта "Обыкновенный фашизм" тип аталған документаль фильмға ла индермәгәндәрҙе хәтеремдә. Һуғыш турыһында кино ҡарарға яраткан шуҡ малайҙар, клубтың нигеҙ буйына баҫып, пәрҙәнең асыҡ урыны аша шул фильмды ҡүҙәтә башланыҡ: унда фашист концлагерҙарында үлтерелеп, шәрә килеш ергә теҙеп һалынған әсир мәйеттәренең фотоһүрәттәре булған икән. Шуны күргәс, ысынлап та, ғәйәт ҡыйын булып китә ине. "Оят" тигән төшөнсә ул осор беҙҙең аңыбыҙға ныҡ ҡына



һеңдерелгән булһа кәрәк. Хатта ботаника уҡытыусыһынан сәскәләрҙең "пестик" һәм "тычинка"һы булыуы, үҫемлектәрҙең үрсеүендәге уларҙың роле хаҡында ишетеп, оялғайным...

Өйөбөҙгә иң тәүге телевизорҙы һатып алып ҡуйғас, беҙҙең менән кино ҡарап ултырған атайым менән әсәйемде әле булһа иҫләп, көлөшөп алабыҙ. Экранда берәй пар ҡосаҡлаша башлаһа: "Әстәғфируллаһ, ҡалай бер юҡ нәмәне күрһәтәләр бит әле!" - тип һөйләнә-һөйләнә, йәһәт кенә алғы өйгә сығып китә торғайнылар. "Джентльмены удачи" кинокомедияһында актер Крамаров "еңелсә кейенгән" ҡатын-ҡыҙ статуяһының журнал битендәге фотоһүрәтен лупа менән ҡарап ултырған кадрын күрһәк тә әллә нисек булып китә торғайны. Хәйер, һәр әҙәм балаһы өсөн тап ана шундай оялыу хистәре тәбиғиҙер инде ул...

Әбына туҡһанынсы йылдар илдә "үҙгәртеп ҡороу" тигән нәмә башланғас, беҙҙең аңыбыҙҙа буйтым формалашҡан шундай яҡты хистәрҙе, гүйә, ағыуларға тотондолар. "Гласность", "плюрализм" тигән нәмәләр илебеҙҙә киң йәйелеп киткәс, гәзиттәрҙә йә телетапшырыуҙарҙа булһынмы, саманан тыш иркенләп хәбәрләшеүҙәр күбәйҙе ("демократия" мәсьәләһендә, кемдер әйтмешләй, "таяҡты артыҡ бөгә" башланылар). Цензура тигән нәмә бөтөнләйгә юғалды, ахырыһы. Өйҙә ғаилә менән телевизор ҡарау ҙа күпкә ауырлаша төштө. Берәй кино ҡарап ултырғанда уны "бик шәп араҡы", йә берәй "юғары сифатлы контрацептив" хаҡындағы реклама паузаһы өҙә. Уныһы - ярты бәлә, ә бына "кайнар мөхәббәт" эпизодтарын күрһәтә башлаһалар сәстәр үрә тора. Хатта ҡайһы берҙә асыҡ ҡына итеп урыҫса һүгенеп тә ебәргеләйҙәр. Ярай әле, өйҙә балалар булмаһа... Шундай кадрҙар башланыу менән балаларҙы төпкө бүлмәгә ҡыуып сығарып, хатта телевизорҙы ла һүндереп торорға мәжбүр булаһың. Балаларыбыҙ ҙа был хәлгә күнегә башланы ахырҙа. Экранда ир менән ҡатын бер-береһенә яҡынлаша башлағаның күреү менән 5-6 йәшлек улыбыҙ Азат, беҙҙең әйткәнде лә көтөп тормаҫтан, балалар бүлмәһенә "туп-туп" баҫып, йүгереп инеп китә торғайны. Бер аҙҙан бүлмәһенән сыҡмай ғына беҙгә тауыш бирә: "Бөттөләрме?.."

Эйе, ололар өсөн балаларыбыҙ алдында шундай ныҡ уңайһыҙлыҡ кисергән ваҡыттар ҙа булды шул. Хәҙер балаларыбыҙ инде үҙҙәре бала тәрбиәләй. Бөгөнгө көн телетапшырыуҙарҙа теләһә ни күрһәтеү закон тарафынан тыйылды ул тыйылыуға. Әммә... Бөгөн һәр баланың ҡулында әлеге лә баяғы интернетлы "һыйпафон". Ә бит шул телефондарҙа аҙым һайын: "Уберите детей от экранов", - тип башланған видеолар килеп сығып тора! Бындай яҙыу үҙе уҡ "Ҡарағаҙ әле, балалар, хәҙер һеҙгә бер ҡыҙыҡ нәмәкәй күрһәтәбеҙ", тип саҡырып торған һымаҡ. Шундай иҫкәртеүҙәрҙе юрамал ҡуялар, ахырыһы... Шуға ҡарамаҫтан, балаларыбыҙҙың ҡулына телефон биреп ҡуйырға мәжбүрбеҙ. Сөнки хәҙер мәктәптәге уҡыу процесы ла шуға бәйләнгән.

Телефон тотоп ултырған сабыйыңдың янына минут һайын килеп, уны тикшереп тороп та булмай. Шулай уҡ уларға смартфон ҡарауҙың зыяны хаҡында иртәнән кискә тиклем лекция уҡып торһаҡ та, был эшебеҙҙең бер ниндәй һыңғай нәтижә бирмәүе лә көн кеүек асыҡ. Әйтәйек, шоколад, печенье, кәнфиттәр, торт, пирожный һымаҡ һәр төрлө тәм-том тулып торған өҫтәл тирәләй балаларҙы теҙеп ултыртып, уларға шул углеводтарҙың шәкәр диабетына, һимереүгә килтереүе хаҡында өгөт-нәсихәт уҡый башлаһаҡ, берәй бала беҙҙе дөрөҫ аңлар инеме икән...

"Нишләргә һуң?" тигән һорау килеп тыуа. Ныҡлы инаныуымса, балаларыбыҙҙың иғтибарын ана шул теләһә нимәнән айырып алыу ниәте менән уларҙың ҡулынан телефонын тартып алырға маташыу һис кенә лә ярамай! Минеңсә, ғәзиздәребеҙҙе башҡа нәмә менән ҡыҙыҡтырыу ысулын табыу кәрәк. Күп кенә ҡасабаларҙа ошо юҫыҡта төрлө саралар ойоштороуҙары хаҡында ишетеп һөйөнәм. Өйҙә, мәктәп шарттарында, шулай уҡ тыштағы саф һауала төрлө ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс уйындар, аҙнаһына бер "телефонһыҙ көн"дәр уйлап сығарыу, ауылдарҙа урам-ара спорт ярыштары уҙғарыу, әлбиттә, файҙа бирер һымаҡ. Әле мәктәп дәрестәрендә телефонды тыйыу хаҡында закон да ҡабул ителде. Был да - яҡшыға...

Шулай ҙа йәш быуынды тәрбиәләү өсөн иң беренсе нәүбәттә балаларҙың йөрәген иманға күндерергә ынтылыу, һәр төрлө донъяуи ғилемдәрҙән тыш, ғәзиздәребеҙгә дини белем биреүгә лә әһәмиәт итеү кәрәк, тип һанайым. Уларҙың барыһынан да хәҙрәттәр әҙерләүҙе күҙ уңында тотмайым. Әммә балаларыбыҙға ошо юҫыҡта боронғо ата-бабаларыбыҙ һәммәһе бөләкәй сағынан уҡ белгән ябай ғына дини ҡағиҙәләрҙе, нимә гонаһ, сауап, хәләл, хәрәм кеүек терминдарҙың асылын өйрәтеү кәрәк. Ысынында, улар халҡыбыҙҙың айырылмаҫ әҙәп йолаһына ла әйләнгән бит инде. Был уларҙың мәктәптәге уҡыу процесына һис кенә лә зыян итмәйәсәк, тик файҙаға ғына буласаҡ, ин шәә Аллаһ. Әйткәндәй, беҙҙең Сибай ҡалаһының "Тәҡүә" мәсетендә имам-хәтип Әғләмитдин Ғәзизов хәҙрәт етәкселегендә йәй һайын балалар өсөн лагерҙар ойоштороЛа. Унда малайҙар һәм ҡыҙҙар ана шул "иң әүәл кәрәк" фән менән танышалар ҙа инде.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

✓ **Каратель отрядтарының ҡайһы бер командирҙары һәм хөкүмәт чиновниктары Салауат көрәште артабан дауам итеүҙән үҙе теләп баш тартыр тип уйлай.**



ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# САЛАУАТ ЮЛАЕВТЫҢ ҠУЛҒА АЛЫНЫУЫ

**Түбәнге Волга буйында, Ҡара Яр (Черный Яр) янында Е.И. Пугачевтың төп ғәскәре еңелеүгә дусар булып, ул үҙе ҡулға алынғас, каратель ғәскәрҙәре командованиеһы Пугачев бригадиры Салауат Юлаев етәкселегендәге Башҡортостандағы ихтилалды баҫтырыуға иғтибарын йүнәлтә. 1774 йылдың көҙөнә Өфө провинцияһында полковник Н.Н. Кожин, подполковник С.Л. Наумов (генерал-майор Л.Д. Мансуров бригадаһынан) етәкселек иткән карателдәр, генерал-майор Ф. Ю. Фрейман бригадаһының регуляр пехота һәм атлы полктары, шулай уҡ казак отрядтары; Исәт провинцияһында - генерал-майорҙар А.Д. Скалон һәм С.К. Станиславский (генерал-поручик И.А. Деколонг корпусынан) хәрәкәт итә.**

Ставкаһы 1774 йылдың сентябренән 1775 йылдың аҙағына тиклем Өфөлә булған генерал Фрейман Башҡортостандағы ихтилал хәрәкәтен баҫтырыуҙа иң әүҙем эш итеүселәрҙән була. Бынан 1774 йылдың сентябрендә подполковник И.К. Рылеев етәкселегендә ебәрелгән каратель командаһы Салауат Юлаевтың ғәскәре менән алышта еңә, әммә уны тулыһынса тармар итә алмай. Ике айҙан һуң, шул уҡ йылдың ноябрендә, Өфөнән подполковник Н.Я. Аршеневский етәкселегендә 23-сө енел ялан командаһы көнсығыш Башҡортостан тарафтарына юлға сыға. Ул ваҡытында Быҙаулыҡ, Татищев ҡәлғәһе һәм Һамар ҡаласығы янында Пугачев ғәскәрҙәренә ҡаршы бик тәүәккәл эш итә. Аршеневскийға властар ихтилалсыларҙы ахырынаса баҫтырыу бурысын йөкмәтә: был саҡта Салауат етәкселегендә туғыҙ олоҫ башҡорттары баш һалмаған була.

Шул уҡ ваҡытта каратель отрядтарының ҡайһы бер командирҙары һәм хөкүмәт чиновниктары Салауат көрәште артабан дауам итеүҙән үҙе теләп баш тартыр тип уйлай. 1774 йылдың 22 ноябрендә Башҡортостанға губернатор Рейнсдорп ебәргән коллегия советнигы И.Л. Тимашев та Салауаттың баш һалыуын көтә: ул үҙе властарға буйһонорға ант иткән 33 башҡорт һәм яһаҡ старшиналарына, 12 старшина ярҙамсыһына һәм 29 йөҙ башына (сотникҡа) ошоно раҫлаусы билет-документ тапшырыуы менән нык ғорурлана, улар араһында Пугачев генералы һәм 6 полковник була. Йәшерен комиссиялар начальнигы П.С. Потемкин да Салауаттың үҙ ирке менән бирелеүенә ышана, ул 21 ноябрҙә П.И. Панинға ошондай хәбәр ебәрә: "самый главный бунтовщик, Салават, поехал явиться к господину Тимашеву, от котораго препровожден будет в Казань". Әммә был ялған мәғлүмәт була, сөнки Салауат баш һалырға йыйынмай. Был хаҡта ихтилалдан ситләшкән һәм халыҡ мәнфәғәттәренә хыянат итеү юлы менән властар алдындағы гәйептәрен юйыуға өмөт иткән урындағы старшиналар бик яҡшы белә.

Салауат отряды хәрәкәт итеүсе тараф тип иҫәпләнгән Әй йылғаһына табан барған Аршеневский отрядына мишәр старшинаһы Мөксин Әбделсәләмовтың атлы командаһы ҡушыла. Ул урындағы юғары пост биләгән старшиналар вәкиле була, ә улар Пугачев ихтилалы башланған мәлдән үк үҙҙәре туплаған бай мөлкәттәрен һаҡлап ҡалыу һәм башҡорт, мишәр, татар кешеләре өҫтөнән билдәле власҡа эйә булыу яғын ҡайыра. Быға тиклем шул уҡ Мөксин, каратель ғәскәрҙәрендә йөрөп, 1755 йылғы башҡорт ихтилалында ҡатнашыусыларҙы эҙәрлекләүҙә ҡатнаша, старшина Һөләймән Деваев менән үҙҙәре ҡулға алған ихтилал етәксеһе Батыршаны Петербургҡа алып бара. Мөксин 1773-1775 йылдарҙағы Крәстиәндәр һуғышында хөкүмәт ғәскәрҙәренең каратель операцияларында әүҙем ҡатнаша, Башҡортостанда, Кама һәм Волга буйында баш күтәргән халыҡҡа айырым бер уҫаллыҡ менән ҡаршы сыға. Подполковник Михельсон деташаменты составында ул Ҡазанға тиклем барып етә, унда уға П.С. Потемкин, Башҡортостанға ҡайтып, ҡылған енәйәти ғәмәлдәре өсөн баш күтәреүселәрҙе тәүбәгә килергә саҡырырға бойора. Ул өс ай буйына, башҡорт старшинаһы Шәриф Кейеков менән икәүләп йөрөп, әлегә тиклем ихтилалдан ваз кисмәгәндәрҙе йә ҡурҡытып, йә өгөтләп, каратель ғәскәрҙәре командирҙарына баш һалып барырға мәжбүр итә. Мөксин Әбдесәләмов Потемкинға үҙенең "уңышлы" эшмәкәрлегә хаҡында хәбәр итеп тора. Урындағы халыҡты яҡшы белгән Мөксингә баш күтәреүселәрҙең отрядтары һәм уларҙың башлығы Салауат Юлаев хаҡындағы мәғлүмәтте табыу енел була. Моғайын, тап ана шул Мөксин 18 һәм 22 сентябрҙә Елдәк ҡәлғәһе янында подполковник Рылеев командаһы менән алыштарҙағы ҙур юғалтыуҙарҙан һуң Салауат Юлаевтың Әсем һәм Әй йылғалары арауығына китеүен хәбәр иткәндер. Быны ике айҙан һуң Мөксин Әбделсәләмовтың үҙенең отряды менән яңынан каратель ғәскәрҙәренә ҡушылырға ҡарар итеүе лә раҫлай. Баш күтәреүселәр үҙ ваҡытында карателдәргә хеҙмәт итеүсе старшинаның йортон һәм мөлкәтен юҡ итә, ул шул арҡала ихтилалсыларға айырыуса нәфрәтле була. Мөксин Аршеневский отрядына ҡушылып ҡына ҡалмай, карателдәргә Салауаттың һуңғы отрядының ҡайһы тирәлә булыуы хаҡында мәғлүмәт биреүе лә бик мөмкин.



*Инга Михайловна Гвоздикова - совет дәүере һәм Рәсәй тарихсыһы, тарих фәндәре кандидаты. РФА Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр вазифаһында эшләй. БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Мәскәү дәүләт университетын тамамлаған. РФА Археография комиссияһы Көньяҡ Урал бүлексәһенең ғилми секретары. XVIII быуаттың икенсе - XIX быуаттың беренсе яртыһында Башҡортостандың ижтимағи- иҡтисади үҫешенә, 1773-1775 йылдарҙағы Крәстиәндәр һуғышына, Салауат Юлаевтың тормошо һәм эшмәкәрлегенә, Ырымбур казак ғәскәре һәм Урал казактары ғәскәренә арналған 100-ҙән ашыу ғилми хеҙмәт авторы. Салауат Юлаев ордены менән бүләкләнгән.*

Аршеневский 24 ноябрҙә Шәрип ауылынан поручик В. Лесковскийҙы Салауатты эҙләргә ебәрә, ә Мөксин Әбделсәләмовтың атлы отряды авангардта бара. Ошо ваҡыттағы ваҡиғаларҙан ситкә китеберәк, каратель командаһы етәксеһе В. Лесковский хаҡында мәғлүмәт биреп үтәйек. Уның хәрби хеҙмәттә булыуы хаҡындағы яңыраҡ табылған мәғлүмәттәргә ярашлы, 43 йәшенә тиклем бары поручик дәрәжәһенән ары үҫә алмаған офицер, поляк конфедераттарына ҡаршы һуғышта ҡатнашҡан булыуына ҡарамаҫтан, көсәгән данға ирешә алмай. Тап шуға күрә ул Пугачев ихтилалын баҫтырыу барышында алға сығырға ниәт итә. Мәсәлән, генерал П.Д. Мансуров 1774 йылдың 14 февралендә ғәскәр баш командующийы А.И. Бибиковҡа карателдәрҙең Быҙаулыҡ ҡәлғәһенә һөжүм иткән сағында ошо поручиктың бик әүҙем эш итеүе хаҡында яҙа. Ҡәлғәләге баш күтәреүселәр һөжүмгә барыусыларҙы туптарҙан көслө утҡа тота, әммә Лесковскийҙың отряды ҡәлғәгә бәреп инә һәм хөкүмәт ғәскәрҙәренә ҡәлғәне ҡулға төшөрөү мөмкинлеген бирә. 17 февралдә Мансуров Бибиковҡа тағы ла Лесковский хаҡында хәбәр итеп, уның Быҙаулыҡ янында яраланыуын белгертә. Бер ай үтеүгә, Татищев ҡәлғәһе янындағы алышта ҡатнашыуына ҡарамаҫтан, поручик баш командующий наградаһына лайыҡ булмай. 1774 йылдың көҙөндә Лесковскийға үҙенең физаҡерлеген күрһәтеү өсөн тағы ла бер мөмкинлек килеп сыға. 25 ноябрҙә карателдәр Салауатты дүрт яугиры менән Миндәш ауылы янындағы урманда тотоп ала. Был осраҡта ла Мөксиндең 1755 йылдан бирле ихтилалсыларҙы эҙәрлекләү тәжрибәһе файҙаланыла. Карателдәрҙең командирҙары баш күтәреүселәр янына тәүҙә властарға тоғро булған башҡорт йә иһә мишәр командаларын, йәнәһе, улаға ҡушылырға тигән алдаҡ хәбәр менән ебәрә лә, аҙаҡтан, ҡапылдан уратып алып, уларҙы юҡ итә һәм ҡулға ала. Күрәһең, Салауат һәм уның яуҙаштары ниндәйҙер отрядтың үҙҙәренә ярҙамға килеүенә ышанғандыр, юғиһә, улар Мөксин командаһын яҡынлатмаҫтар ине. **Пугачев хәрәкәте тарихынан билдәле булыуынса, башҡорттар карателдәргә күпләп әсиргә төшмәгән, башлыса, яралылар ғына улар ҡулына эләккән: башҡорт яугирҙары әсирлеккә төшөүҙән үлемде артыҡ күргән. Каратель ғәскәре башлығы И.И. Михельсон, нәфрәтләнеп, шулай тип яҙған: "Живых я злодеев едва мог получить два человека из забежавших в озеро; каждой из сих варваров кричал, что лутче хочет умереть, нежели здаться".**

Күп кенә йылдар үткәс, ике тапҡыр - 1791 һәм 1793 йылдарҙа, офицер чинына дәғүә итеп, Мөксин Әбдесәләмов Екатерина II исеменә ебәрелгән ғаризаһында бына нисек яҙған: "...главнаго злодейскаго наперсника - башкирца Салаватку Юлаева, поймав, представил властям", ә уның энеһе, йөҙ башы Ямғур ҙа, шулай уҡ кәтғи рәүештә ошо хаҡта үҙенең Салауатты тотоуы хаҡында хәбәр итә: "...при поимке злодейскаго сообщника башкирца ...Салаватки Юлаева, которой мною и пойман".

Мөксин һәм Ямғур тарафынан тотолған Салауатты урманға килеп еткән поручик Лесковский командаһына тапшыралар, поручик ошо хаҡта үҙенең командирына хәбәр итә. Аршеневский быға шул тиклем ҡыуана, әсиргә алынғандарҙың үҙенә килтерелеүен көтөп тә тормайынса, бер нисә сәғәттән отряды менән ваҡиғалар барған урынға килеп етеп, Ҡалмаҡлар ауылында урынлаша. Бында Салауат Юлаевтан тәүге мәртәбә һорау алалар. Шулай итеп, уның ихтилалда ҡатнашыуы буйынса 339 көн барған тәфтиш һәм хөкөм итеү процесы башлана.

**Инга ГВОЗДИКОВА.**
**"Салават Юлаев. Исследование документальных источников" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Варшава-Познань һөжүм итеү операцияһында

18 ғинуарҙа Томашув-Мазовецки ҡалаһы өсөн барған алышта немецтарҙың ике пулеметын сафтан сығара, беренселәрҙән булып ҡала үҙәгенә тиклем барып етә, бер өйҙөң сарҙағында уңайлы позиция биләп, бер взводҡа тиклем дошман пехотаһын ҡырып һала; 32-се танк полкында Т-34 танкыһының механик-водителе, старшина Николай Ершов, элегерәк ике "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнгән (Ҡаҙан ҡалаһынан). Танк экипажы февраль айы баштарында 3 пулемет нөктәһен, 15 немец һалдатын сафтан сығара; 60-сы гв. атлы полкының 3-сө эскадронының отделение командиры, гв. өлкән сержанты Закир Ҡорбанов (Мишкә районы военкоматынан фронтҡа ебәрелгән). Элегерәк 1-се Белорус фронтының 1945 йылдың 20 февралендәге бойороғона ярашлы, III дәрәжә Богдан Хмельницкий ордены менән бүләкләнгән. Пилица йылғаһына килеп етеү менән уның отделениеһы ҡаршы ярға сыға, дошмандың ике станковый пулеметын сафтан сығара; 60-сы гв. атлы полкында 82-миллиметрлы миномет расчеты номеры, гв. рядовойы Йонос Камардинов, милләте буйынса уйғыр (Төркмән ССР-ы, Мары ҡалаһынан). Томашув-Мазовецки ҡалаһы өсөн барған алышта Камардинов, Пилица йылғаһының боҙло һыуын иңбашындағы 9 йәшник мина менән 9 мәртәбә кисеп сығып, расчетты боеприпастар менән тәьмин итә. Миномет взводы бер взводҡа яҡын пехотаһын, дошмандың 5 ут нөктәһен юҡ итә; 60-сы гв. атлы полкының 2-се эскадронының взвод командиры, гв. лейтенанты Влас Мордвинкин (Ростов өлкәһенең Вешенская станицаһынан). 21 ғинуарҙа Варта йылғаһының көнбайыш ярында Мордвинкиндың взводы дошмандың 17 һалдатының башына етә. Взвод 29 ғинуарҙа беренселәрҙән булып Обра йылғаһын кисеп сыға, ҡаршы ярҙа фашистарҙың 20-ләп һалдатын юҡ итә. Ошо алышта Мордвинкин һәләк була.

7-се гв. атлы корпусы командованиеһының 1945 йылдың 31 мартындағы бойороғона ярашлы, II дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән түбәндә күрһәтелгән яугирҙар бүләкләнә: 62-се гв. атлы полкының 82-миллиметрлы миномет расчеты командиры, гв. старшинаһы Сиражи Багаев (Учалы районының Ялсығол ауылынан). 18 ғинуарҙа, Томашув-Мазовецки ҡалаһына һөжүм иткән саҡта, Багаев үҙенең расчеты менән ҙурыраҡ боҙ киҫәктәре өҫтөндә Пилица йылғаһы аша сыға һәм немецтарҙың станковый пулеметы расчетын юҡ итә; 62-се гв. атлы полкының 4-се эскадронының 2-се ҡылыссылар взводы командиры, гв. өлкән лейтенанты Тимофей Беспамятнов (Һарытау өлкәһенең Романов районынан). 22 ғинуарҙа Камень ауылы янындағы алышта уның взводы оборона тота, дошман атакаһын кире ҡаҡҡан мәлдә 15 фашист һалдаты юҡ ителә. 25 ғинуарҙа Ярочев ҡалаһы өсөн барған бәрелештә өлкән лейтенант автоматчиктар төркөмө менән немецтарҙың тылына үтеп инеп, уларҙың сигенеү юлын киҫә. 31 ғинуарҙа Янни ауылы янында уның взводы дошмандың 30-лап һалдатын сафтан сығара.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләнә.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Ә бит Салауат Крәҫтиәндәр һуғышының юлбашсылары араһында иң йәше генә түгел, иң талантлыларының береһе, иң күп тапҡыр алышҡа ингән, ләкин бер тапҡыр ҙа ғәскәрен тулыһынса тар-мар итергә бирмәгән.*

# САЛАУАТ БАТЫР

## йәки Үлемһеҙлеккә

**Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - тарих фәндәре докторы, профессор Нәзир Мырҙабай улы ҠОЛБАХТИН. Ул - Башҡортостанда феодализм осорон сағылдырған ике тиҫтәнән ашыу монография, 250-нән ашыу ғилми мәҡәләләр яҙған автор. Уның тикшеренеү даирәһе бик киң - башҡорт халҡының 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнашыуы, XVIII быуатта Башҡортостанда тау-завод сәнәғәте үҫеше, 1767-1768 йылдарҙа башҡорттарҙың Уложенный комиссияға яҙған наказын тикшереү, этнодемография, халыҡ ҡатламдары структураһы һ.б. Һеҙгә тәҡдим иткән әңгәмәбеҙ Салауат Юлаев шәхесенә арнала.**

**Халҡыбыҙҙа шундай әйтем бар: "Батыры күп ил көләр, бахыры күп - бөләр". Аллаһыбыҙға шөкөр, Башҡорт иленең батырҙары бар замандарҙа ла күп булған. 1773 - 1775 йылдарҙағы Емельян Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышында әүҙем ҡатнашҡан башҡорттар араһынан Салауат Юлаев, батырҙарҙың батыры булып, киң танылыу таба. Хөрмәтле Нәзир Мырҙабай улы, һеҙ иҫәпләгәнсә, башҡорттарҙың ошо һуңғы оло ихтилалы барышында барлығы 116 яу башлығы Пугачев ғәскәрендә фельдмаршал, генерал, бригадир, баш полковник, полковник, атаман, баш күтәреүселәр отряды командиры кеүек хәрби дәрәжәләргә эйә була. Әммә халҡыбыҙ 20 йәшлек баш полковник, бригадир Салауат Юлаевты барыһынан да өҫтөнөрәк күреп, Башҡорт иленең баш батыры кимәленә күтәрә. Ошо тарихи феноменды нисек аңлатып була?**

- Батырҙарҙы заман үҙе тыуҙыра. Эйе, башҡорт халҡының ҡаһарманлығын Рәсәйҙә генә түгел, барса донъяла беләләр. Мәҫәлән, шул уҡ Крәҫтиәндәр һуғышында Кинйә абыҙ Арыҫланов Пугачевтың яҡын кәңәшсеһе була, беҙ уны һуңғы башҡорт ихтилалының идеологы, тип әйтә алабыҙ. Ә Салауат Юлаев, ихтилал етәкселәренең иң йәше булыуына ҡарамаҫтан, ҡыйыу яугир, оҫта сардар һәм ғәскәр ойоштороусы булараҡ, ихтилалда ҡатнашыусылар араһында бик тиҙ арала ҙур абруй ҡаҙана. Уның шағир-импровизатор булыуы билдәле, халыҡ алдында сығыш яһап та, яҙма мөрәжәғәттәре менән дә ирегеттәрҙең иң әүҙемдәрен үҙ ғәскәренә йәлеп итә алған ул. Уның йәш кенә егет булып, дәрт-дарманлы сағында дошмандарына ҡаршы яуға ашҡынып тороуын, хәҙергесә әйткәндә, йәшлек максимализмы һәм романтизмы менән дә аңлатырға була. Унан һуң, халыҡ азатлығы, милләт хоҡуҡтары хаҡына йән аямай көрәшкәне өсөн ул каторгаға ебәрелеп, ғүмерлек язаға дусар ителә, башҡорттар ошо хаҡта онотмай, риүәйәттәр, ҡобайырҙар, йырҙар аша быуындан-быуынға тапшыра килә. Салауаттың уҡымышлы булыуы ла уға абруй өҫтәй: ул иҫке төрки телендә уҡый-яҙа, Ҡөрьән-Кәримде яттан тиерлек белә, шәриғәт ҡанундары менән таныш була. Әлбиттә, ул атаһы, абруйлы йорт старшинаһы Юлай Аҙналин ғаиләһендә заманына ярашлы тәрбиә лә алған була.

Салауаттың атаһы Шайтан-Көҙәй ырыуы ерҙәренә законһыҙ рәүештә хужа булған заводчик Иван Твердышев менән низағлаша, эш судҡа барып етә. Өфө провинция канцелярияһы суды заводчикты яҡлай, ҡайһы бер мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Юлайҙы һәм уның улы Салауатты байтаҡ ҡына ваҡытҡа подвалға ябып, бығаулап тоталар. Юлай Аҙналин ҙур күләмдә штраф түләүгә хөкөм ителә. Ғәҙеллек талап итеп, Сенатҡа ялыу яҙһа ла, Екатерина II хөкүмәтенең бер генә инстанцияһында ла яҡлау тапмай. Юлай Аҙналин - күренекле башҡорт старшинаһы, батша ғәскәрендә тоғро хеҙмәт итә, Польша конфедераттарына ҡаршы яуҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн көмөш миҙал менән бүләкләнә.

Әммә ваҡытында урындағы батша чиновниктары тарафынан кәмһетелгән, ерҙәре законһыҙ тартып алынған старшина Юлай Аҙналин һәм уның улы Салауат кем яғына баҫырға тейеш һуң? Быны Салауат та, әле бик йәш булһа ла, яҡшы аңлағандыр, тим. Салауатты яугирҙары менән Стәрлетамаҡҡа, батша ғәскәрҙәренә ярҙам итеү өсөн тупланған башҡорт-мишәр корпусына ебәрәләр. Әммә 1773 йылдың 10 ноябрендә уның етәкселегендәге бер төркөм башҡорт яугирҙары ихтилалсыларға килеп ҡушыла.

Салауаттың ҡаһарманлыҡ юлын һайлауын тағы ла бер фактор менән аңлатып була. Башҡорттар сығыштары буйынса ғына түгел, йәшәгән, биләгән ерҙәре, хужалыҡ итеү рәүеше, йәмғиәттәге статустары, башҡа ҡайһы бер үҙенсәлектәре яғынан бер иш түгел. Белеүебеҙсә, Алтын Урҙа тарҡалғас, башҡорт биләмәләре өс өлөшкә бүленә: көнбайыш Башҡортостан ырыуҙары Ҡаҙан ханлығына ҡарай (был төбәктә, башлыса, тулыһынса ултыраҡ тормошҡа күскән башҡорттар йәшәй), көньяҡ тарафтарындағы башҡорт ырыуҙары (ярым ултыраҡ йәшәү рәүеше алып барыусылар) Нуғай ханлығына буйһона, ә төньяҡ-көнсығыш һәм Себер башҡорттары Күсемде үҙҙәренең ханы итеп ҡабул итә. Һуңғылары, көнбайыш һәм көньяҡ башҡорттарынан айырмалы, Иван Грозныйға шундуҡ баш һалмай, үҙ иректәре менән Рус дәүләтенә ҡушылмай. Шулай булғас, байтаҡ ҡына Урал аръяғы, Себер башҡорттары Күсем хандың һәм уның улдарының Рәсәйгә ҡаршы көрәшендә әүҙем ҡатнаша. Әммә ваҡыттар үтеү менән улар көнсығыштан да, көнбайыш тарафтан да Себергә үтеп ингән рус отрядтары ҡыҫымына эләгә, бик күптәре электән биләгән ерҙәренән башҡа тарафтарға күсеп китергә мәжбүр була. Себер ханлығы тарҡалғас, был башҡорт биләмәләре Рус дәүләте ҡарамағында ҡала. Объектив фекер йөрөткәндә, төньяҡ-көнсығыш һәм Себер яғы башҡорттары батша власына мәжбүри буйһондорола. Әлбиттә, улар батша хакимиәтенән үҙ ерҙәренә жалованный грамоталар ала алмай. Ошо киң төбәктең элек-электән иркен йәшәргә өйрәнгән халҡы батша чиновниктарының баҫым-ҡыҫымына даими рәүештә ризаһыҙлыҡ белдерә, йыш ҡубып торған башҡорт ихтилалдарында массовый рәүештә һәм бик әүҙем ҡатнаша. 1773 - 1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында Башҡортостанда ихтилал етәксеһе булып танылған 116 кешенең 40-ы Себер даруғаһы олоҫтарында һәм Исәт провинцияһында йәшәгән. Күрәһең, Салауаттың ата-бабалары ла азатлыҡ көҫәп йәшәгән, һәм уның ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында - 1 йыл да 16 көн эсендә халыҡ хәрәкәте етәксеһенә әүрелеүе нәҫеленән, ҡанынан да килгәндер, тип фекер йөрөтөргә ерлек бар.

**Быйыл Салауат батырҙың тыуыуына 270 йыл тула, һәм был дата халҡыбыҙ хроникаһында бик иҫтәлекле ваҡиға булып ҡаласаҡ. Башҡорт батырының исеме хәҙер бар донъяға билдәле. Фольклорҙа ғына түгел, хәҙерге заман мәҙәниәтендә, әҙәбиәтендә һәм сәнғәтендә уның героик образы мәңгеләштерелгән...**

- Эйе, халҡыбыҙҙың легендар улы, милли батырыбыҙ Салауат тураһында тарихсылар, шағирҙар, прозаиктар, драматургтар байтаҡ яҙҙы. Бөйөк Пушкин үҙенең "Пугачев тарихы"нда башҡорттоң милли батырына юғары баһа бирә. Ул башҡорт батырын Крәҫтиәндәр һуғышының күп юлбашсыларынан өҫтөн ҡуя һәм китабының бер бүлеген "Ажар Салауат"ҡа арнай. Совет яҙыусыһы Степан Злобин беҙҙең Салауатыбыҙҙы данлыҡлы һуғышсы, легендар шәхес дәрәжәһенә күтәрҙе, ә ошо роман нигеҙендә эшләнгән кинофильмы менән кинорежиссер Яков Протазанов Салауатты донъя кимәленә алып сыҡты. Баязит Бикбай либреттоһына яҙылған операһында Заһир Исмәғилев Салауатҡа, тыуған илен, халҡын ҡурсалап яуға сыҡҡан ҡаһарман яугирға дан йырлаһа, халыҡ шағиры Мостай Кәрим үҙенең трагедияһында уны оҫта ғәскәр башлығы, ҡурҡыу белмәҫ ҡаһарман һуғышсы һәм әбей батша Екатерина II менән ҡапма-ҡаршы ултырып, тәрән эстәлекле фәлсәфә һатырлыҡ аҡыл эйәһе итеп күрһәтте. Мәскәүҙән Өфөгә килеп, утыҙ йылдан артыҡ фән өлкәһендә эшләгән рус ғалимәһе Инга Гвоздикова үҙенең ғилми монографияһында Салауаттың батырлығы, бөйөклөгө, саф күңелле һәм һынмаҫ рухлы кеше булыуы тураһында иҫ киткес һөйөү, һоҡланыу һәм ғорурлыҡ менән бәйнә-бәйнә һөйләп бирҙе. Үкенескә ҡаршы, республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булырҙай был китап бөгөнгө көнгә саҡлы батырыбыҙ хаҡындағы берҙән-бер ҙур ғилми әҫәр булып ҡала. Беҙ, тарихсылар, архив материалдарынан тыш, ошо замандың күп ваҡиғалары хаҡында Инга ханымдың ошо китабына таянып яҙабыҙ. Салауат тураһында ҙур күләмле тарихи-документаль әҫәр күреү бәхетенә лә ирештек. Билдәле ғалим-филолог Мирас Иҙелбаев үҙенең Салауат батырыбыҙға арналған китабын шулай уҡ архив документтарына таянып яҙған.

**Халыҡ сығарған бер тарихи йырҙа "Булғадир булған ул Салауат егерме лә ике йәшендә", тигән һүҙҙәр бар. Салауатҡа 1773 йылда ни барыһы 19 йәш тула, һәм ул хәрби хеҙмәттә лә булмаған. Әммә ул ихтилал барышында күренекле сардар - халыҡ һуғышы тактикаһын хәрби оҫталарса ҡуллана белгән командир булып таныла.**

- Эйе, йөҙҙәрсә ғилми китаптарҙа, мәҡәләләрҙә, поэма һәм шиғырҙарҙа, роман һәм хикәйәләрҙә Салауат Пугачевтың иң яҡын, иң ышаныслы көрәштәше һәм ярҙамсыһы, Крәҫтиәндәр һуғышының иң абруйлы юлбашсыларының береһе, ҡаһарман яугир һәм талантлы ғәскәр етәксеһе, ялҡынлы шағир-сәсән булып күҙ алдына баҫа. Ләкин Салауаттың ошо сифаттарынан иң мөһиме - ғәскәр башлығы булыуы хаҡында күпселек осраҡта дөйөм әйтеп китеү менән сикләнелә. Ғәскәр етәксеһе сифаттары ҡасан, ҡайҙа, ниндәй алыштарҙа нисек сағылғанын, аныҡ алғанда, аҙ төҫмөрләйбеҙ. Ә бит Салауат Крәҫтиәндәр һуғышының юлбашсылары араһында иң йәше генә түгел, иң талантлыларының береһе, бөтәһенә ҡарағанда ла иң күп тапҡыр алышҡа ингән, ләкин бер тапҡыр ҙа ғәскәрен тулыһынса тар-мар итергә бирмәгән, башҡорт атлыларының традицион һуғыш ысулдарына ҡуша рус регуляр армияһының ул саҡтағы тактик алымдарын иҫ киткес оҫта файҙаланған берҙән-бер ғәскәр етәксеһе булған.

1994 йылда Яр Саллы журналисы Вәхит Имамов үҙенең "Татарҙар Пугачев яуында" тигән тарихи, ярым әҙәби әҫәрендә Салауаттың ғәскәр башлығы булыуын шик аҫтына ала. Хатта башҡорт халҡының Салауатты үҙенең милли геройы итеп иҫәпләүен "ниндәй хурлыҡ" тигән мыҫҡыллау дәрәжәһенә барып етә. Архив материалдары менән таныш булмаған, тик баҫылып сыҡҡан документтар һәм әҫәрҙәргә генә таянып эш иткән автор башҡаларҙың, шул иҫәптән Инга Гвоздикованың, нигеҙле фекер йөрөтөүенә һәм профессиональ намыҫына шик белдерә. Шуға күрә Салауат тураһында һаҡланып ҡалған архив документтары хаҡында әйтеп китеү мотлаҡтыр.

Салауат үҙенең көрәше тураһында һорау алған саҡта бик аҙ һүҙ менән яуап биргән, билдәле сәбәптәр арҡаһында булған факттарҙы һорау алыусыларҙан йәшергән. Салауаттың ғәскәр башлығы булыу сифаттары күпселектә уның дошмандары, каратель корпустары командирҙарының рапорттарында сағылыш тапҡан. Улар барыһы ла Салауаттың талантлы ғәскәр етәксеһе булыуына ғәжәпләнә һәм һоҡланырға мәжбүр була. Салауат ғәскәрендә хеҙмәт иткән, һуңынан һорау алыу комиссияларында интеккән яуҙаштары биргән яуаптарынан уның ғәскәр етәксеһе һәм халыҡты көрәшкә күтәреүсе, етәкләүсе булыуы хаҡында киңерәк, дөрөҫөрәк итеп күҙ алдына килтерергә була. Красноуфимск, Көңгөр, Уҫы, башҡа ҡалаларҙы һәм ҡәлғәләрҙе алған саҡта шаһит булған кешеләрҙең һөйләгәндәре лә Салауаттың ғәскәр етәксеһе булыу сифаттарын асырға ярҙам итә.

**Салауат батырҙың бик ҡыҫҡа, әммә мәңгегә тарихта ҡаласаҡ яу юлдары хаҡында бәйән итеп китеү урынлы булыр, тим.**

- Салауаттың яҙмышы - данлы ла, ғазаплы ла. Ул Крәҫтиәндәр һуғышында 1773 йылдың 11 ноябренән 1774 йылдың 25 ноябренә тиклем актив ҡатнаша, йәғни дәһшәтле ғәрәсәт эсендә 1 йылдан саҡ ҡына күберәк, көн иҫәбенә әйләндергәндә, 381 көн ҡайнай. 1774 йылдың 25 ноябренән 1775 йылдың 2 октябренә саҡлы 339 көн Салауат зindandarҙа бығаулап тотола, һорау алыу органдарында ғазаплана. Ике айға яҡын ауыр юл үтеп, улар атаһы Юлай менән бергә 1775 йылдың 29 ноябрендә Балтик диңгеҙе ярындағы Рогервик ҡәлғәһенә килеп етә. 25 йылға яҡын һөргөн иҙеүҙәрен күтәреп, 1800 йылдың 26 сентябрендә Салауат донъя ҡуя.

Ә уның мәңгелек халыҡ хәтере тупһаһына аяҡ баҫыуы 1773 йылдың 11 ноябрендә Бирҙе ҡәлғәһенә килеп, Пугачев ме-

**✓ *Пугачев юғары чиндарҙы теләһә кемгә, теләһә ни осраҡта өләшмәгән. Мәҫәлән, "Мужиктар батшаһы"нан полковник чинын алыу өсөн Алатдин Биктуғанов 400 кешелек отряд туплап, Пугачевҡа килтереп тапшыра.***

# ИР ИНЕ,
## илткән бер йыл

нән осрашыуынан башлана. Ике-өс аҙна эсендә батырлығы менән "мужиктар батшаһы"ның ихтирамын яулап, полковник дәрәжәһен алған саҡта Салауат Пугачев ғәскәренең иң йәш командиры була. Бер йылдан артығыраҡ барған Крәҫтиәндәр һуғышында ул 29 тапҡыр эреле-ваҡлы бәрелештәрҙә ҡатнаша. Шуларҙың икеһе - Пугачевтың Төп ғәскәре составында булһа, егерме етеһе - Салауат Юлаев етәкселегендәге үҙаллы һуғыштар. Ошо тиклем күп бәрелештәрҙә Крәҫтиәндәр һуғышының бер юлбашсыһы ла ҡатнашмаған. Ошо алыштарҙа Салауат дүрт тапҡыр яралана, ләкин һәр осраҡта ла ғәскәрен оҙаҡ ваҡытҡа ташлап китмәй. Яу бәрелештәрендә гел еңеүҙәр генә түгел, еңелеүҙәр ҙә була. Ләкин Салауат бер ваҡытта ла үҙ ғәскәрен тамам тар-мар итеүгә юл ҡуймай, төп көстәрен һаҡлап ҡала һәм яңынан көрәшкә күтәрелер була.

**Һәр бер халыҡ күтәрелешенең үҙ сәбәптәре була. Һүҙ барған Крәҫтиәндәр һуғышының ижтимағи, иҡтисади һәм сәйәси сәбәптәрен асыҡлап китһәгеҙ ине.**

- 1773 - 1775 йылдарҙа Рәсәй империяһын тетрәткән Крәҫтиәндәр һуғышының объектив сәбәптәре була. Әйтергә кәрәк, феодализм ҡанундары хөкөм һөргән дәүләттә аҫҡы ҡатлам кешеләренең тормош-көнкүреше еңелдәрҙән булмай. Бунтихтилалдың төп көстәре - Яйыҡ казактары, башҡорттар һәм заводтарға беркетелгән рус крәҫтиәндәре. Ул осорҙа хәрби сик хеҙмәтендә булған казактарҙа батша хөкүмәтенең уларҙың хоҡуҡтарын сикләүгә йүнәлтелгән сәйәсәте ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Завод крәҫтиәндәре, бөтөнләйгә хоҡуҡһыҙ крепостной ҡатлам булараҡ, аяуһыҙ эксплуатацияға дусар ителә. Башҡортттарға килгәндә, килешеүҙәр нигеҙендә тейелгеһеҙ булып иҫәпләнгән ерҙәренең заводчиктар тарафынан законһыҙ тартып алыныуы, меңәрләгән десятина ер майҙандарын һис бер килешеүһеҙ яңы төҙөлгән ҡәлғәләргә бирелеүе уларҙа батша чиновниктарына ҡарата нәфрәт уята. XVIII быуаттың 70 йылдары башындағы Башҡорт иле шартларға әҙер торған дары мискәһен хәтерләтә. Тик бер осҡон ғына кәрәк була, уны Яйыҡ казагы Емельян Пугачев ҡабыҙа.

1773 йылдың 17 сентябрендә Яйыҡ йылғаһы буйында урынлашҡан бәләкәй генә Бударинск ҡәлғәһенән 40 казак баш күтәреп, Яйыҡ ҡалаһына походҡа сыға. Баш күтәреүселәрҙең был төркөмөнә Дон ғәскәренән ҡасҡан, үҙен Петр III тип таныҡҡан ялған батша Емельян Пугачев етәкселек итә. Баш күтәреүселәрҙең һаны көндән-көн үҫә: уларға күпләп Яйыҡ казактары, рус крәҫтиәндәре, башҡорттар, татар, мишәр, ҡалмыҡ, сыуаш, мордва, мари һәм башҡа рус булмаған халыҡтарҙың вәкилдәре күпләп килеп ҡушыла башлай.

Яйыҡ йылғаһы буйлап теҙелгән ҡәлғәләр бер-бер артлы, ҡаршылыҡ күрһәтмәй, Пугачевҡа бирелә, ә уларҙың һалдаттары һәм казактары, ваҡытлыса сик буйы хеҙмәте алып барған башҡорттар, мишәрҙәр һәм ҡалмыҡтар баш күтәреүселәр яғына сыға. Ырымбур эргәһенә килеп еткәндә инде Пугачевтың ғәскәрендә биш мендән артыҡ кеше була. Шулай итеп, 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы башланып китә һәм ҙур тиҙлек менән Көньяҡ Уралдың бөтә төбәктәренә тарала башлай.

Пугачевтың ғәскәрен тар-мар итергә Ырымбур губернаторы И.А. Рейнсдорп Яйыҡ далаларына казак командаларын ебәрә, ә башҡорттарҙан Миндәй Түпәевты, башҡорт старшиналары Ҡолой Балтасов менән Йосоп Нәҙеровты башҡорт олоҫтарына ебәрә. Шул уҡ маҡсат менән Өфөнән Стәрле пристаненә воевода ярҙамсыһы П.Н. Борисов, капитан, кенәз И.Т. Ураков килә. Үҙҙәренә ярҙам итер өсөн улар бында Нуғай юлының баш старшинаһы Әлибай Мырҙағоловты саҡыртып ала. Улар 5 мең кешелек Стәрлетамаҡ башҡорт-мишәр карателдәр корпусы ойошторорға тейеш була, ошондай уҡ эшкә Урал аръяғында Исәт провинцияһы воеводаһы А. П. Веревкин һәм Үр Яйыҡ ҡәлғәһе коменданты полковник Е.А. Ступашин етәкселек итә.

Һәр бер башҡорт олоҫона Өфөнән һәм Силәбенән сапҡынсылар ебәрелә. Бер айҙан артығырак ваҡыт эсендә бөтәһе 10 меңдән күберәк башҡорт һыбайлыһы каратель корпустарына йәлеп ителә. Миндәй, Ҡолой һәм Йосоп Башҡортостандың көньяҡ олоҫтарында бишәр-алтышар йөҙләк башҡорт командаларын Имәнғол ауылынан Ырымбурға оҙатып тора. Урал аръяғында йыйылған 4800 кешелек башҡорт командаһы старшина Иҫәй Туҡтағолов етәкселегендә Ырымбурға ҡарай юл ала. Богданов, Ураков һәм Әлибай Стәрлетамаҡта 2355 башҡорт һәм мишәр һыбайлыларынан каратель корпус туплай. Бына ошо корпусҡа 1773 йылдың октябрь айының һуңғы көндәрендә Себер даруғаһы Шайтан-Көҙәй олоҫо старшинаһы Юлайҙың улы Салауат та килеп ҡушыла. Атаһы уға үҙ олоҫонда йыйылған 95 кешелек команданы Богдановҡа илтеп ҡушыуҙы тапшырған була.

**Каратель корпусына ебәрелгән башҡорттарҙың Пугачев ғәскәренә ҡушылыуының билдәле бер сәбәптәре барҙыр бит?**



***Ә уның мәңгелек халыҡ хәтере тупһаһына аяҡ баҫыуы 1773 йылдың 11 ноябрендә Бирҙе ҡәлғәһенә килеп, Пугачев менән осрашыуынан башлана. Ике-өс аҙна эсендә батырлығы менән "мужиктар батшаһы"ның ихтирамын яулап, полковник дәрәжәһен алған саҡта Салауат Пугачев ғәскәренең иң йәш командиры була. Бер йылдан артығыраҡ барған Крәҫтиәндәр һуғышында ул 29 тапҡыр эреле-ваҡлы бәрелештәрҙә ҡатнаша. Шуларҙың икеһе - Пугачевтың Төп ғәскәре составында булһа, егерме етеһе - Салауат Юлаев етәкселегендәге үҙаллы һуғыштар. Ошо тиклем күп бәрелештәрҙә Крәҫтиәндәр һуғышының бер юлбашсыһы ла ҡатнашмаған. Ошо алыштарҙа Салауат дүрт тапҡыр яралана, ләкин һәр осраҡта ла ғәскәрен оҙаҡ ваҡытҡа ташлап китмәй. Яу бәрелештәрендә гел еңеүҙәр генә түгел, еңелеүҙәр ҙә була. Ләкин Салауат бер ваҡытта ла үҙ ғәскәрен тамам тар-мар итеүгә юл ҡуймай, төп көстәрен һаҡлап ҡала һәм яңынан көрәшкә күтәрелер була.***

- Эйе, ихтилалды баҫтырыу өсөн йыйылған башҡорттар урындағы батша властарының ышанысын аҡламай. Уларҙың командалары бер-бер артлы баш күтәреүселәр яғына сығып бөтә. Стәрлетамаҡ корпусы ла 10 ноябрҙә Бикҡол ауылы эргәһендә И. Н. Зарубин һәм А. А. Овчинниковтың баш күтәреүселәр ғәскәренә үҙ теләге менән килеп ҡушыла. Был отрядта үҙенең 95 көҙәйлеһе менән Салауат та була. Ул Әлибай старшина менән бергә Стәрлетамаҡ корпусын пугачевсылар яғына күсереүгә етәкселек итә. Бына ноябрь иртәһендә ҡамауға алынған Ырымбурҙан 22 туп менән ҡоралланып һөжүмгә сыҡҡан 2400 кешелек корпустың һөжүмен кире ҡаға. 26 ноябрҙә Рейнсдорп үҙ корпусын йәнә һөжүмгә ташлай. Ике алышта ла баш күтәреүселәрҙең төп көсөн һыбайлылар тәшкил итә. Тәүгеһендә улар казактарҙан һәм башҡорттарҙан торһа, һуңғыһында тотошлайы менән башҡорттар ғына алыша (был ваҡытта Пугачев Яйыҡ казактары менән Верхне-Озерный ҡәлғәһен алырға киткән була). ошо көндән Салауаттың Крәҫтиәндәр һуғышында актив ҡатнашыуы башланып китә. Каратель корпусына йыйналған башҡорттарҙың ялған Петр III батша яғына сығыуының төп сәбәбе - Емельян Пугачевтың башҡорттарға ебәрелгән махсус Манифесында уларға азатлыҡ, үҙ ерҙәренә үҙҙәре хужа буласағын, диненең һәм ғөрөф-йолаларының тейелгеһеҙлеген вәғәҙә итеүе. Әйтергә кәрәк, Пугачев ошо Манифесты Кинйә абыҙ йоғонтоһонда яҙҙырта.

**Салауаттың сардарлыҡ һәләте нисек асыла, шул хаҡта ла әйтеп үтһәгеҙ ине.**

- Башҡорт яугирҙары 11 ноябрҙән дә ҡалмай Бирҙе ҡәлғәһенә килеп еткән булырға тейеш. 13 ноябрҙә пугачевсылар Сембер воеводаһы, полковник П. М. Чернышевтың 1500 кешелек корпусын тар-мар итә, 14

Был бәрелештең икеһендә лә Салауаттың әүҙем ҡатнашыуында шик юҡ. Беренсенән, ул ошо бәрелештәрҙә ике тапҡыр яраланған була. Ҡулға алынғас, һорау алыусыларға ул быны, Ырымбурҙы штурмларға ҡушылғас, Әбей батшаға хыянат итмәҫ өсөн фетнәселәрҙән ҡасып барған саҡта, Яйыҡ казактары ҡыуып етеп йәрәхәтләне, тип аңлата. Бының һорау алыусыларҙы алдар өсөн генә уйлап сығарған уйҙырма икәне күренеп тора. Арттан ҡыуып еткән казактар уны һөңгө йә ҡылыс менән, йә булмаһа, мылтыҡтан атып арт яҡтан йәрәхәтләгән булырҙар ине. Ә Салауаттың яралары ҡулында һәм сикәһендә була. Икенсенән, Бирҙе ҡәлғәһендә булған барлы-юҡлы өс аҙна эсендә Пугачев Салауатҡа полковник чины бирә. Ни өсөн? Фетнәселәрҙән карателдәргә ҡасырға маташҡаны өсөн түгелдер бит?

Ғөмүмән, Пугачев юғары чиндарҙы теләһә кемгә, теләһә ни осраҡта өләшмәгән. Мәҫәлән, "Мужиктар батшаһы"нан полковник чинын алыу өсөн Алатдин Биктуғанов 400 кешелек отряд туплап, Уҫынан Ҡаҙанға ҡарай юл алған Пугачевҡа килтереп тапшыра һәм полковник чины биреүҙе һорай. Ләкин "батша" уға "отрядың 400 кешелек кенә, айырым полк була алмай" тип, полковник чинын биреүҙән баш тарта һәм Алатдинды атаман итеп кенә тәғәйенләй. Ә Салауаттың көҙәйҙәр отрядында барлығы 95 кеше була. Ырымбур өсөн барған һуғыштарҙа Пугачевтың иғтибарын йәлеп итерлек һәм полковник чинын бирер өсөн уға ҡаһарманлыҡ ҡына түгел, ә ҙур төркөм ғәскәр менән оҫта етәкселек итә белеүен дә күрһәтергә тейеш булған. Тимәк, баш күтәреүселәр яғына сыҡҡан Стәрлетамаҡ корпусы, йә булмаһа уның ҙур өлөшө беренсе көндән үк Салауаттың ҡул аҫтында булған. Дөрөҫ, Салауат үҙе һорау алыусыларға, ялған батша полковник чинын көҙәйҙәр һорауы буйынса бирҙе, тип аңлата.

Нисек кенә булмаһын, 19 йәшлек башҡорт егете Салауат үҙенең ҡыйыулығы, ҡаһарманлығы, кешеләрҙе көрәшкә әйҙәү оҫталығы һәм оҫта ғәскәр етәксеһе булыуы менән ике-өс аҙна эсендә Пугачевтың иғтибарын һәм ихтирамын яулап өлгөрә. Ул Салауатҡа башҡорттарҙы баш күтәрергә саҡырған Манифест тоттороп, Себер юлына оҙата. 1773 йылдың декабрь аҙаҡтарында ғына тыуған яғына ҡайтып еткән Салауат аҙна-ун көн эсендә 800 кешелек отряд йыйып өлгөрә һәм 1774 йылдың 12 ғинуарында казактар саҡырыуы буйынса Красноуфимск ҡәлғәһенә килеп етә. Сатнама ҡышҡы һыуыҡта ҡар баҫҡан урман-тау юлдарынан атта елеп барып, шул ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә меңәрләгән кешеләрҙе яуға күтәреп, унарлаған тарҡау отрядты уҡмаштырып өлгөргән йәш егеттең өлгөрлөгөнә лә, ҡыйыулығына ла, ойоштороу оҫталығына ла тағын хайран ҡалаһың һәм һоҡланаһың. Булған бит башҡорттоң айбарлы улдары!

**(Дауамы 10-сы биттә).**

✓ *Ошо һуңғы алыштан һуң ғәскәрен таратып ебәреп, Салауат үҙенең 4 яҡын көрәштәше менән Урал тауҙарын артылып, ҡаҙаҡ далаларына китергә, унда яңы ғәскәр туплап, килһә яҙҙа көрәште дауам итергә уйлай.*



**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

Салауат килеп еткәндә Красноуфимск-Көңгөр тирәләре таяҡ тыҡып ҡужғытҡан ҡырмыҫҡа иләүен хәтерләтә. Бында оло чинлы, тәжрибәле етәкселәргә мохтажлыҡ булмай. Пугачев армияһы полковниктары Ҡәнзәфәр Усаев, Батырҡай Иткинин, Әбдей Абдулов, атамандар Матвей Чигвинцев, Михаил Мальцев һәм башҡалар Көңгөргә поход ойоштороп, ҡалаға һөжүм итәләр, бик күп ҡәлғәләрҙе, заводтарҙы һәм ауылдарҙы үҙ ҡулдарында тоталар. Бер нисә көн эсендә Салауат бөтә был көстәрҙе үҙ ҡулы аҫтына туплай, ҡәлғәләрҙә һәм заводтарҙа атамандар һайлауҙы ойоштора, ныҡлы тәртип булдыра һәм 15 ғинуарҙа 5 меңгә яҡын кешенән торған ғәскәр менән Красноуфимскиҙан Көңгөргә ҡарай юл ала. Уға 40 саҡрым алыҫлыҡта Бәгәләш йылғаһы ярында ултырған Бәгәләш ауылында нығынып, ул яңынан көс туплай башлай. Ул үҙе лә, уның ярҙамсылары ла тирәяҡҡа таралып, халыҡты көрәшкә күтәрә. 21 февралдә, 3 һәм 9 мартта ул өс тапҡыр Иван Гурьевтың каратель командаһы менән бәрелешә һәм уны тар-мар итә, бер нисә крәҫтиәнде үҙенең отрядына ҡушып, командаға ҡалған кешеләрен Зарубин ғәскәренә оҙата.

12 мартта, 2 мең кешелек ғәскәр туплап, Салауат бер ҡаршылыҡһыҙ Красноуфимск ҡәлғәһенә инә. Көңгөргә ҡайтып киткән подполковник А.В. Папав командаһы Красноуфимскиға ҡарай ашыға. Ихтилалсылар бик насар ҡоралланған була. Уҡ-һаҙаҡ, ҡылыс һәм һөңгө менән генә ҡоралланған салауатсыларға яҡшы ҡоралланған карателдәргә йөрәп, Пугачев яңынан ғәскәр йыя. Уға башҡорттар һәм завод крәҫтиәндәре күпләп килеп ҡушыла башлай. Ул Башҡортостандың көньяҡ олоҫтарынан Урал арьяғына сыға, унан төньяҡ Башҡортостан аша үтеп, Ҡаҙан ҡалаһына походҡа әҙерләнә. Шуға ул үҙенең янына ышаныслы ярҙамсыларын йыйырға ашыға. Ошо иҫәп менән ул Белобородовты һәм Салауатты ла үҙ янына саҡыра. Белобородов "батша" янына ашыға, ә Салауат Әй буйында тороп ҡала, ғәскәр йыйыуын дауам итә.

Ялған батшаның ғәскәрҙәрен ҡыйраттыҡ, фетнәне баҫтырҙыҡ, тип шатланған карателдәр Пугачевтың яңынан ғәскәр йыйыуын белеп, ҡоттары оса, уны тиҙерәк ҡыйратырға, тоторға ашығалар. Генерал И.А. Деколонгтың ҙур каратель корпусы уның артынан төшә лә, Троицк крәҫтиәндәр һуғышының был осоро тураһында XIX быуаттың рус тарихсыһы П.Л. Юдин бына нимә тип яҙа: "Әгәр ҙә Пугачевтың Салауат кеүек ажар ярҙамсыһы булмаһа, ул Башҡортостанда оҙаҡ була алмаҫ, Деколонг һәм Михельсондан күп тапҡырҙар тукмалғандан һуң яңынан ғәскәрен тергеҙә алмаҫ һәм Ҡаҙанға поход та яһай алмаҫ ине". Ғалимдың был фекере менән килешмәү мөмкин түгел.

5 июндә Ҡыйғы ауылы эргәһендә булған алыштан һуң Пугачев Башҡортостандың төньяҡ олоҫтары аша Уҫыға юл тота. Уға Салауат менән Белобородов та эйәрә. Салауат Төп ғәскәрҙең һул яғынан, Белобородов уң яғынан юл ярып, эреле-ваҡлы каратель командаларынан юлды әрсеп, халыҡты Пугачев ғәскәренә ылыҡтырып бара. Башҡорт егеттәре үҙҙәренең өлгөрратель корпустары күбәйә, әбей батшаға тоғро ҡалған башҡорт һәм мишәр старшиналары ауыһыҙ ҡоторона башлай. Салауаттың тоғро арҡадашы Ҡәнзәфәр Усаев ҡулға алына. Уҫы юлынан Өфөгә ҡарай юлланған Туктамыш Ишбулатов кире ҡайтып китә.

**Шулай итеп, батша карателдәре Салауатты ҡулға алалар...**

- Салауаттың үҙҙәре өсөн иң ҙур ҡурҡыныс булыуын батша властары ла аңлай. Шуның өсөн улар уны тиҙерәк ҡулға алырға, ғәскәрен тар-мар итергә ашыға. Салауатты үҙ теләге менән баш һалырға өндәйҙәр, уның ике улы менән ике ҡатынын ҡулға алалар. Ләкин Салауат көрәште дауам итә, иптәштәре алдында үлгәнсе көрәшергә ант итә. Өфөнән Салауатҡа ҡаршы подполковник И.К. Рылеевтың корпусын ебәрәләр. 18 сентябрҙә Бир йылғаһы ярында ултырған Тимошкино ауылы эргәһендә, 22 сентябрҙә Елдәк ҡәлғәһенән йыраҡ булмаған Нуркино ауылы янында ул Салауаттың 3 мең кешелек атлы ғәскәре менән 2 тапҡыр ҡаты бәрелешкә инә. Беренсе тапҡыр ҙур юғалтыуҙар менән (400 кеше һәләк була) Салауат Елдәк ҡәлғәһенә сигенә, унан Ҡатау заводы яғына китә.

# САЛАУАТ БАТЫР ИР ИНЕ,

## йәки Үлемһеҙлеккә илткән бер йыл

Ҡәнзәфәр Усаев һәм Иван Васевтың отрядтары килеп ҡушыла. 23 ғинуарҙа Көңгөргә штурмларға ҡарар ителә. Иртәнге сәғәт 6-ла Салауат төньяҡтан, казак атаманы Иван Кузнецов көньяҡтан бер үк ваҡытта һөжүм башларға тейеш була.

23 ғинуарҙың таңында билдәләнгән ваҡытта Салауаттың отряды Көңгөргә һөжүм башлай. Уның егеттәре иҫ киткес оҫталыҡ һәм ныҡышмалыҡ менән һуғыша, улар, ҡапҡанан бәреп инеп, эшселәр биҫтәһен баҫып ала. Саналарға һалып ныҡытылған туптарҙы әле бер ергә, әле икенсе ергә күсереп йөрөтөп, ҡалаға ут асалар. Шулай итеп, ҡамауҙағыларға ҡурҡыу һәм шом һалалар, уларҙың өс тубын сафтан сығаралар. Өс сәғәт буйы аяуһыҙ алыш бара. Үкенескә ҡаршы, Иван Кузнецов үҙенең төркөмө менән 3 сәғәткә һуңлап килеп етә. Ҡалалағылар ошонан файҙаланып, бөтә көстәрен һәм туптарҙы Салауатҡа ҡаршы ташлай. Дарылары бөтөп, туптары атыуҙан туктағас ҡына Салауат үҙенең отрядын тәртипле рәүештә ҡаланан алып сыға һәм Иҫке Посадҡа ҡарай сигенә. 24 ғинуарҙа Салауат менән Кузнецов яңынан Көңгөргә һөжүм башлай. Ләкин һөжүм ваҡытында Салауат яралана. Был уның дүртенсе һуғышы һәм өсөнсө яраһы. Уның ботона мылтыҡ пуляһы инеп ултыра. Яраһының тиҙ төҙәлмәүе уны әйәнә ҡайтып китергә мәжбүр итә.

Көңгөргә майор Д. О. Гагриндың көслө каратель командаһы килеп етә, ул гарнизон көстәре менән бергә Красноуфимскиға һөжүм башлай. 19 февралдә Салауат 4 мең кешелек ғәскәре менән ҡәлғәне һаҡлау өсөн Гагрин корпусына ҡаршы сыға. Әммә яҡшы ҡоралланған регуляр корпусҡа ҡаршы яңы ғына тупланған баш күтәреүселәр ғәскәре ҡаршы тора алмай. Яралы ҡаһарман һуғышсыларын Ҡариҙелдең һул яҡ ярына алып сығырға мәжбүр була. Әммә Салауат төп көстәрен һаҡлап ҡала. Ҡәлғәнән ҡаршы тороу ауыр була. Бик аҙ ғына юғалтыуҙар менән (12 кеше дошманға әсир төшә) Салауат Бәгәләш ауылы яғына сигенә. 17 мартта бында тағы ла ҡаты ҡыйралыш була. Яҡтарҙың береһе лә еңеүгә өлгәшә алмай. Папав йонсоған корпусын кире Көңгөргә алып ҡайтырға мәжбүр була, Салауат үҙ ғәскәре менән тыуған яҡтарына юл ала. Был уның 4 ай эсендә ҡатнашҡан 11-се һуғышы була.

ҡәлғәһе менән Лягушино ауылы эргәһендә ҡыуып етеп, аяуһыҙ ҡыйрата. 10 меңлек ғәскәренән биш йөҙләп кенә кешеһе ҡалған Пугачев бик ауыр хәлдә тороп ҡала. Етмәһә, уға ҡаршы Өфөнән Эҫем, Һатҡы заводтары аша И.И. Михельсон корпусы ашыға. Пугачев ҡапҡанға эләгергә тейеш була. Ошо ваҡытта уға башҡорттар ярҙамға килә. Улар "батша"ны үҙ йәйләүҙәрендә карателдәрҙән йәшерә, йөҙәрләп, ләктәрен күрһәтә был походта. Өс йөҙ кешелек отрядын Салауат Бөрөнө ҡамап ятҡан Бәхтийәр Ҡанҡаев менән Арыҫлан Ранголовҡа ярҙамға ебәрә. 11 июндә Төп ғәскәрҙән алда барған Салауат менән Белобородов Ачит ҡәлғәһе эргәһендә подполковник А.В. Папавтың көслө каратель корпусы менән осраша. Папав, Пугачевтың килгәнен белеп, уға ҡамасаулар өсөн Көңгөрҙән Красноуфимскиға юл ковник И.К. Рылеевтың корпусын ебәрәләр. 18 сентябрҙә Бир йылғаһы ярында ултырған Тимошкино ауылы эргәһендә, 22 сентябрҙә Елдәк ҡәлғәһенән йыраҡ булмаған Нуркино ауылы янында ул Салауаттың 3 мең кешелек атлы ғәскәре менән 2 тапҡыр ҡаты бәрелешкә инә. Беренсе тапҡыр ҙур юғалтыуҙар менән (400 кеше һәләк була) Салауат Елдәк ҡәлғәһенә сигенә, унан Ҡатау заводы яғына китә.

Салауаттың һуңғы 29-сы алышы ноябрь айында Ҡатау заводы эргәһендә генерал Ф. Ю. Фрейман корпусы менән була. Күрәһең, был ваҡытта Салауат ғәскәре ҙур булмағандыр, сөнки карателдәр менән тулған Башҡортостанда, дөйөм көрәште ойоштороу мөмкинлеге булмаҫын күреп, ул үҙе ғәскәрен килһә яҙға саҡлы таратып ебәрергә ҡарар итә. Ошо һуңғы алыштан һуң ғәскәрен таратып ебәреп, Салауат үҙенең 4 яҡын көрәштәше менән Урал тауҙарын артылып, ҡаҙаҡ далаларына китергә, унда яңы ғәскәр туплап, килһә яҙҙа көрәште дауам итергә уйлай. Әммә ул 25 ноябрҙә ҡулға алына. Быныһы инде алыш та, бәрелеш тә түгел: һатлыҡ мишәр старшиналары Мөксин менән Йөмғүр Әбделсәләмовтар, Салауҡа ярҙамға килдек тип алдап, башҡорт ҡаһарманын ҡулға төшөрәләр. Ошо көндән алып тикшереүҙәр, һорау алыуҙар, язалауҙар башлана һәм улар 339 көн дауам итә.

*- Салауаттың үҙҙәре өсөн иң ҙур ҡурҡыныс булыуын батша властары ла аңлай. Шуның өсөн улар уны тиҙерәк ҡулға алырға, ғәскәрен тар-мар итергә ашыға. Салауатты үҙ теләге менән баш һалырға өндәйҙәр, уның ике улы менән ике ҡатынын ҡулға алалар. Ләкин Салауат көрәште дауам итә, иптәштәре алдында үлгәнсе көрәшергә ант итә. Өфөнән Салауатҡа ҡаршы подполковник И.К. Рылеевтың корпусын ебәрәләр. 18 сентябрҙә Бир йылғаһы ярында ултырған Тимошкино ауылы эргәһендә, 22 сентябрҙә Елдәк ҡәлғәһенән йыраҡ булмаған Нуркино ауылы янында ул Салауаттың 3 мең кешелек атлы ғәскәре менән 2 тапҡыр ҡаты бәрелешкә инә.*

1774 йылдың яҙында һуғыш юлдары Салауатты Крәҫтиәндәр һуғышының иң атаҡлы һәм талантлы ғәскәр етәкселәренең береһе Иван Белобородов менән осраштыра. Белобородовтың отряды Екатеринбург тау заводтары районында данлыҡлы еңеүҙәренән һуңыраҡ булған тиңһеҙ алышта тар-мар ителә. Тынғыһыҙ яу башлығы Ырымбурға, "батша" янына барып, көнәш ҡорорға ниәтләгән була. Әммә март аҙағы - апрель баштарында баш күтәреүселәрҙең төп көстәре ҡаты ҡыйратыла. Ырымбур эргәһендә Пугачев үҙенең ғәскәрен һәм бик күп талантлы ярҙамсыларын юғалтып, Башҡортостанға ҡаса. Шул уҡ ваҡытта Өфө эргәһендә Зарубин, Минзәлә янында Ҡаранай Моратов, ә Силәбелә Грязнов ғәскәрҙәре тар-мар ителә. Ошо осорҙа ихтилал юлбашсыһы баҙап ҡала. Бына шунда уны Кинйә Арыҫланов тыуған яҡтарына алып китә лә инде.

Заводтан заводҡа, ҡәлғәнән ҡәлғәгә, ауылдан ауылға күсеп менәрләп уның ғәскәренә яҙыла. Пугачев башҡорт ғәскәре етәкселәренә фельдмаршал, генерал, бригадир, баш атаман һәм унға яҡын полковник дәрәжәһен юҡҡа ғына бирмәгәндер. Тикшереүҙәр комиссияһында ул "...был ваҡытта минең ғәскәремә 10 меңләп Урал башҡорто ҡушылды", - тип яуаплай.

Бөләгә тарыған Пугачевҡа ҡушылырға тип, Әй буйҙарынан үҙенең 3 мең һыбайлыһы менән Салауат ашыға. "Батша"ның ауыр хәле уға яҡшы билдәле булған, күрәһең. Ул Пугачевты эҙәрлекләргә ынтылған Михельсонға ҡаршы төшә, 7, 8, 13 һәм 31 майҙа Эҫем заводы эргәһендә ул 4 тапҡыр Михельсон корпусы менән бәрелешә. 2 июндә Салауат Пугачевҡа килеп ҡушыла. 3 һәм 5 июндә улар Михельсонға ҡаршы икеүләп һуғышалар. Был ваҡытта Деколонг Пугачевтың эҙен юғалтып, аҙашып ҡала, Михельсон таушалған корпусы менән Өфөгә ҡайтып китергә мәжбүр була. Шулай итеп, Пугачев ҡотола, ғәскәре иҫән ҡала.

тотҡан була. Ҡаты алыш башлана. Баш күтәреүселәр, бигерәк тә Салауаттың атлылары ҡыҫымына сыҙай алмай, Папав ҡала ҡапҡаһына инеп ҡасып ҡотола.

Салауат менән Белобородов алға барыуын дауам итә. 14 июндә улар Уҫы ҡалаһына һөжүм башлай һәм 18 июнгә саҡлы уны алыр өсөн өҙлөкһеҙ һуғыш алып бара. 18 июндә Уҫы янына Төп ғәскәре менән Пугачев үҙе килеп етә, һөжүм оторо ҡыҙып китә. Ҡаланың эшселәр поселогы (форштандт) Пугачев килгәнсе үк яндырылған була. Ҡаты ҡыҫымға сыҙай алмай, 20 июндә гарнизон Пугачевҡа баш һала. Был еңеүҙә рус армияһының тактик алымдарын беренселәрҙән булып камиллаштырыу дәрәжәһенә күтәрелгән ғәскәр етәкселәре Салауат менән Белобородовтың роле бик ҙур була.

25 тапҡыр һуғышта ҡатнашҡан, дүртенсе тапҡыр яраланған Салауат тыуған яҡтарына ҡуҙғала. Башҡортостанда хәрәкәт Пугачев ҡулға алынғас та туктамай. Әммә Башҡортостанда ка-

Йәш батырҙың ғүмере - 45 йыл, шуның 25 йылы тотҡонлоҡта уҙа. Әммә ошо бер йыл буйына алыштарҙа ҡатнашыуы һәм каторгала ғазап кисереүе менән Салауат Юлай улы үҙенә үлемһеҙлек яулай. Башҡорт халҡының Алдар Иҫәкәев, Ҡаһым түрә, Зәки Вәлиди, Муса Мортазин, Миңлеғәли Шайморатов кеүек айбарлы ҡаһармандары исемлегендә легендар Салауат беренсе рәттә, беренсе урында тора, һәм уның исеме халҡыбыҙ хәтерендә мәңгегә ҡаласаҡ.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *"Бына ошонда Салауат та, атаһы ла күмелгән", - тине. Ҡатынға был турала ҡартатаһы һөйләгән, ә ҡартатаһына үҙ ҡартатаһы бәйән иткән. Әгәр ҙә был ҡәберлекте ҡаҙып ҡарағанда бер сенсация булыр ине лә бит...*



ХӘТЕРЛӘП...

**Мин Салауат Юлаев ғүмеренең һуңғы йылдарын үткәргән Рогервикта (хәҙерге Палдиски) 5 тапҡыр булдым. Тәүге тапҡыр барғанда унда эстондар бөтөнләй юҡ ине. Совет хәрбиҙәре йәшәгән ябыҡ ҡала булды ул. Палдиски ни бары бер урамлы ғына бәләкәй ҡала. Беҙ унда Тайфур ағай Сәғитов менән берәр эстонды осратмабыҙмы тип эҙләп тә йөрөгәйнек. Әгәр ҙә Салауатҡа бәйле ниндәйҙер легендалар тыуған икән, улар ситкә киткән эстондар менән бергә юғалған, күрәһең.**

# ҺУҢҒЫ ТӨЙӘГЕНДӘ, ПАЛДИСКИҘА




Салауат тураһындағы уйҙырмалар менән донъя тулы инде ул. Мәҫәлән, каторгала саҡта Салауаттың һөйгән ҡыҙы булыуы Мостай Кәримдең фантазияһы. Һәр хәлдә, мин документтар буйынса ғына фекер йөрөтәм, ә ундай мөхәббәт тарихы теркәлмәгән.

Икенсенән, Рогервик крепосының тарихын алайыҡ. Уны 1718 йылда Петр Беренсе хәрби караптар инеп ултырырлыҡ порт итеп төҙөтә башлай. Бөтөн яҡтан каторжандарҙы эшкә ебәрәләр. Меңәрләгән әсирҙәр эшләй унда. Эш һәм йәшәү шарттары иҫ киткес ҡаты була. Каторжандар диңгеҙ ярын ике бәләкәй утрау менән тоташтырыр өсөн таштар ташый. Әммә диңгеҙ тулҡыны ташлаған таштарҙың аҫтындағы ҡомдарҙы йыуып, ныҒытма диңгеҙ төбөнә убылып тик тора. Эштәр бер башланып, бер туҡтатылып, 1768 йылға тиклем дауам итә.

Яңы батша власҡа килгән һайын эштәр яңыртылып тора. Екатерина Икенсе лә эштәрҙе дауам итеп ҡарай, аҙаҡ ул да ҡул һелтәй. 1768 йылда ундағы эштәр бөтөнләйгә туҡтатыла. Ә пугачевсылар Рогервикҡа 1775 йылда ғына килтерелә. 1777 һәм 1797 йылдарҙағы мәғлүмәттәр буйынса, унда унлаған ғына каторжан йәшәгән. Улар төрлө эштәр башҡарған. Рогервикта XVIII быуаттың аҙағында сиркәү төҙөлә башлаған. Пугачевсылар ҙа был төҙөлөштә ҡатнашҡан. Сиркәү эргәһендә бер бина бар, хәҙер унда ашхана урынлашҡан. Уны төҙөүҙә лә ҡатнашҡан салауаттар. Салауат менән бергә булыусылар араһында атаһы Юлайҙан һәм Ҡәнзәфәр Усаевтан тыш, Почиталин, Долгополовтарҙың да булыуы билдәле. 1797 йылда уларҙың барыһы ла иҫән булған әле. Һәр хәлдә, диңгеҙ эсенә таш ташлаған каторжандар кеүек этлек күрмәгәндер улар. Ә теге саҡта әсирҙәр ныҡ ҡырылған булған.

Пугачевсыларҙың каторга урыны үҙенә күрә курорт зонаһы иҫәпләнә. Бигерәк тә йәйҙәрен унда дүрт-биш ай буйына йылы елдәр иҫеп, әсирҙәрҙең һаулығын нығытҡан. Әлеге мәлдә лә Балтик диңгеҙе буйында курорттар эшләй. Ә февраль-март арауығында унда иң ҡаты һауа торошо күҙәтелгән. Каторжандарҙың казематы йылытылмаған. Мин уларҙың эсенә инеп ҡарап йөрөнөм. Стеналары икешәр метр ҡалынлыҡта, ике яҡтан берәр метр ара ҡалдырып төҙөгәндәр. Уртаһында һауаһы булғас, был ысул каземат эсендәге йылыны оҙаҡ ваҡыт һаҡларға ярҙам иткән.

Эстондар өлкән быуын вәкилдәренән һорашып, Салауаттың исемен дә хәтергә ҡайтарғандар. Хатта уның исемен сиркәүҙә "изге" тип теркәп ҡуйғандар. Һуңғы барғанда бер әбей беҙҙе сиркәү буйлап йөрөттө. Ул Салауатты ныҡ яратып һөйләй. Салауаттың исеме эстон фольклорында һаҡланып ҡалыуы хаҡында миңә Дәүләт ағай Мәһәҙиев һөйләгәйне. Имеш, эстон балыҡсылары кистәрен көньяҡтан килгән бер каторжандың йырын тыңларға яратҡан. Көндөҙҙәрен балыҡсылар әсирҙе һыйлаған, ул бигерәк тә кәбеҫтә яратҡан. Хәйер, фараз бер нәмә, ә миңә, ғалим булараҡ, документ, сығанаҡ кәрәк.

Был төбәккә барған һайын Салауаттың ҡәбере хаҡында берәй мәғлүмәт ишетергә теләнек. Әлбиттә, дөйөм ҡәберлектәге меңәрләгән һөйәктәр араһында Салауаттыҡын табыуы мөмкин булмаған эш. 2018 йылда Палдискиға иң аҙаҡҡы тапҡыр барғанда бер энтузиаст ҡатын оҙатып йөрөнө. Ул үҙе, шулай уҡ улдары Салауат менән ныҡ ҡыҙыҡһына икән. Бер тапҡыр ул ҡатындың Салауаттың портретын эшләүе хаҡында әйткәйнеләр. Ҡатын Салауат хаҡында шиғырҙар яҙған. Шуларҙы уҡып күрһәтте. Иң аҙаҡҡы көндә, беҙ ҡайтырға йыйынып бөткәс, ул: "Салауаттың ҡәберен беләм, әйҙә, алып барып күрһәтәм", - тине. Режиссерыбыҙ Таңсулпан Бураҡаева, операторыбыҙ менән тиҙ генә йыйынып киттек. Матур ғына ағаслыҡ араһындағы соҡор һымаҡ уйылған урынға алып килде танышыбыҙ һәм: "Бына ошонда Салауат та, атаһы ла күмелгән", - тине. Ҡатынға был турала ҡартатаһы һөйләгән, ә ҡартатаһына үҙ ҡартатаһы бәйән иткән. Әгәр ҙә археологтар менән барып был ҡәберлекте ҡаҙып ҡарағанда бер сенсация булыр ине лә бит...

Салауаттың, Почиталиндың, Ҡәнзәфәр Усаевтың ҡасан вафат булыуҙары теркәлгән, ә Юлайҙыҡы юҡ. Һәр хәлдә, ул Салауаттан алдараҡ үлгән. Ҡәнзәфәр Усаев Салауаттан һуң үлгән. Ул, мосолман булараҡ, моғайын, Салауатты атаһы янында ерләгәндер, тип уйлайым.

**Мирас ИҘЕЛБАЕВ,**
**яҙыусы, филология фәндәре докторы.**

ҺҮҘ АРАҺЫНДА...

# КИТАПТАРҘА...

## батырыбыҙ тураһында

**Салауат тураһындағы был әҫәрҙәрҙе, моғайын, күптәрегеҙ уҡығандыр. Уларҙан өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ. Улар, моғайын, был яҙмалар менән таныш булмағандарҙа ҡыҙыҡһыныу уятып, уларҙы китапханаларға юлланырға мәжбүр итер. Тарихыбыҙҙы, ундағы шәхестәрҙе белеү кәрәк.**

* * *

"...Салауат ҡапыл усаҡтан боролдо ла тимер һандалға яҡын килде, ундағы ауыр сүкеште алды һәм киҙәнеп, бөтә ауырлығы менән уға һуҡты. Тимер яңғырауығы халыҡ төркөмөн сайҡалдырҙы.Бөтәһенең дә күҙ ҡараштары Салауатҡа йүнәлде. Ҡоростоң ҡорosҡа һәлмәк ҡаҡлығыуы Салауаттың бөтә тәнен дерелдәтте лә уның бөтә кәрәкле фекерен бер төйөнгә туплаңы. Салауат күкрәк киреп тын алды, уның тауышы көслө һәм аңлайышлы яңғыраны:

- Рус халҡы, - тип тауышын күтәрмәй, ләкин ныҡ итеп әйтте ул,- беҙҙең батшабыҙ бер, иркебеҙ бер, ҡаныбыҙ бер... Бер генә сәғәт ваҡытты ла юғалтырға ярамай. Ҡара ҡоҙғон беҙҙең оябыҙға осоп килә...

Салауат кәрәкле һүҙҙәр эҙләгәндәй, башын түбән эйҙе лә ҡапыл буйһондороусы күтәренке тауыш менән:

- Әйҙә, бөтәгеҙ ҙә атланығыҙ аттарға! - тип өҫтәне.

Завод эшселәре Салауаттың йөрәгендә ни барлығын төшөндө..."

***Степан Злобиндың "Салауат Юлаев" әҫәренән.***

* * *

"... Эргәһенә килеп баҫҡан Салауатҡа һынаулы ҡарап, Пугачев баш сайҡап ҡуйҙы.

- Һиңә нисә йәш әле, бригадир?

- Яңыраҡ ҡына егерме тулды.

- Егерме?..

Император, тәү күргәндәй, көрәштәшенә тағы ла баштан-аяҡ күҙ йөрөттө Егерме йәш... Әй, балаҡай! Бындамы ни һинең урының? Улай тиһәң, үҙе лә тап ошондай сағында дәүерен Пруссия һуғышы яландарында үткәрҙе лә баһа. Унда Емелька ябай һуғышсы ине. Ни бойорһалар, шуны эшләй, ҡайҙа ҡушһалар, шунда йүгерҙе. Ә был башҡорт егете тотош ил халҡын үҙенә ҡаратып тота. Хәрби оҫталығы бар ғүмерен һуғышҡа арнаған Михельсон тәжрибәһенән кәм түгел. Емелька ул ваҡытта бары ҡарға балаһы ғына булған. Ә ул - ыласын. Ошо йәшендә! Берәй ун йылдан күрергә ине уны...

- Яңыраҡ тулды, тиһең, ә. Әйтер инең, билдәләгән булыр инек...

Салауат ирекһеҙҙән көлөмһөрәп ҡуйҙы.

- Үҙем дә онотҡанмын, император ғали йәнәптәре. Тыуған көндө хәтерҙә тоторлоҡмо? Уратып алған донъя күҙгә салынмай. Яңы ғына сатнама һыуыҡ ине. Әле һеҙгә килгәндә генә абайланым - йәйҙең иң матур сағы икән дә..."

***Филология фәндәре докторы, профессор, яҙыусы Мирас Иҙелбаевтың "Юлай улы Салауат" әҫәренән.***

* * *

"Башҡорт шағиры һәм көрәшсеһенең ҡеүәтле эшмәкәрлеген" иң ҡыҙыҡлы һәм ентекле итеп сағылдырған тикшеренеүҙәрҙең береһе Р.Г. Игнатьевтың "Башҡорт Салауат Юлаев. Пугачев бригадиры, йырсы һәм импровизатор" тигән һоҡланғыс хеҙмәте ул. Тарихи-әҙәби был тикшеренеү эше авторҙың Салауатҡа ҡарата тәрән ихтирамы һәм күңел йылылығы менән һуғарылған. Әгәр әҙип һәм крайҙы өйрәнеүсе М.В. Лоссиевский Салауатты "халыҡ батыры, Пугачевтың бригадиры һәм яратҡан яугиры " итеп һүрәтләһә, Игнатьев Салауаттың яҙмышын халыҡ ихтилалы менән тығыҙ бәйләнештә һүрәтләй һәм Салауаттың эшмәкәрлегенә юғары баһа бирә: "Бөйөк тарихи роле Салауатты халыҡ араһынан күтәрелгән халыҡ батыры яһаны һәм уны йыр һәм риүәйәттәр геройы итте", - тип яҙҙы ул.

***Инга ГВОЗДИКОВА, тарих фәндәре кандидаты, Салауаттың тормош һәм көрәш юлын өйрәнеүсе.***

* * *

"...Үрге Яйыҡ нығытмаһы коменданты, подполковник Ступишин Башҡортостан еренә килеп инде лә бер нисә буш ауылды яндырҙы, боласыларҙың береһен тотоп алып, уның ҡолағын, танауын, уң ҡулы бармаҡтарын ҡырҡып ебәрҙе лә, башҡа боласылар менән дә шулай эшләйәсәген белдереп янаны. Башҡорттар баҫылманы, 1741 йылғы язалауҙарҙан имен ҡалған баш күтәреүсе ологайған Юлай үҙенең улы Салауат менән тағы килеп сыҡты. Бөтөн Башҡортостан баш күтәрҙе һәм хәлдәр хәүефле көс менән тоҡана ғына барҙы. Фрейман Пугачевты эҙәрлекләргә тейеш ине; Михельсон уның юлын киҫергә маташты, ләкин юлһыҙлыҡ быға ирек бирмәне. Юлдар үтеп сыҡҡыһыҙ ине, йырғанаҡтар бер нисә саҡрымға йәйелеп, йылға булып аҡты; кешеләр тубыҡтан бысраҡҡа батты. Фрейман Стәрлетамаҡта туҡтаны. Михельсон 5 майҙа Сим заводы янында ажар Салауат етәкселегендәге башҡорттар төркөмөн тап итте һәм уларҙы ҡыуып ебәрҙе. Ләкин Салауат заводтан 18 саҡрымлап ерҙә Белобородовты көтөргә туҡталды...

...2 июндә Михельсондың капитан Карташевский етәкселек иткән һәм йомош менән ебәрелгән отрядын Салауаттың һуғышсылары ҡамауға алды..."

***А.С. Пушкиндың "Пугачев тарихы" әҫәренән.***

* * *

"...Салауатҡа йорт-ғаилә бәхете менән оҙаҡ ләззәтләнергә тура килмәне. Ғаилә, тәбиғәт һәм шиғриәт үҫмерҙең бөтөн асылын тулыландыра алманы. Килмешәктәр, тыуған илен уларҙан азат итеү уйы уға тынғылыҡ бирмәне, уны изге эштәргә, батырлыҡ ғәмәлдәренә саҡырҙы. Ватанды ҡотҡарырға! Донъялағы күп аҡылдарҙы биләүсе был уй-тойғола күпме матур ынтылыш бар, ләкин был оло маҡсатты атҡара алырлыҡ көрәшсе сәме фәҡәт күңеле менән шағир Салауатта ғына булғандыр, моғайын...

- Атай, мин тағы ла Аллаһ тауышын ишеттем,- тине Салауат атаһына бер көн улар икәүләп сәхрәгә сыҡҡанда. - Һуҙырға ярамай... Ваҡыт!"

***Ф.Д. Нефедовтың "Башҡорт батыры Салауат" тигән яҙмаһынан.***

✓ *Һабантуйҙы ата-бабаларыбыҙ беҙҙең дәүерҙәргә тиклем үк үткәргән. Александр Македонскийҙың яу юлын тасуирлаған Курций Руф яҙмаларына ҡарағанда, был байрам артыҡ үҙгәрмәйенсә бер нисә мең йыл үткәрелә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ХӘРӘКӘТЛӘН!

■ Гавайа университеты ғалимдары асыҡлауынса, стресты тирә-яҡтағы, мәҫәлән, бер өйҙә йәшәгән, бергә эшләгән кешеләрҙән йоҡторорға ла мөмкин. Бында һүҙ "пассив стресс" тураһында бара, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙар былдай "инфекцияға" бирешеп бара, сөнки улар күпкә тәьҫирлерәк. Табиптар фекеренсә, иң төп хәүефте ярһыған етәксе һәм ҡыҙып барған ир тыуҙыра. Уларҙың асыуланғанын күргән ҡатын-ҡыҙҙа шунда уҡ хәүеф һәм ҡурҡыу тойғоһо барлыҡҡа килә. Ошоно пассив стресс тип йөрөтәләр ҙә инде. Стресс булмаһын өсөн ваҡытында саралар күрергә тәҡдим итә белгестәр. Мәҫәлән, был осраҡта йога ныҡ ярҙам итә. Шулай уҡ Ҡытай халҡынан бер кәңәш: әгәр ҙә нервыларығыҙҙы тынысландырам, тиһәгеҙ, сәй ҡайнатығыҙ, сөнки бер үк ваҡытта сәй эсергә һәм борсолорға мөмкин түгел.

■ Изге Лаврентий университеты ғалимдары тикшеренеүҙәренә ярашлы, биш минут дауамында һағыҙ сәйнәү иғтибарҙы тупларға ярҙам итә. Тик һағыҙҙы ваҡытында сүп һауытына ташларға ла өйрәнергә кәрәклеген белдерә табиптар. Тәжрибәләр күрһәтеүенсә, мәҫәлән, имтихан мәлендә һағыҙ сәйнәү, киреһенсә, һөҙөмтәле эшләргә ҡамасаулай.

■ Көньяҡ Кореяның Ауыл хужалығы милли академияһы докторы Сан Ми Хан иҫәпләүенсә, бал ҡорто ағыуы тиренең һығылмалылығы өсөн кәрәкле коллаген бүленеп сығыуына булышлыҡ итә. Тиҙҙән был исул баҙарҙан ботоксты ҡыҫырыҡлаясаҡ, тип иҫәпләй белгестәр. Тирегә бал ағыуы нигеҙендә яһалған крем һөртҡәндә, кеше сәнсеү тоясаҡ. Был ваҡытта организм бал ҡорто сағыу тәьҫиренә дусар итеlә, һөҙөмтәлә, был урынға ҡан йүгерә, коллаген һәм эластин бүленеп сыға. Әйткәндәй, бал ҡортоноң ағыуын йыйыу өсөн ҡорттарҙы үлтерергә кәрәкмәй, бары тик уларҙан быяла-коллекторҙы саҡтырыу ҙа етә.

■ Бөгөн күптәр дарыуҙар урынына халыҡ дауаһы ҡулланырға тырыша. Вирусլы миҙгел ауырыуҙары әүҙемләшкән мәлдә миндаль сәтләүеге ҡулланыу яҡшы һөҙөмтә бирә. Быға тиклем миндаль йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен иҫкәртеү, холестерин кәмелен кәметеү өсөн ҡулланыла ине. Бының өсөн кардиологтар көнөнә яҡынса 90 грамм миндаль ашарға кәңәш итә. Күптән түгел Норича (Бөйөк Британия) һәм Мессин ҡалаһы университеты (Италия) ғалимдары был сәтләүектең иммун реакцияларын көсәйтеү һәм вирустарҙың әүҙемлеген кәметеү һәләтен билдәләгән. Сәтләүектең тиресәһендә булған матдәләр лейкоциттарҙың әүҙемлеген арттырып, вирустарҙың күҙәнәк эсенә үтеп инеүен тотҡарлай. Миндалдең организмға ыңғай тәьҫире ул тулыһынса эшкәртелеп бөткәс тә һаҡлана әле.

■ Һеҙ дөрөҫ туҡланһағыҙ һәм даими рәүештә спорт менән шөғөлләнһәгеҙ ҙә ултыраҡ тормош организмға кире тәьҫир итә, тип иҫәпләй Тель-Авив университеты ғалимдары. Бер үк позала ултырыу организмға май йыйылыуға килтерә. Әгәр ҙә кеше оҙаҡ хәрәкәтләнмәйенсә ултырһа, бер ниндәй диеталар ҙа ярҙам итмәйәсәк.

■ Иҡтисади хеҙмәттәшлек һәм үҫеш ойошмаһы иҫәпләп сығарыуынса, "яҡшы тормош индексы" буйынса иң юғары балды Австралия алған. Был ойошма илдәр рейтингында ғүмер оҙайлығы, килем, хәүефһеҙлек, эшһеҙлек дәүмәле һәм башҡа күрһәткестәрҙе иҫәпкә ала. Былярҙың барыһы ла кеше тормошонон сифатын барлыҡҡа килтерә. Австралияла уртаса ғүмер оҙайлығы 82 йәш тәшкил итә, 15-64 йәштәге граждандарҙың 72 проценты эшләй, эшһеҙлек (башҡа илдәр менән сағыштырғанда) 5 процент кимәлендә еткән. Аналитиктар раҫлауынса, "йәшел континент" донъя иҡтисади көрсөгөнән сығыусы илдәр араһында ла беренсе буласаҡ.

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

**Донъяла байрамһыҙ халыҡтар юҡтыр ул. Сәнғәте, фәне иң юғары бейеклектәргә күтәрелгән, йыһан киңлектәрен гиҙгән милләттәр ҙә, джунгли кеүек урман шырлыҡтарында берәү менән ҡатнашмай, үҙ донъяларында мәж килгән бәләкәй генә ҡәбиләләр ҙә, ниндәй ҙә булһа берәй ваҡиғаға арнап, байрамдар үткәрә. Күренекле урыҫ ғалимы М.Бахтин байрамдарҙы, мәҙәниәттең иң тәүге төрө, ти. Ҡайһы бер ғалимдар, кешелек таш быуат замандарында уҡ байрамдар үткәргән, тигән фекерҙә. Йәғни, кешелек мәҙәниәте формалаша башлаған саҡтарҙа байрамдар ҙа формалаша башлаған, тиергә була. Борон-борондан байрамдарҙы календарҙағы ниндәй ҙә булһа берәй ваҡиғаға бәйләп, уларға арнап үткәрер булғандар. Был ваҡиғаларға ҡышҡы һыуыҡтар (селлә) бөтөп, йылы көндәр килеүе, сәсеүгә төшөү йәки сәсеү эштәренең тамамланыуы, көҙөн уңыш йыйып алыу, ҡышҡы һуғымдар башланыу кеүек ваҡиғаларҙы индерергә була.**

# БАШҠОРТ ҺАБАНТУЙЫ



Башҡорттар ҙа бик борондан үҙҙәренең тормош-көнкүрешенә, тәбиғәтенә яраҡлаштырылған байрамдар үткәрер булған. Былдай байрамдарға - ҡарғатуй (ҡарға бутҡаһы), кәкүк сәйе, наурыз, нардуған, һуғым кеүектәрҙе индерергә була. Ошондай әреле-ваҡлы байрамдарыбыҙ араһында иң көтөп алынғаны, төрлө мауыҡтырғыс тамашаларының күплеге, бай йөкмәткеһе менән айырылып торған байрам - ул **һабантуйҙыр.** Хәҙерге ваҡытта һабантуй башҡорттоң ғына милли байрамы булыу сиктәренән сығып, Башҡортостан Республикаһында йәшәгән бөтә халыҡтарҙың да уртаҡ һәм яратҡан бер байрамына әүерелде. Быға тик ҡыуанырға ғына ҡала.

Мин үҙем башҡорт мифологияһын, ғөмүмән, халҡыбыҙҙың Исламға тиклемге боронғо рухи донъяһын өйрәнәм. Һәм һабантуйҙы байрам итеү үҙенең килеп сығышы менән шул бик боронғо дәүерҙәргә бәйле, унда үткәрелгән төрлө йолалар халыҡтың донъяуи ҡараштарынан сығып аңлатыла, тип уйлайым.

Башҡорт һабантуйы тураһында фәндә иң тәүге мәғлүмәттәрҙе XVIII быуаттың урыҫ ғалимдары Георги, Лепехиндың хеҙмәттәренән табырға була. Мәҫәлән, Георги башҡорт һабантуйының эстәлеген тасуирлап яҙғандан һуң, сирмештәрҙә лә (хәҙерге мари халҡында - **З.Ә.**) һабантуйға оҡшаш байрам барлығын билдәләп киткән. Георгиҙың яҙмаларынан күренеүенсә, шул заман һабантуйының тамашалары һәм эстәлеге хәҙерге заман һабантуйы менән, дөйөм алғанда, тап килә, тип әйтергә була. Башҡорттарҙың һабантуй тигән байрамын урыҫ ғалимдары XIX быуатта ла яҡшылап яҙып ҡалдырғандар. Ғалимдар, журналистар, сәйәхәтселәр XX быуат башында ла, башҡорттарҙың яҙғыһын һабантуй тигән байрамдары бар, тип, унда үткәрелгән төрлө ҡыҙыҡ сараларҙы ярайһы ғына тулы яҙып ҡалдырғандар.

Һабантуй, ғөмүмән, күп кенә төрки халыҡтарында бар. Мәҫәлән, башҡорт менән татарҙан тыш, элегерәк уны нуғайҙар, ҡумыҡтар, ҡарасай-балҡарҙар ҙа байрам иткән. Эстәлеге лә, ҡайһы бер айырымлыҡтарҙы иҫәпкә алмағанда, был халыҡтарҙың бөтөнөһөндә лә яҡынса тап килә, тип әйтергә була. Һабантуйҙы Себерҙә йәшәгән төрлө әреле-ваҡлы төрки телле халыҡтарҙың милли байрамдары менән сағыштырып тикшереү был милли байрамыбыҙҙың тамыры бик боронғо дәүерҙәрҙә һәм дөйөм бер тамырҙан икәнлеген күрһәтә. Мәҫәлән, яҡуттарҙа - "ысыах", хакастарҙа - "тон пайрам", тываларҙа - "шагаа", алтайҙарҙа "сага-байрам" кеүектәр шундай уртаҡ тамырлы байрамдарҙандыр.

Тарихтың тағын да тәрәнерәк осорҙарына күҙ һалһаҡ, боронғо һунндарҙың да беҙҙең һабантуй кеүегерәк байрам үткәреүе тураһында Ҡытай яҙмаларында мәғлүмәттәр һаҡланған. Унан алдараҡ дәүерҙәрҙә шундай уҡ байрамды Урта Азияла йәшәгән сактарҙың (скифтарҙың) үткәреүе тураһында боронғо гректар яҙып ҡалдырған. Көнсығыш иран телдәрендә һөйләшкән был ҡәбиләләрҙе фарсылар "сак" тип атаһа, гректар уларҙы "скиф" тип атағандар. Көнсығыш иран телдәренең береһендә һөйләшкән сактарҙың сарматтар, аландар кеүек үк, башҡортто формалаштырыуҙа ҡатнашыуы фәндә иҫбат ителгән бер факт булып, хәҙер быға берәү ҙә шик белдермәй. Тимәк, милли байрамыбыҙ - һабантуйҙы ата-бабаларыбыҙ беҙҙең дәүерҙәргә тиклем үк үткәргән. Һәр хәлдә, Александр Македонскийҙың яу юлын тасуирлаған Курций Руф яҙмаларында һаҡланып, беҙгә килеп етә алған мәғлүмәтләргә ҡарағанда, был байрам артыҡ үҙгәрмәйенсә инде бына бер нисә мең йыл үткәрелә, тип әйтә алабыҙ.

Был байрам Ислам диненә ҡәҙәр үк, донъяла мифологик аң хөкөм һөргән дәүерҙә формалашҡанға күрә, уның эстәлеген дә башҡорт мифологияһынан сығып аңлатырға кәрәк. Шуныһы, беҙ һабантуйҙың эстәлеген тулыһынса аңлауға өлгәшә алмаҫбыҙ. Мине һабантуйҙың эстәлеге күптән, студент йылдарынан уҡ ҡыҙыҡһындыра башлағайны. Ошо ҡыҙыҡһыныуым эҙләнергә, соҡсонорға мәжбүр итеп торҙо, һәм, ниһайәт, байрамдың семантикаһын аса алдым кеүек. Уларҙы уҡыусыға тәҡдим итергә булдым.

Хәҙерге һабантуйҙар яҙғы сәсеү эштәре үткәс, ошо эштәргә йомғаҡ яһау кеүегерәк үткәрелә. Элек иһә, башҡорттар һабантуйҙы ҡар иреп, тау биттәрендә йәшел үлән ҡалҡып, ағастарҙа бөрөләр тулыша башлағас үткәрер булған. Был байрам башҡорттоң боронғо календарь байрамы булараҡ, тәбиғәттең терелеүен, тормоштоң яңырыуын һынландырған тамашаларҙан торған. Яҙ көндәре, тәбиғәт ҡышҡы йоҡонан уянып, донъя һәм кеше тормошо яңырған саҡта, донъялағы күп халыҡтар һабантуйҙы байрам иткән һәм уны әле лә байрам итәләр.

Һабантуйҙағы тамашаларҙан - ат сабышы (бәйге), йүгереү, көрәш, бейек текә бағана башына (һырғауылға) үрмәләү, көршәк ватыу, бер аяҡ башы ергә ҡыялатып ҡаҙып ултыртылған, икенсе башына аҡ тәкә бәйләнгән сайҡалып торған бүрәнә аша үтеп, шул тәкә-бүләкте алыу, ике аяҡты ла тоҡҡа тығып, бер-береһен уҙаҙа йүгерергә маташыу кеүек тамашалар башҡорт һабантуйының мотлаҡ үткәрелергә тейешле ритуалдары. Борон замандарҙа был тамашаларҙың һәр береһенең башҡорт өсөн эстәлеге, мәғәнәһе (семантикаһы) аңлайышлы булған. Уларҙың тейешле итеп, тулы үтәлеше башҡорт донъяһының именлегенә йоғонто яһай, шуны тәьмин итә, тип ышанған боронғолар. Сөнки боронғо башҡорттоң уйлауынса, шулай уҡ башҡорттоң мифологик, этнографик, фольклор материалдарынан күренеүенсә, һабантуйҙа үткәрелгән тамашаларҙы донъя (Йыһан) яралған саҡта уларҙың иң боронғо ата-бабаһы Урал батыр башҡарған. Урал батыр өсөн улар тамаша ғына түгел, ә бөтә донъяны хаостан (дейеү, аждаһаларҙан) азат итеп, донъяны әҙәм балаһы һәм бүтән тере йәндәр имен-аман йәшәрлек хәлгә килтереү кеүек кеше атҡарып сыға алмаҫлыҡ ауыр эш булған. Йәғни, хәҙерге заман театр теле менән әйткәндә, Урал батыр эпосы сценарий булһа, һабантуй иһә ошо сценарийға ҡоролған тамаша була. Бының шулай

***✔ Һабантуйҙағы бейек, шыма һырғауыл ана шул донъя үҙәгендә үҫеүсе Донъя ағасының символылыр. Борон был бейек бағанаға менеүҙе күккә олғашып, унда Тәңренең үҙе менән күрешеп, унан бүләк алып төшөүгә тиңләгәндәр.***



икәненә башҡорт халыҡ ижадынан әллә күпме миҫалдар килтерергә була.

Халыҡ иң көтөп алған, мауыҡтырғыс тамаша, моғайын да, ат сабышы бәйгеһелер. Ярышҡа ебәрелгән аттар бәйгелә түңәрәк буйлап сабышырға тейеш. Был ҡағиҙәнең дә үҙ мәғәнәһе бар. Боронғо башҡорттарҙың донъяуи ҡараштары буйынса, аттар ҡояш менән бәйле. Кем "Урал батыр" эпосын уҡыған, хәтерләйҙер, унда иң шәп ат (Аҡбуҙат) ҡояштың аты, тиелә. Билдәле булыуынса, борон кешеләр ҡояш ерҙе уратып сыға, тип аңлағандар. Дөрөҫөндә, Ер Ҡояш тирәләй әйләнеүен хәҙер бөтәһе лә белә. Әммә был белемдең нығыныуына бер нисә генә йөҙ йыл. Ошо ҡараштар нығынғанға тиклем боронғо кешеләр Ҡояш Ерҙе уратып йөрөй тип уйлаған. Ошо Ҡояштың Ерҙе уратып сығыуын һабантуйҙағы бәйгелә ат сабышы аша аңлатҡандар, күрһәткәндәр. Шулайтып түңәрәкләтеп сабып үткән аттар башҡорт ерен уратып, яуыз көстәр үтмәҫлек итеп ҡымтып, ҡоршап ҡуялар, тип аңлағандар һәм шуның өсөн дә ат сабышы үткәрелгән. "Урал батыр" эпосында Уралдың сәйәхәте лә донъяның дүрт тарафын да урап үтеп, башҡорт донъяһын нығытыу, тип аңлағандар. Сөнки башҡорт донъяһын Урал батыр яһаған һәм әҙәми заттар шатлыҡта матур йәшәһен өсөн дейеү-аждаһа кеүек яуыз заттарҙан азат иткән.

Боронғо замандарҙа һабантуйҙағы ике батырҙың көрәшен аҡ, саф, изге көстәрҙең яуыз ҡара көстәргә ҡаршы көрәше тип аңлағандар. Урал батыр эпосында Урал Ҡатил батша иленә барып сыҡҡас, был илдә үгеҙ менән көрәшеп, уны еңә һәм бөтә ҡара, яуыз көстәрҙе юҡ итә. Батырҙарҙың үгеҙ менән көрәше тураһында башҡорт халыҡ әкиәттәрендә лә телгә алына. Үгеҙ менән көрәш, гөмүмән, төрки халыҡтарҙың бик борондан килгән йолаһы булған. Был турала ғалимдар күптән инде әллә күпме хеҙмәттәр яҙып сыҡты. Әлеге үгеҙ менән көрәш йолаһында үгеҙ ҡышты һынландырған, сөнки ул боронғо ата-бабаларыбыҙҙың мифологик ҡараштары буйынса, ҡыш теге донъяның символы булған. Шуға күрә Урал батырҙың үгеҙ менән көрәшен һәм был көрәштә еңеүен яҙҙың ҡышты еңеүе тип аңларға кәрәк.

Борон шулай уҡ һабантуйҙа тоҡ кейеп йүгереү ярышының да үҙ мәғәнәһе булған. Хәҙер был бер ҡыҙыҡ һәм дә мәҙәк тамаша булараҡ ҡабул ителә. Башҡорт этнографияһында ярымтыҡ, шүрәле тигән әҙәм балаһына зыян килтерергә маташыусы мифологик заттар тураһында бихисап легендалар, риүәйәттәр һаҡланған. Боронғо башҡорттарҙың ышаныуҙары буйынса, ана шул ярымтыҡ тигәненең күҙе лә, аяғы ла тик берәр генә, йәғни һыңар булған. Улар төндә атта йөрөргә яратҡандар, тип тә әйтелә фольклорҙа. Зәғифлек, боронғоларҙың уйлауынса, теге донъя менән бәйләнеште аңлатыусы бер символ. Теге донъя иһә, мифологик ҡараштар буйынса, ҡыш менән дә бәйле. Башҡорт ҡобайырҙарында "Ҡара ерҙең үлгәне - ҡар аҫтында ҡалғаны", тигән юлдарҙан ҡарҙың, ҡыштың үлем менән бәйле булыуын төшөнәбеҙ. Фәнни мәғлүмәттәрҙән ҡыш менән үлемдең борон синоним булараҡ йөрөүен беҙ бер башҡортта ғына түгел, һинд-иран телле һәм бүтән халыҡтарҙа ла күрәбеҙ.

Башҡорттарҙың боронғо инаныуҙары буйынса, теге донъяла ожмахҡа юлда сират күпере аша үтергә кәрәк. Был күпер аша үҙ ғүмерҙәрендә тик яҡшылыҡ, изгелек ҡылған кешеләрҙе аҡ тәкә үткәреп ебәрә, имеш. Беҙҙә әле лә, бик ныҡ өлкәнәйеп, йәшәргә күп ҡалмаған кеше тураһында кинәйәләп "Аяғына аҡ тәкә бәйләнгән инде", тигәнде ишетергә була. Был һүҙҙәрҙең мәғәнәһен, теге донъяла сират күпере аша үтергә күп ҡалмаған, тип аңларға кәрәк. Һабантуйҙа ҡыялатып ергә ҡаҙып ултыртылған, сайҡалып торған бағана аша үтеп, осона бәйләнгән тәкәне призға алыуҙы ана шул сират күпере аша уҙып, ожмахҡа эләгеүҙең символик бер һынландырылышы, тиеберәк аңларға була. Теге донъяла ниндәйҙер бер күпер аша үтеү тураһындағы инаныстар бик күп халыҡтарҙа бар.

Һабантуйҙың тағын бер мәҙәге - күҙҙәрҙе бәйләп көршәк ватырға маташыуҙы ла башҡорт мифологияһынан аңлатырға була. Этнографтарҙың материалдарынан күренеүенсә, яңы ваҡыт башланған мәлдә иҫке әйберҙәрҙән ҡотолоу, уларҙы ватыу, онтау йолаһы бик күп халыҡтарҙа бар. Күп кенә халыҡтарҙа, мәҫәлән, Европа халыҡтарында, шулай уҡ Урта Азияла йәшәгән тажик, үзбәктәрҙә яңы йыл башланыуҙы аңлатҡан Науруз байрамында был йола байрам шаярыуы булараҡ әле булһа үтәлеп килә. Был йоланың мәғәнәһе - иҫкене ватып, яңыға юл ярыу, сөнки, иҫке китмәй тороп, яңыға юл бикле. Башҡортта әле лә "Берәү үлмәй, берәү көн күрмәй" тигән әйтем йәшәп килә. Быны̄ң мәғәнәһе - кемдер берәү үлеп, теге донъяға күсеп, урын бушатмай тороп, яңы тыуырға тейеш икенсе берәүгә урын юҡтыр.

Боронғо төркиҙәрҙең, шул иҫәптән, башҡорттарҙың мифологик ҡараштары буйынса, Тәңре йәшен уғы менән атып, табаҡтай күкте яра һәм шунан ғына йомортҡа ярылып, яңы йән эйәһе донъяға тыуған кеүек, донъя ярала. Был мотив башҡорт фольклорында бик яҡшы һаҡланған. Мәҫәлән, Буҙансы батыр, Ҡараса батыр, Етегән батыр әкиәттәрендә һәм башҡаларҙа Йүгерәк батыр йүгереү ярышында йоҡлап китә һәм уны уятыу өсөн батырҙың дуҫы уҡ менән Йүгеректең башына кейҙерелгән сүлмәкте (ҡаҙанды) яра ата. Шунан һуң Йүгерәк батыр уяна һәм хәҙерге тел менән әйткәндә, финишҡа беренсе булып килеп етә. Бында уҡ атыу шул уҡ йәшен символы булһа, ә йоҡлап уяныуҙы үлеп һәм яңынан терелеү, яңынан йәшәй башлау, тип аңларға кәрәк. Ошоларҙан сығып, һабантуйҙағы көршәк ватыуҙы ла Тәңренең донъяны барлыҡҡа килтергән мәлдә уҡ атып, ер-яны донъяны барлыҡҡа килтереүенең символик һынланышы, тип аңларға була.

Һабантуйҙа бейек бағана (һырғауыл, һырғый тип тә әйтәләр - **З.Ә.**) башына менеп бүләк алып төшөүгә лә башҡорт мифологияһынан аңлатыу табырға була. Боронғо ата-бабаларыбыҙҙың донъяуи ҡараштары буйынса, донъяның үҙәгендә Донъя тирәге (Донъя ағасы) үҫә, имеш. Был ағас яҡты донъяны аҫҡы һәм юғарылағы (күк) донъяларға тоташтырып тора. Ағастың тамыры - аҫҡы донъя, ә башы юғарылағы күк донъяһы менән тоташтырып тора. Был ағастың тамырына бик ҙур бер йылан ояланған, ә иң үрге осонда Сәмреғош оя ҡорған. Хәтерегеҙҙәлер, Аҡъял батыр әкиәтендә батыр егет Сәмреғоштың балаларын бағыу йыландан ҡотҡарғас, Сәмреғош батырҙы аҫҡы донъянан яҡты донъяға алып сыға. Һабантуйҙағы бейек, шыма һырғауыл ана шул донъя үҙәгендә үҫеүсе Донъя ағасының символылыр. Борон был бейек бағанаға (һырғауылға, һырғыйға) менеүҙе күккә олғашып, унда Тәңренең үҙе менән күрешеп, унан бүләк алып төшөүгә тиңләгәндәр. Бындайыраҡ йолалар донъялағы күп кенә халыҡтарҙың мифологик ҡараштарында булған һәм әле лә күптәрендә һаҡлана.

Һабантуйҙа йола буйынса үтәлгән һәр тамашаның бик тә тәрән йөкмәткеһе бар һәм улар боронғо замандарҙа ниндәй ҙә булһа мәғәнә менән башҡарылған. Был боронғо байрамыбыҙҙың төп мәғәнәһе - донъялар имен, тәртиптә һәм иплә торһон тигән теләктәр. Тик ваҡыт үтеү менән уларҙың мәғәнәләре онотолоп бөткән, башҡорттар Ислам диненә күсеп, һабантуйҙың төп мифологик нигеҙҙәрен һәм уны үткәреүҙең сәбәптәрен дә иҫтән сығарып, был байрамды матур һәм мауыҡтырғыс бер тамаша, тип кенә ҡарай башлаған.

Әммә башҡорт фольклоры һәм этнографияһында һаҡланып ҡалған материалдарҙан сығып, һабантуйҙы халҡыбыҙҙың иң борондан килгән төп бер байрамы тип әйтә алабыҙ. Был байрамды боронғо ваҡыттарҙа башҡорттоң ата-бабалары булған сак, сармат, аландар, һунндар ҙа үткәрер булған. Тимәк, беҙ, башҡорттар, был байрамды кемдәндер үҙләштермәгәнбеҙ, әле һанап киткән халыҡтарҙың туранан-тура вариҫтары булараҡ, боронғо ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған иң боронғо үҙ байрамыбыҙ, тип әйтергә тулы хаҡыбыҙ бар.

Үҙған быуаттың һикһәненсе йылдары аҙағындараҡ мин "башҡорт - скиф бәйләнештәре тураһындағы" бер нисә мәҡәлә баҫтырғайным. Ошо мәҡәләләрҙе билдәле башҡорт этнографы, башҡорттарҙың килеп сығышын, формалашыуын иң төплө итеп өйрәнгән профессор Р.Ғ. Кузеев уҡыған булып сыҡты һәм бер осрашҡанда икәүләшеп оҙаҡ ҡына һөйләшеп, фекер алышып ултырҙыҡ. Ошо һөйләшеп ултырғанда, Р.Ғ. Кузеев башҡорт тамғалары тураһында күп һәм ҡыҙыҡ ҡына күҙәтеүҙәре менән бүлеште һәм шунда уның "башҡорттарҙың тарихи хәтере шундай ныҡ, унда бер нәмә лә юғалмай, онотолмай", тигәнен әле булһа онотмайым.

Һуңғараҡ фән менән ныҡлап шөғөлләнеп, Тарих тел һәм әҙәбиәт институтына эшкә килгәс, унда билдәле совет археологы (хәҙер инде мәрхүм) Р.Б. Исмәғилов менән дуҫлашып киттек һәм бер һөйләшеп ултырғанда ул минән: "Башҡорттоң тарихи хәтеренең ныҡлығы нимәлә икән? Уйланғаның бармы шул турала?" - тип һораны. Шул темаға йыш ҡына һөйләшеп, фекерҙәребеҙ менән уртаҡлаша инек. Был һорауға яуапты заманында икенсе бер билдәле совет археологы С.А. Плетнева бик матур һәм дәлилле итеп биргәйне. Был археолог башҡорт мәҙәниәтенең юғары кимәлен, уның өҙөлмәйенсә бер туҡтауһыҙ тоторо̄ҡло үҫешен бик борон Уралда формалашып, аҙаҡ бынан бер ҡайҙа ла китмәйенсә, теше-тырнағы менән ошо ергә йәбешеп йәшәүе менән генә аңлатырға була, тигәйне.

Бынан да матурыраҡ әйтеп булмайҙыр. Боронғо башҡорт байрамы һабантуй ҙа шул халыҡ хәтеренең ныҡлығына, тарих сылбырының өҙөлмәйенсә бер туҡтауһыҙ үҫеүенә бер тос миҫал тиергә була. Әле республика етәкселеге тарафынан районларҙа һабантуйҙар үткәреү графигы билдәләнде. Ошо айҡанлы бөтәгеҙҙе лә һабантуй байрамы менән ҡотлағы килә. Халҡыбыҙҙың тарихи хәтере артабан да ныҡ булһын, быуындарҙы бәйләгән сылбыр ҙа шулай уҡ ныҡ булһын, бер ҡасан өҙөлмәһен, тип теләйем. Ә был сылбырҙың ныҡлығы беҙҙең бөтәбеҙҙән тора. Тарихыбыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлайыҡ.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**этнограф.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Асаналар һәм йога позалары

"Йога" һүҙе "берләшеү" тигәнде аңлата. Илаһи башланғыс менән берләшеү.

Позалар, тын алыу күнекмәләре һәм иғтибар туплау - йоганың төп аспекттары. Асаналар (йога позалары) һығылмалылыҡты үҫтереү күнекмәләре генә түгел, уларҙың асылы тәрәндәрәк.

Физик һығылмалылыҡты үҫтереү, әлбиттә, бик файҙалы, әммә йоганың төп маҡсаты ул түгел. Уның төп маҡсаты - уйҙарҙы тупларға өйрәтеү һәм тулыһынса тәнегеҙҙе контролдә тотоу, энергия әйләнешен яҡшыртыу аша астраль тәнде таҙартыу. Һәр асана тәндең айырым өлөшөн таҙартыуға тәғәйенләнгән. Ҡайһы бер позалар тылсымлы үҙенсәлеккә эйә. Йога тураһында бик күп китап яҙылған. Уның менән даими шөғөлләнеү ҙур файҙа килтереүе мөмкин. Тик йога күнекмәләре квалификациялы остаз күҙәтеүендә үтергә тейеш.

## Ә бәхет?..

Бар нәмә ҡапма-ҡаршылыҡтар берлеге принцибы һөҙөмтәһендә йәшәгән Ғаләмебеҙҙе, сағыштырма донъя тип атап, мин рәхәтлек-ауыртыныу пары тураһында ла әйтеп киттем һәм бәхеттең ошо парлылыҡтан тыш булыуын белдерҙем.

Үкенескә күрә, ерҙә бәхет табыу - балалар баҡсаһында тыныслыҡ табыу кеүек үк. "Улайһа, - тиерһегеҙ, - нимә өсөн йәшәргә?" Минең яуабым: "Ҡәнәғәтлек өсөн", йәғни был сағыштырма донъя беҙгә тәҡдим иткән бар нәмәне лә үҙеңдә һынап ҡарар өсөн".

Ҡасандыр балаларыбыҙға ла үлем киләсәген белә тороп, ашарға, эсергә, бейергә йәиһә атаәсә булырға кәрәкме? Кәрәк, сөнки беҙгә мажаралар оҡшай. Беҙ өйрәнеү, ижад итеү, уйнау өсөн тыуабыҙ.

Кире осраҡта барыһын да булдырырға һәм белергә тырышыу ауырлыҡ булып тойоласаҡ. Хатта ожмахта йәшәү ҙә күңелһеҙ булып китә. Бына ни өсөн үҙеңә яңы мажаралар табырға кәрәк.

## Барыһы ла сер менән ҡапланған…

Ни өсөн беҙ бөтә нәмәне аҙағынаса аңларға тырышабыҙ? Ни өсөн китаптың беренсе битен уҡыу менән уның артҡы битендә нимә яҙылғанын белгебеҙ килә? Бәлки, ҡағиҙә буйынса уйнап, теләктәребеҙ юлынан эҙмә-эҙлекле барырға кәрәктер?

Пьеса һәм унда уйнаған актерҙарҙан тыш бер ниндәй ҡорбандар, ысынбарлыҡтағы проблемала булмаясағын белеп, сценарий буйынса йәшәгеҙ. Был идея һеҙҙе аптыратамы? Моғайын, быны̄ң сәбәбе - үҙегеҙҙе шул тиклем алмаштырғыһыҙ тип уйлауығыҙҙалыр.

Тағы бер тапҡыр ҡабатлайым: беҙ, ғәмәлдә, үле. Был процесты төрлө хәүеф, ҡурҡыу менән тиҙләтеү өсөн бер ниндәй ҙә сәбәп юҡ. Ысын Минегеҙҙә уйламағанда килеп тыуған теләктәргә буйһоноғоҙ һәм уйын ҡасан да булһа үҙе тамамланыр. Ниндәйҙер бер матур көндә ниндәйҙер икенсе нәмәне башҡарып ҡарағыҙ, икенсе тойғо кисергегеҙ килер. Шул көндөң етеүен аңларһығыҙ һәм, кемдер һеҙгә тиклем эшләгән кеүек, арҡағыҙға биштәр аҫып, һеҙҙе был утрауҙан алып киткән юлды эҙләп, аңығыҙ сөңгөләнә сумырһығыҙ.

Әлегә ашығырға кәрәкмәй. Алда һеҙҙе мәңгелек көтә.

**Пьер МОРАНСИ.**

✓ Уны көсөргәнешле алыш барған урындарға алып баралар, һәр урында 175 тапҡыр ҡамсы менән һуҡтырылғандан һуң, танау япраҡтарын йырталар, маңлайына һәм яңаҡтарына "З", "Б", "И" тамғалары баҫыла.



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# САЛАУАТТЫҢ ТЫУЫУЫНА - 270 ЙЫЛ

**"Салауат нисә йәшендә,
Йәшел ҡамсат бүрке башында.
Булғадир булған, ай, Салауат,
Егерме лә ике йәшендә", тип йырлана башҡорт халыҡ йырҙарында милли геройыбыҙ Салауат Юлаев тураһында. Уның тураһында хәбәрҙәр булмағандар юҡтыр гәзит уҡыусыларыбыҙ араһында. Шулай ҙа хәтерҙәрҙе яңыртып, Салауат батырға ҡағылышлы бер нисә мәғлүмәтте теркәп үтәйек:**

• 1754 йылдың 16 июнендә Ырымбур губернаһы Өфө провинцияһы Себер даруғаһы Шайтан-Көҙәй улусының (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Салауат районы) Тәкәй ауылында тыуған.

• Халыҡтың ауыҙ-тел ижадында Салауат 14 йәшендә айыу алыуы тураһында риүәйәттәр һәм йырҙар һаҡланған.

• Салауат Ҡөрьән-хафиз булған, шиғырҙар ижад иткән.

• 1773 йылдың 10 ноябрендә Емельян Пугачев етәкселегендәге ихтилалға бер төркөм башҡорт яугирҙары менән Салауат Юлаев килеп ҡушыла.

• Салауат Юлаев 1774 йылдың 25 ноябрендә генерал-майор Ф. Ю. Фрейман командаһы тарафынан ҡулға алына.

• Сенаттың Йәшерен экспедицияһы һәм Ырымбур губернаторы И. А. Рейнсдорптың тикшереү, һорау алыу, язалау, хөкөм итеү эштәре Өфөлә, Ҡазанда, Мәскәүҙә 339 көн дауамында алып барыла. Уны көсөргәнешле алыш барған урындарға алып баралар, һәр урында 175 тапҡыр ҡамсы менән һуҡтырылғандан һуң, танау япраҡтарын йырталар, маңлайына һәм яңаҡтарына "З" ("злодей" - "енәйәтсе"), "Б" ("бунтовщик" - "боласы"), "И" ("изменник" - "хыянатсы") тамғалары баҫыла.

• Салауат Юлаевтың 5 шиғырын тәүге тапҡыр рус телендә Ф.Д. Нефёдов "Салауат, башҡорт батыры" (1880) тигән очеркында баҫтырып сығара. Шағирҙың тағы ла 7 шиғыры Р.Г. Игнатьевтың "Башҡорттарҙың Пугачёв ихтилалы алдынан хәрәкәте; Башҡорт Салауат Юлаев, Пугачёв бригадиры, йырсы һәм импровизатор" (1893) исемле хеҙмәтендә донъя күрә.

• 1941 йылда Мәскәүҙә Степан Злобиндың "Салауат Юлаев" тарихи романы нәшер ителә. Ошо уҡ йылда режиссёр Яков Протазанов төшөргән "Салауат Юлаев" фильмы ил экрандарына сыға.

• Никарагуа социалистик партияһы ағзаһы Лопес Аугусто ил президенты диктатураһына ҡаршы хәрәкәттә "Салауат Юлаев" ҡушаматын йөрөтә.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**22-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡараҡ. Салауат. Ҡабыҡ. Шәреҡ. Алдыҡ. Йәм. Туғыҙ. Ғафури. Роу. Лут. Башаҡ. Арҡа. Етен. Бөгөл. НЛО. Сари. Таянсыҡ. Чабан. Рәхимов. Тәһәрәт.

**Вертикаль буйынса:** Шаляпин. Шайморатов. Монумент. Сүре. Арарат. Ҡарға. Ҡалаҡ. Ленин. Сәхифә. Баҫыу. Ташсы. Аҡ. До. Ҡабыҡ. Ант. Бабич. Урҙа. Ыҙма. Ҡыҙ. Ҡолон.

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**18 июнь "Әҙәнем, бәгерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 12+
**19 июнь "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 16+
**20 июнь "Килен"** (З. Мусина), драма. 16+
**21 июнь "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова). 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**17 июнь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 11.00 0+
**"Пеппи Длинный чулок"** (А. Линдгрен), әкиәт. 10.30 0+
**18 июнь "Сказание о семи батырах"** (Д. Йосопов), фэнтези. 10.30 6+
**20 июнь "Удивительное путешествие кролика Эдварда"** (К. ДиКамилло), әкиәт. 10.30 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**19 июнь "Путешествие в театр кукол"**, экскурсия, уйын бүлмәһе менән **"Һабантуй"** (В. Аношкин), спектакле. 11.00 6+
**21 июнь Премьера! "Удивительное путешествие во времени"** (В. Щербакова), иммерсивный спектакль. 19.00 12+
**22 июнь Премьера! "Удивительное путешествие во времени"** (В. Щербакова), иммерсивный спектакль. 18.00 12+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**21 июнь Премьера! "Музыка для духовых"** концерт. 6+
**24-28 июнь** "Нитья" театры **"Мин бәхет"** циклы спектаклдәрен тәҡдим итә. 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**17-18 июнь "Легенда о воине дракона"** (Р. Ғәйнуллин), әкиәт. 11.00 0+
**19 июнь "Сказка о рыбаке и рыбке"** (С. Пушкин, Л. Ниғмәтуллина инсц.), әкиәт. 11.00 0+
**20 июнь "Безопасные каникулы"** (Л. Ниғмәтуллина). 11.00 0+
**21 июнь Премьера! "Маугли. Книга джунглей"** (Р. Киплинг, Р. Ғәйнуллин инсц.), әкиәт. 11.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**18-19 июнь Премьера! "Беҙҙең байлыҡ"** (А. Сәсәнбаев), комедия. 12+

### БР Милли музейы

**18 июнь "Древний воин Урала"**, сара. 14.00 6+
**19 июнь "Бал ҡортонда ҡунаҡта"**, сара. 10.30 6+
**"40 лет в поисках удивительного"** А. Нурмөхәмәтовтың фотокүргәҙмәһен асыу. 15.00 6+
**21 июнь "Һуғыш геройҙары: тарих буйынса мәсьәләләр"** дәрес. 12.00 12+

СПОРТ

## БЕҘҘЕКЕЛӘР БУЛДЫРА!

Башҡортостан спортсылары йөҙ шаҡмаҡлы шашка уйындары буйынса ил чемпиондары исемен яуланы. Шашка турниры Мәскәү өлкәһендә үтте. Башҡортостандың йыйылма командаһында - Өфөнән, Ишембайҙан, Стәрлетамаҡтан 13 спортсы. Улар - Александр Георгиев, Муродулло Амриллаев, Айгөл Иҙрисова өс алтын, бер көмөш һәм дүрт бронза миҙал яуланы.

АТЫҢ КЕМ?



# БИРЕШМӘҪКӘ!

**ҺОРАУ: "Салауат исемен йөрөтөү ниндәйҙер яуаплылыҡ өҫтәйме?"**

***Салауат ВӘЛИЕВ, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры актеры:*** Сығышым менән мин Салауат районы Лағыр ауылынанмын. Батырҙың тыуған районында уның аҙаштары күп тип әйтә алмайым, әммә тормош юлымда улар йыш ҡына осрап тора, туғандарым араһында булмаһалар ҙа, Салауат исемле дуҫтарым күп. Салауат ерендә тыуғас, Салауат исемен йөрөткәс,уның исеменә тап төшөрмәҫкә тырышам, исемем менән ғорурланам. Ул исем минә көс, рух өҫтәй. Тыуған яҡтарға ҡайтҡан һайын Салауат Юлаев музейында булырға тырышам.

Өфө дәүләт сәнғәт институтында уҡыған саҡтан алып, әлеге көнгә тиклем, әлбиттә, Салауат ролен уйнарға хыялланам. Әлегә ниәтем өлөшләтә генә тормошҡа ашты, Салауат ролен бер спектаклдәге өҙөктә генә уйнарға яҙҙы.

Салауат исемен йөрөткәндәргә әйтер һүҙем шул: бер ваҡытта ла бирешмәҫкә, алға ҡарап тура атларға. Ауырлыҡтар күп була, әммә ысын ир-егеттәр өсөн йырып үтә алмаҫлыҡ кәртәләр юҡ. Салауат батыр рухы беҙгә маяҡ һымаҡ, сөнки ул илебеҙ, телебеҙ, тип, йәнен аямай көрәшкән. Беҙ ҙә уның исеменә, есеменә тап төшөрмәҫкә тейешбеҙ. Мин Салауат исемен йөрөткән театр артисы булараҡ, әйтер һүҙемдә спектаклдәр аша халыҡҡа еткерергә тырышам. Башҡортостандың атҡаҙанған артисы тигән юғары исем йөрөтәм икән, тимәк, мин дөрөҫ юлдан барам.

Бер тәҡдимем бар: Сибайҙа ла Салауат урамы бар, әммә төп урамдарҙың береһе Салауат исемен йөрөтһә, бик тә шәп булыр ине. Ғөмүмән, Салауат исемендәге урамдар Башҡортостандағы һәр ауылда, һәр ҡалала булырға тейеш тип уйлайым.

# ТАНЫЙҘАР...

***Салауат ЗӘЙНЕТДИНОВ, сәйәхәтсе:*** Салауат тигән исемде миңә ағайым Заһир Зәйнетдин ҡушҡан. Ул бәләкәйҙән артист булыу тураһында хыялланған һәм һәр саҡ Салауат тураһында йырҙар йырлап йөрөгән. Мин тыуғанда ағайыма биш йәш булған, ҡустым Салауат кеүек батыр, көслә, моңло булһын тип, ошо исемде бирҙерткән.

Мин сәйәхәт итергә яратам. Ысынлап та, ҡайҙа ғына барһам да, Салауат Юлаевты беләләр, уның аша беҙҙе танырйҙар. Шуны ла әйтергә кәрәк, оҙон юлда үҙем менән бысаҡ та йөрөтәм. Айыу осраһа, мин уны бер һелтәүҙә йығам, тип, иптәштәрҙе шаяртып та алам. Айырыуса, ҡурайҙа уйнарға яратам. Шуға һәр саҡ үҙем менән ҡурай йөрөтәм. Тимәк, Салауат Юлаев менән ниндәйҙер бәйләнешем бар.

Мин үҙем Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында уҡыным, артабан Рәми Ғарипов уҡыған М. Горький исемендәге әҙәбиәт институтына уҡырға инеп, өс курс уҡыным. Видеоблог алып барам, спорт менән шөғөлләнәм.

Иң яратҡаным - сәйәхәт итеү. Оло юлға бер үҙем сығып китәм. Велосипедҡа атланып, ин тәүҙә Башҡортостанды йөрөп сыҡтым. Унан Ҡаҙанға юл алдым. Мәскәүгә лә велосипед менән барҙым. Быйыл яҙ Сочиҙа булдым. Әлеге мәлдә мин Абхазияла йөрөп ятам. Шулай булғас, хәҙер донъя буйлап гиҙәм, тиһәм дә була. Сочиға бер үҙем түгел, дуҫым менән барҙым. 30 апрель сығып киткәйнек, 27майҙа ғына барып еттек. Сәфәр еңел булыр тип уйлағайныҡ, тик ямғырына ла, ҡарына ла эләктек. Ошондай мажараларға тарығас, үҙебеҙ ниәтләгәндән оҙағыраҡ барҙыҡ.

Төрлө тарафтарҙа йәшәгән милләттәштәремә рәхмәт! Башҡорт флагы, ҡурай менән йөрөгәнде күрәләр ҙә, һәр саҡ нисек тә ярҙам итергә тырышалар, иғтибарһыҙ ҡалдырмайҙар. Ҡәнәштәрен бирәләр, яңы дуҫтар табырға булышалар. Халҡым менән ғорурланам, ә юлдар-сәфәрҙәр ошо хис-тойғоно көсәйтә генә. Башҡорт булып тыуыуым менән бәхетлемен.

# ФАМИЛИЯМДЫ ҒОРУР ЙӨРӨТӘМ

***Альберт САЛАУАТОВ, Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры актеры, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы:*** Мин Салауатов фамилияһын ҙур ғорурлыҡ тойғоһо менән йөрөтәм. Сығышым Баймаҡ районы Семеновск ауылынан булһа ла, төп нәҫелебеҙ Сыңғыҙ ауылынан. Унда салауатовтар әле лә йәшәй. Милли батырыбыҙ исемен йөрөтөү, беренсенән, ғорурлыҡ булһа, икенсенән, ул ҙур яуаплылыҡ өҫтәй.

Улдарыма Батырхан, Азамат тип исем ҡуштым. Өлкән улым - Салауатов Юлай. Батырыбыҙҙың исемен хөрмәтләһәк, уның халҡыбыҙ азатлығы өсөн ҡылған батырлығы мәңге хәтерҙә ҡаласаҡ, йәш быуындарға өлгө буласаҡ, тигәнгә инанғанмын. Нефтекама, Стәрлетамаҡ филармонияларында эшләгәндә лә фамилиям менән ғорурлана инем. Бигерәк тә әрмелә хеҙмәт иткәндә ғорурлыҡ тойғоһон нығыраҡ кисерҙем. Салауатов, тип, фамилиямды ҡыҫҡырып әйтһәләр, түбәм күккә тейгәндәй була ине. Дағстанда булған бер хеҙмәттәшемдең исеме Салауат ине. Хатта уның өсөн дә ғорурлана торғайным. Ҡыҫҡаһы, Салауатов фамилияһы минен өсөн ғорурлыҡ һәм яуаплылыҡ билдәһе.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДУҪЫҢ КҮП БУЛҺА...

## дошманың үҙе үлер

Дошман менән дуҫ булһаң, билеңдә балтаң булһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Тел торошона ҡарап был телдә һөйләшеүсе халыҡтың нисек йәшәүен аңларға була.

**(Хулио Кортасар).**

Кешеләрҙең бер-береһенә таш ташлауын һүгенеү һәм әр һүҙҙәре менән алыштырған тәүге кеше цивилизацияны ижад итеүсе булған.

**(Зигмунд Фрейд).**

Тормош эре планда ҡарағанда - трагедия, йыраҡтан ҡарағанда - комедия.

**(Чарли Чаплин).**

Сәйәсмәндәр, әлбиттә, ябай кешеләргә күберәк иғтибар бирә, ләкин был улар изгелекле тигәнде аңлатмай әле. Эт тә бит үҙенең бетенә күберәк иғтибар бүлә...

**(Патрик О'Рурк).**

"Бәхетте аҡсаға һатып алып булмай" тигән һүҙҙәрҙе, ғәҙәттә, бәхете лә, аҡсаһы ла булмағандарҙан ишетәһең.

**(Роберт Орбен).**

Ҡатын-ҡыҙҙың ысынында нимә уйлағанын белергә теләһәгеҙ, һөйләгәнен тыңламағыҙ, йөҙөнә ҡарағыҙ.

**(Оскар Уайльд).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Яҙыу өҫтәлендә бер өйөм таҙа ҡағыҙ биттәре ята. Ләкин берҙән-бер көндө кемдер бер ҡағыҙ бите алып, уны арҡыры-буйға һыҙғылап, һүрәттәр төшөрөп, нимәләрҙер яҙғылап һалып ҡуя. "Ниңә һин мине шундай мыҫҡыллауҙарға дусар иттең? - тип һорай йәнә әрнеп ҡағыҙ бите ҡәләмдән. - Минең аҡ ҡына йөҙөмдө һин ҡара буяуың менән бысраттың. Хәҙер мин кемгә кәрәк булам инде?.." "Улай уҡ борсолма әле һин, - ти уға ҡәләм. - Һине бәрәү ҙә мыҫҡыл итмәне һәм бысратманы ла, ә яҙыуҙар ярҙамында кәрәкле мәғлүмәттәр теркәне, һүрәттәр яһаны. Хәҙер һин ябай ғына ҡағыҙ кисәге түгел, ә кешенең аҡылын, фекерен һаҡлаусы - ошонда инде һинең бөтөн ҡиммәтең..."**

**Ҡәләм хаҡлы булып сыға. Эш өҫтәлен йыйыштырған саҡта кеше ваҡыт үтеү менән һарғайған таҙа ҡағыҙ биттәрен күреп ҡала һәм йыйып алып, уларҙы мейескә ырғытырға итә. Шул саҡта ҡағыҙ өйөмө араһында баяғы ниндәйҙер яҙыуҙар яҙылған, һүрәттәр төшөрөлгәнен күреп ҡала һәм уны башҡаларынан айырып алып, һаҡ ҡына өҫтәл тартмаһына һалып ҡуя. Кеше аҡылын һаҡлаған ҡағыҙ шулай юҡ ителеүҙән ҡотолоп ҡала..."**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# САЛАУАТ ЕРЕНӘ, БАЙРАМҒА КИЛ!



**Башҡортостанда Салауат Юлаев тыуып үҫкән Тәкәй ауылы урынында "Салауат ере" тарихи-мемориаль паркы асыла. Комплексты асыу тантанаһы милли батырыбыҙҙың тыуыуына 270 йыл тулыуға арналған "Салауат йыйыны" республика фольклор байрамы көнөнә - 16 июнгә билдәләнгән.**

Үҙенсәлекле тарихи парктың концепцияһын халыҡ шағиры Мостай Кәримдең "Салауат. Өн аралаш ете төш" әҫәре буйынса әҙерләгәндәр. Һәр үҙәндә "Тыуған илде һағыныу ", "Бала саҡ", "Әсә менән осрашыу", "Михнәтле юл", "Халыҡ менән һөйләшеү", "Салауат һәм уның атаһы Юлай" һәм "Йыуаныс" тигән тематик пункттар бар.

"Башинформ" агентлығында үткән матбуғат конференцияһында эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Зөһрә Гордиенко һөйләүенсә, "Салауат ере" паркын асыу республиканың төньяҡ-көнсығышында туризмды үҫтереү өсөн яңы этәргес бирергә тейеш. "Беҙҙең, Башҡортостан халҡы өсөн Салауат Юлаев милли герой ғына түгел, республикабыҙ символы ла. "Салауат ере" паркына туристарҙан һәм тарихсыларҙан тыш, ябай кешеләр ҙә килер, тип ышанам. Сөнки был комплекс Салауат Юлаев, ғөмүмән, Башҡортостан, уның тарихы, халҡыбыҙҙың ҡаһарманлығы хаҡында", - тип билдәләне министр.

"Салауат ере" тарихи-мемориаль паркын асыу Башҡортостан тарихында Салауат Юлаевтың иҫтәлеген һаҡлау йөһәтенән иң әһәмиәтле ваҡиға булмаҡсы, тип иҫәпләй республиканың Туризмды үҫтереү үҙәге директоры урынбаҫары Артур Иҙелбаев. "Сөнки Салауаттың тыуған ауылы Тәкәйҙең бер өлөшө нисәмә йылдар Силәбе өлкәһенә ҡарап ине. Тап шуға ла беҙ унда мемориаль комплекстар төҙөй алмаһыҡ. Өс йыл элек кенә төбәктәр араһындағы килешеү буйынса Силәбе өлкәһе ошо сик буйындағы биләмәнең бер өлөшөн Башҡортостанға тапшырҙы. Шул ваҡытта "Янғантау" геопаркы был урында "Салауат ере"н төҙөү эштәренә тотондо, беҙ уны 16 июндә асабыҙ", - тип һөйләне ул парктың барлыҡҡа килеү тарихы хаҡында.

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 24023

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "Полиграфия" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (3476) 35-31-02. (453261, БР, Салауат ҡалаһы, Ленин ур., 5/11).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
13 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 112032